ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

23-29 август (урағай) 2024

№33 (1126)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Асылына ҡайта мәғариф**



2

**Шифалы шифахана юбилейы**



5

**Дала улдары - ҡыпсаҡтар беҙ!**



7,12-13

**Хеҙмәттә табылған мал ғына...**

бәхет-ҡыуаныс-ҡәнәғәтлек килтерә



8-9


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Яҙмыш үҙенә буйһондормаҫ элек уны бала кеүек ҡулынан тотоп йөрөтөргә һәм үҙ иркеңә буйһондорорға кәрәк; ә инде яҙмыш һине үҙенә буйһондороп өлгөргән икән, уны яратыу фарыҙ.***

***(Ф. Ницше).***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ?

### Үткән уҡыу йылын йомғаҡлап, алдағы уҡыу йылын планлаштырып, шул уҡ ваҡытта эшегеҙҙе ҡатмарлаштыра торған проблемалар тураһында ни әйтерһегеҙ?

***Наил ӘМИНЕВ, Республика 2-се һанлы "Смарт" күп профилле полилингваль гимназия директоры:*** Тәүҙә шулай ҙа үткән уҡыу йылы йомғаҡтарына туҡталып китеү кәрәктер. Беҙҙең өсөн ул осор ярайһы көсөргәнешле лә, уңышлы ла булды. Иң ҡыуаныслыһы шул: беҙҙең гимназияның башҡорт теле уҡытыусылары командаһы республика кимәлендә тәүләп үткәрелгән "Остаз" конкурсында беренсе урын яуланы. Унда бөтөн ҡала һәм районлар мәктәптәре командаларға ойошоп, етди әҙерлек менән килгәйне һәм ошо ҙур конкурста еңеү яулауыбыҙ гимназиябыҙҙа эшләүсе башҡорт теле уҡытыусыларының республикала иң көслөләрҙән булыуын күрһәтте. Бынан тыш, "Йыл уҡытыусыһы" һөнәри оҫталыҡ конкурсында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының өс йыл рәттән лауреат булыуҙары ла күпте һөйләй: беҙҙең гимназия командаһы был йәһәттән республиканың иң яҡшы 5 командаһы иҫәбендә. Яңы уҡыу йылында ла ошо уңыштарыбыҙҙы ҡабатлап, нығытырға иҫәп тотабыҙ, шул уҡ "Остаз" һәм һөнәри оҫталыҡ конкурстарында мотлаҡ тағы ҡатнашасаҡбыҙ.

Уҡыусыларыбыҙ ҙа һөйөндөрә. Быйыл 14 бала 11-се класты уңышлы тамамлап сыҡты, шуларҙың 7-һе, йәғни 50 проценты, тип әйтергә кәрәк, мәктәпте миҙалға тамамланы. Төрлө предметтарҙан олимпиадаларҙа әүҙем сығыш яһайбыҙ: 7 уҡыусыбыҙ республика олимпиадалары призерҙары булды. 2024 йылда шулай уҡ беҙҙең "Етегән+" проекты БР Башлығы грантына конкурста еңеүселәр исемлегендә лайыҡлы урынын алды. Был проект "Мин - полиглот" уҡытыу-методик ҡулланма булышлығында полилингваль мәктәптәрҙә уҡыусы 7-12 йәшлек балаларға башҡорт, рус һәм инглиз телен нигеҙ кимәлдә өйрәнергә теләүселәр өсөн эшләнгән. "Етегән+" проекты 2022 йылдан бирле ғәмәлдә булып, уҡыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре иғтибарын шундуҡ үҙенә йәлеп итте. Шуға күрә беҙ заманса технологияларҙы файҙаланып, был проекттың мөмкинлектәрен артабан киңәйтергә ҡарар иттек. Комплект башҡорт телендәге үҙенсәлекле өн һәм хәрефтәрҙе өйрәтеүсе мультфильмдар, башҡорт, рус, инглиз телдәренән һүҙлек запасын байытыу һәм әүҙемләштереү маҡсатында үҫтереүсе карточкалар, аралашыу күнекмәләренә өйрәтеүсе интерактив әсбап, "Soft skills"ды үҫтереүсе инвестицион уйындарҙы үҙ эсенә ала. Яңы уҡыу йылынан башҡорт теле 6 йәшлек балалар өсөн әҙерлек төркөмдәренең дә уҡыу планына индереләсәк.

Редакция һорауының һуңғы өлөшөнә килгәндә, бында, әлбиттә, гимназияла уҡырға теләгән балалар һаны арта барғанлыҡтан, кадрҙар мәсьәләһен телгә алырға тура килә. Былтыр беҙҙең мәктәптә 1550 бала уҡыһа, быйыл уларҙың һаны 1950-гә барып етәсәк. Шуға күрә уҡытыусы кадрҙар мәсьәләһе, бөгөнгө көндә күпселек мәктәптәргә лә хас булғанса, проблемаға әйләнде, тип әйтер инем. Йыл һайын беҙгә математика, рус теле, башланғыс класс уҡытыусылары эҙләргә тура килә. Бая әйтеүемсә, был 21-се быуат мәктәптәре өсөн хас көнүҙәк мәсьәләләр, күрәһең...

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# "БАШҠОРТ АТЫ"...

## тарих дәресенә торорлоҡ!



**"...Донъяға ялалғандан бирле эйәр өҫтөнән төшмәгән башҡорттоң йөрәге ат тояғы тауышына көйләнгән. Шуға күрә уны ҡуҙғатыр өсөн дә бейеүебеҙҙә тояҡ тауышы ишетелергә тейеш. Ат тояғы тауышы ишетелдеме, башҡорттоң йөрәге дөпөлдәй, ҡупҡалйыый башлай..."**

Был юлдарҙы 2004 йылда "Байыҡ" тигән повесымды ижад иткәндә яҙғайным. Ә 15-16 августа Баймаҡ районының Граф күле буйында уҙған "Башҡорт аты" Халыҡ-ара фестивалендә повесымда яҙған юғарылағы һүҙҙәрҙең ысынбарлыҡҡа ашыуының шаһиты булдым. Оҙон-оҙаҡ итеп рух тураһында доклад һөйләү ҙә, нотоҡ уҡыу ҙа кәрәкмәй - милли кейем кейгән батыр егеттең, һылыу ҡыҙҙың арғымаҡта елеүенә тамаша ҡылыу ҙа, тояҡ тауыштарын тыңлау ҙа етә. Тояҡ тауышындағы рухи сигналдар булмышыбыҙҙағы, ҡаныбыҙҙағы үтә лә нескә милли тойғобоҙға тәьҫир итеп, боронғолоғобоҙҙо уятып, хисебеҙҙе һеңгәҙәтеп, аңыбыҙҙы аҡтарып сығара. "Башҡорт аты" фестивале тап ошондай тәьҫир көсө менән үҙенсәлекле саралыр тип уйлайым. Кем берәү әйтмешләй, былай булғаны юҡ ине әле. "Башҡорт аты" байрамы бына тигән тарих дәресенә торорлоҡ. Һүҙ арзанайған, фекерҙәр һайыҡҡан заманда рухи бөтөнлөгөбөҙҙө һаҡлар шаңлы тарихыбыҙ шаңдауын күңелебеҙгә алып килә "Башҡорт аты"!

Колхоз-совхоздар гөрләп эшләгән саҡтарҙа бындай рухтағы төп байрамыбыҙ һабантуй булды. Уны ваҡытында хеҙмәт алдынғыларын тәбрикләүгә ҡоролған байрамға әйләндерергә нисек кенә тырышмаһындар, ул барыбер төп рухи байрамыбыҙ булып ҡалды. Әммә донъялар үҙгәреп, ауыл хужалығының төп таянысын тәшкил иткән колхоз-совхоздар ҡолағас, һабантуйҙар, нисектер, төҫһөҙләнеп ҡалғандай тойолғайны. Был йәһәттән "Башҡорт аты" Халыҡ-ара фестивале бынамын тигән йолаға әйләнерлек ваҡиғаға торошло ла инде. Шулай түгелме ни?..

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

12+

✓ ***Бына тигән совет мәғарифы тәжрибәһен ситкә этеп, беҙгә ят булған белемде, педагогик эш алымдарын ҡулланыуға индерә башлағайныҡ бер заман. Имеш, улар беҙҙеке менән сағыштырғанда үрелеп буй етмәҫлек бейеклектә тора.***



*БАШҠОРТОСТАНЫМ*

# ТЫУҒАН ЕРҘӘ ТӨПЛӘНДЕК



**Гәзиттә республикаға ҡағылышлы күҙәтеүҙәрҙе ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барам. Әллә күпме күрмәгән матур урындар бар икән, тип һоҡланһам, проблемалар тураһында уҡып борсолам. Гәзиткә яҙышҡан кеше булмаһам да, үҙемдең фекерҙәр менән дә уртаҡлашҡым килде.**

Сығышым менән Федоровка районынан мин. Мәктәптән һуң ситкә сығып китеп, хәрби белем алып, ошо өлкәнән хаҡлы ялға сыҡтым. Хеҙмәтем буйынса илдең бик күп урындарында булырға тура килде. Әлбиттә, һәр төбәктең дә үҙенә генә хас күркәмлеге, матур-матур урындары бар, ғәжәпкә һалған күренештәре лә етерлек булды. Ләкин тыуған яҡ - ул тыуған яҡ инде, хаҡлы ялға сыҡҡас та үҙемдең тыуған районыма ҡайтып төпләндем.

Балалар баш ҡалала йәшәгәс, шул яҡҡа йыш йөрөйбөҙ. Шөкөр, юлдар төҙөк, Өфө-Ырымбур трассаһында юл яны инфраструктураһы ла яҡшы ғына кимәлдә үҫешкән. Шулай ҙа Мәләүездән Стәрлетамаҡҡа тиклемге юл киңәйтелһә ине, тигән теләк бар ине, оҙаҡламай ул тормошҡа ашырға тора. Күптән түгел генә республика етәкселеге Стәрлетамаҡтан Салауатҡа тиклем юл киңәйтеләсәк, тип белдерҙе. Бик мәслихәт эш. Хәүефһеҙлек тәүге урында булырға тейеш.

Юлдар, тигәндәй, республикала тимер юлына ла ҙур иғтибар бирелә. Бынан алда Өфө - Ырымбур маршруты буйлап яңы, заманса электричкаларҙың йөрөй башлауы был яҡтағы халыҡҡа бик ҡулай булды. Студенттарҙы, хаҡлы ялдағыларҙы ташламалы хаҡ менән йөрөтөүҙәренә ҙур рәхмәт тиергә генә ҡала. Күптән түгел Өфө менән Белорет араһында ла ошондай электричка йөрөй башлауына шатландым, оҙаҡламай Өфө - Магнитогорск араһында ла тиҙ йөрөшлө электричкалар ебәреләсәген уҡып ҡыуандым. Барыһы ла яҡшыға, шөкөр.

Курск өлкәһендә барған хәл-ваҡиғалар йөрәкте өҙә. Ошондай мәлдә республика халҡының берҙәм булып гуманитар ярҙам йыйыуын күреп, яҡташтарым өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисерәм. Берҙәмлек беҙҙе көслө итә.

Ҡыҙҙарым мәктәптә эшләгәс, уҡытыусыларҙың йыл да уҙғарылған август кәңәшмәһен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп барабыҙ. Быйыл күңелде һөйөндөргән яңылыҡтар етерлек булды. Башҡортостан Башлығы үҙенең сығышында һуңғы биш йылда төбәктә 44 яңы мәктәп сафҡа индерелеүе тураһында белдерҙе, шулай уҡ әллә күпме балалар баҡсаһы ишектәрен асҡан, төҙөкләндереү эштәре башҡарылған. Йәмғиәттең киләсәген уҡытыусылар тәрбиәләй, тиһәм дә хата булмаҫ. Шуға күрә икенсе йылдан башлап уҡытыусыларға икешәр аҙнаға санаторийҙарға юллама биреү мәсьәләһенең күтәрелеүен бик хуплап тыңлап ултырҙыҡ.

Республикала "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге" программаһының уңышлы эшләүен билдәләп үтергә кәрәк. Белорет ҡалаһында йәшәгән таныштарым ошо программа сиктәрендә яңы ғына булып уҙған "Башҡорт аты" Халыҡ-ара фестиваленә барып ҡайтыуҙарын бик ҡыҙыҡтырып һөйләне. Ҙур, уңайлы автобустарҙа юлдың үткәне лә һиҙелмәй, ти. Барғансы-ҡайтҡансы үҙебеҙҙең йәшлек йырҙарын йырлап, йәштәштәре менән рәхәтләнеп аралашып йөрөп ҡайтыуын, бик күңелле булыуын һөйләне. Хаҡлы ялдағыларҙы онотмай, махсус проект булдырып, төрлө урындарға алып йөрөүҙәренә рәхмәттән башҡа һүҙем юҡ, тип шатлығын йәшермәй танышыбыҙ. Ҡатыным да ошо программа буйынса баш ҡалаға барғайны, шулай уҡ күңелле булып ҡайтты.

Республикабыҙ гөрләп үҫешә, килеп тыуған мәсьәләләр хәл ителә, халыҡ үҙе лә әүҙем, берҙәм. Артабан да барыһы ла яҡшы булһын.

**Фәнил ӘБҮЗӘРОВ.**
**Федоровка районы.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

**Республикала традицион август кәңәшмәләре бара. Был ваҡиғаны уҡытыусылар һәр саҡ эске тулҡынланыу менән көтөп ала. Уҙған уҡыу йылы һөҙөмтәләрен байҡау, алдағы бурыстарҙы барлау һәм анализлау сараһы улар өсөн байрамға әйләнә.**



# АСЫЛЫНА ҠАЙТА МӘҒАРИФ

Ысынлап та, ниндәй яңы эштәр, бурыстар көтә беҙҙең мәғариф өлкәһен быйыл? Ваҡыт, замана, дәүер икенсе бит инде хәҙер. Нисә йылдар буйы йәнде көйҙөргән, мәғариф системаһын да урап үтмәгән Көнбайыш ҡалыптарынан арына башланыҡ, шөкөр. Бына тигән совет мәғарифы тәжрибәһен ситкә этеп, беҙгә ят булған белемде, педагогик эш алымдарын ҡулланыуға индерә башлағайныҡ бер заман. Имеш, улар беҙҙеке менән сағыштырғанда үрелеп буй етмәҫлек бейеклектә тора, беҙҙең мәғарифты тағы ла алға илтәсәк...

Улай булманы шул. Беҙҙең белем биреү системаһы бейеклегенә күтәрелә алманы уларҙың педагогик алымдары. Олораҡ кешеләр хәтерләйҙер китаптарыбыҙҙың, дәреслектәрҙең ниндәй булғанын - улар фәнни яҡтан да, тәрбиәүи йәһәттән дә, йәшәйеш белеменә өйрәтеү яғынан да бер ни менән дә сағыштырғыһыҙ ине. Шуға ла уҡыусыларыбыҙҙың белем кимәле бик тәрән ине, улар донъя кимәлендәге һәр төрлө олимпиада, конкурс, бәйгеләрҙә берәүгә лә ал бирмәй торғайны.

Ниһайәт, хеҙмәт дәрестәре ҡайта мәктәпкә. Был да беҙҙе ҡыуандыра. Улар етмеш төрлө һөнәргә эйә булған ысын ир-егеттәр, ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайната алған ысын хужабикәләр тәрбиәләй торған дәрестәр буласаҡ.

Тағы ла бер яңылык - Ватанды һаҡлаусылар әҙерләүгә йөҙ борабыҙ. Махсус хәрби операция бының актуаль булыуын тағы ла бер иҫбат итте. Бына шундай матур, ҡыйыу бурыстар ҡуйылды яңы уҡыу йылына. Улар әле муниципалитеттар кимәлендә лә, һәр бер мәктәп педсоветтарында ла тәфсирләп ҡараласаҡ. Бына шунда инде аныҡ йүнәлештәр билдәләнәсәк. Алға, коллегалар!

**Әлфис ҒАЯЗОВ,**
**Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институты ректоры, педагогия фәндәре докторы, профессор.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

***Үткән уҡыу йылын йомғаҡлап, алдағы уҡыу йылын планлаштырып, шул уҡ ваҡытта эшегеҙҙе ҡатмарлаштыра торған проблемалар тураһында ни әйтерһегеҙ?***

***Илнур СӘЛИХОВ, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:*** Үткән уҡыу йылының төп уңышы, әлбиттә, биш йыл гимназиябыҙҙа белем алып, имтихан һынауҙарын уңышлы үткән 11-се класс уҡыусыларын оло тормош юлына оҙатыу булды. 139 сығарылыш синыф уҡыусыһының 72-һенә уҡыуҙа өлгәшкән уңыштары һәм өлгөлө тәртибе өсөн алтын һәм көмөш миҙалдар тапшырылды. Бөгөнгө көндә барыһы ла үҙҙәре теләгән юғары уҡыу йорттарына инеп, студент булараҡ яңы уҡыу йылын башларға әҙерләнеп йөрөй. Әйткәндәй, минең үҙем өсөн дә быйылғы йыл эш һөҙөмтәләрен барлау йылы, тиергә була: был данлыҡлы уҡыу йортона директор булараҡ эшкә килеүемә - биш йыл. Ошо ваҡыт эсендә уҡыусыларыбыҙҙың олимпиада-конкурстарҙа әүҙемерәк ҡатнашыуын, еңеүҙәр һаны бермә-бер артыуын күреп шатланабыҙ. Был - гимназия коллективының эҙмә-эҙлекле эшенең һөҙөмтәһе ул.

Эш һөҙөмтәһе тураһында һөйләгәндә һәр педагогҡа һәм белем усағы етәкселегенә үткән уҡыу йылына йомғаҡ, киләһенә яңы маҡсаттар, эш йүнәлеше биргән педагогтарҙың август кәңәшмәһен телгә алып китергә кәрәктер. Быйыл коллегалар менән Стәрлетамаҡ ҡалаһында йыйылдыҡ һәм ундағы белем усаҡтарын күреп, тәжрибә уртаҡлашып, уртаҡ мәсьәләләр буйынса фекер алышып ҡайттыҡ. Педагогтарҙың август кәңәшмәһен Өфөлә генә түгел, республиканың башҡа төбәктәрендә лә ойоштороу кеүек бик ыңғай йоланы тергеҙеүҙе барыбыҙ ҙа баһаланыҡ. Был бик яҡшы тәжрибә. Бына был юлы ла Стәрлетамаҡтың белем усаҡтары менән яҡындан таныша алдыҡ, төҙөкләндерелгән мәктәп биналарын күрҙек. Ғөмүмән, бындай саралар үткәндә ҡала йәки район үҙәге тотош матурая, юлдар төҙөкләндерелә, иң мөһиме, педагогик коллектив тағы ла нығыраҡ берләшә. Киләһе йылдарҙа ошо уңышлы тәжрибә дауам итер, тип өмөтләнәбеҙ. Бынан тыш, кәңәшмәләге эшлекле һөйләшеү барышында Башҡортостан Башлығы Радий Фәрит улы уҡытыусыларҙы шифаханаларға ял итергә йүнәлтеү зарурлығы тураһында әйтеп шатландырҙы.

Ниндәй генә белем усағы етәксеһенә мөрәжәғәт итһәгеҙ ҙә, моғайын, кадрҙар мәсьәләһен алға ҡуйып, ошо юҫыҡта тағы ла әүҙемерәк эшләргә кәрәк булыуын әйтерҙәр. Сөнки был ауыл мәктәбе өсөн дә, ҡаланыҡына ла, республика кимәлендәгенә лә берҙәй мөһим тема. Коллегалар менән тағы бер ҡат йәш уҡытыусылар тәрбиәләп үҫтереүҙең мөһимлеген, был маҡсатта мәғариф системаһының һәр кимәлендә ныҡлы эш алып барыуҙың зарурлығын билдәләп киттек. Юғары белем алғандан һуң уҡытыусылыҡ эшендә ҡалһын өсөн йәш белгескә уңайлы шарттар булдырылыуы мөһим. Әлеге көндә беҙҙең гимназияла ла йәш педагогтар эшләй, коллективтың 30 процент тирәһе ир-егеттәр булыуы һөйөнөслө. "Ир-егет коридорҙан үтеп кенә китһә лә, был яҡшы тәрбиә өлгөһө", - ти торғайны Гөлназ Ғафир ҡыҙы Әхмәҙиева. Ысынлап та шулай.

Ә инде киләһе уҡыу йылына ниәттәргә килгәндә, белем усағыбыҙ үҙенең 80 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәк. Ошо күркәм дата айҡанлы төрлө байрам саралары, осрашыуҙар, яңы проекттар, үткән йылдарға йомғаҡтар һәм киләһе биш йыллыҡҡа пландар - барыһы ла булыр. Етеп килгән Белем көнө менән барыһын да тәбрикләйем, уңышлы уҡыу йылы теләйем.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда һайлаусыларға 6, 7 һәм 8 сентябрҙәге һайлау тураһында адреслы мәғлүмәт биреү эше башланды. 28 авгусҡа тиклем участка һайлау комиссияһы ағзалары өй беренсә йөрөп сығырға тейеш. Улар халыҡҡа уларҙың һайлау участкаһы, "Мобиль һайлаусы" технологияһының мөмкинлектәре тураһында һөйләй, өйҙә тауыш бирергә теләүселәрҙең исемлеген аныҡлай. Комиссия хеҙмәткәре мотлаҡ рәүештә үҙенең документтарын күрһәтә һәм һеҙҙең шәхси мәғлүмәттәр менән ҡыҙыҡһынмай.

✓Башҡортостанда аҙ тәьмин ителгән ишле ғаиләләр Дәүләт хеҙмәттәре аша мәктәп формаһы өсөн компенсация алырға мөмкин. Аҡса ике уҡыу йылына бер тапҡыр ата-әсәнең береһенә тәғәйенләнә. Мәктәп формаһы өсөн компенсацияның максималь суммаһы - 4489 һум. Быйыл аҡсаны 20 декабргә тиклем кире ҡайтарырға була. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ғаиләнең һәр ағзаһына уртаса эш хаҡы йәшәү минимумы дәүмәленән артмаған ғаиләләр аҙ тәьмин ителгән тип иҫәпләнә. 2024 йылдың 1 ғинуарына ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда был эшкә һәләтле халыҡ өсөн - 14 991 һум, балалар өсөн - 13 340 һум.

✓Башҡортостанда янғындар, шул иҫәптән тәбиғәт янғындары буйынса хәлдең тотороҡланыуына бәйле Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаров 19 сентябрҙән янғынға ҡаршы махсус режимды ғәмәлдән сығарыу тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ул республикала 27 апрелдән индерелгәйне. Янғынға ҡаршы махсус режим осоронда янғын хәүефһеҙлегенә өҫтәмә талаптар билдәләнә (шул иҫәптән усаҡ яғыуҙы, ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙә ҡоро үлән үртәүҙе тыйыу, граждандарға урманға барыуҙы сикләү, урман һәм башҡа ландшафт (тәбиғәт) янғындарын булдырмауға йүнәлтелгән өҫтәмә саралар күреү).

✓Рәсәй Хөкүмәте социаль газ үткәреү программаһын киңәйтте. Баҡса ширҡәттәрендә урынлашҡан участка хужалары социаль газлаштырыу программаһында ҡатнашырға мөмкин. Был турала ҡарарға Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Газ селтәрҙәре газ үткәрелгән тораҡ пункттар янындағы ер участкалары сигенә тиклем бушлай һуҙыла. Йорт хужалығына һәм ер участкаһына хоҡуҡ билдәләүсе документтар булырға тейеш. Ғаризаны өй хужаһы ла, баҡса ширҡәте рәйесе лә бирә ала. Газлаштырыу тураһында ҡарар баҡса ширҡәте ағзаларының дөйөм йыйылышында ҡабул ителергә тейеш.

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

**Үткән уҡыу йылын йомғаҡлап, алдағы уҡыу йылын планлаштырып, шул уҡ ваҡытта эшегеҙҙе ҡатмарлаштыра торған проблемалар тураһында ни әйтерһегеҙ?**



***Ришат САБИТОВ, Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы директоры:*** Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы сауҙа һәм йәмәғәт туҡланыуы өлкәһендә белгестәр әҙерләүсе тәүге колледж булараҡ асылған, күп йылдар алдынғы уҡыу йорттары рәтендә килә һәм беҙ ошо эште дауам итәбеҙ. Колледждарға ҡарата ҡуйылған барлыҡ талаптар буйынса маҡсатлы эшләп киләбеҙ һәм яңыраҡ Рәсәйҙең иң алдынғы колледжы исемен яуланыҡ, илдең 100 иң яҡшы колледжы исемлегенә индек. Былтыр төрлө өлкәләрҙә еңеүҙәребеҙ күп булды, иң мөһимдәренә килгәндә, уҡыу йортобоҙ уҡытыу методикаһы буйынса федераль статусҡа эйә булды һәм беҙ методика буйынса Бөтә Рәсәй конкурсында икенсе урын яуланыҡ. Шулай уҡ башҡорт теле кабинетыбыҙ республика колледждары араһында икенсе урын алды. Беҙҙә, ғөмүмән, башҡорт, рус, инглиз телдәре яҡшы уҡытыла. Мәҫәлән, "Родина" кинотеатры менән хеҙмәттәшлектә "Рәми дәрестәре" үткәрәбеҙ, студенттар башҡорт теле дәресендә кинотеатрҙа ҡараған фильмда ҡатнашҡан актерҙар менән осраша. Үткән уҡыу йылында башҡорт теле буйынса тағы бер проект башланыҡ - "Осҡон" тип аталды ул, унда Өфөнөң барлыҡ колледждары ҡатнашты һәм студенттарҙы ла, уҡытыусыларҙы ла ҡыҙыҡһындырҙы. Киләсәктә был проекты Башҡортостан Башлығы грантына ла тәҡдим итергә ниәтләнек.

Үткән уҡыу йылында һөнәри оҫталыҡ конкурстарына ла ҙур иғтибар бүлдек. Бөтә Рәсәй конкурстарының республика этабында ашнаҡсылар араһында, ресторан сервисы буйынса беренсе урындар, бухгалтерия иҫәбе буйынса - өсөнсө, туризмда 4-5 урындарҙы алып торабыҙ. Федераль кимәлдә ҡатнашып та призлы урындарға сығыуҙы маҡсат итәбеҙ, әлегә илдең 80-дән ашыу субъекты араһында 20-се, 15-се, 10-сы урындарҙа киләбеҙ.

Эшебеҙҙә өсөнсө ҙур йүнәлеш - йәш быуынды һөнәри йәһәттән генә түгел, кешелек ҡиммәттәре яғынан да үҫтереү. Төп талабым - бала колледжда төп дәрестәрҙе уҡыуҙан тыш, ниндәйҙер эш менән шөғөлләнергә тейеш. Әгәр ул спортты һайламаһа, ижадҡа, үҙидараға, ирекмәндәр клубына, бейеү, йыр, театр түңәрәктәренә мотлаҡ йөрөргә тейеш. Беҙҙә тиҫтәләгән спорт түңәрәге бушлай эшләй, ике ҙур спорт залы бар. Һуңғы ике йылда балалар ысынлап та әүҙемләште. Ятаҡта иртәнге гимнастикаға барыһын да уятып сығарабыҙ.

Ошо көндәрҙә үткән республика педагогтарының август кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров беҙҙең ниндәй проблемаларыбыҙ бар - шуларҙы нисек хәл итеү тураһында фекерҙәр еткерҙе. Матди-техник базаны иң беренсе урынға ҡуйҙы һәм бюджеттан күп сығымдар планлаштырылыуын билдәләне. Беҙ бындай ярҙамды тойҙоҡ, "Профессионалитет" тигән программаға ярашлы күп колледждар үҙҙәренең матди-техник базаһын яҡшыртты. Беҙҙең колледж был программаға 2026 йылда ҡушылырға тейеш. Бынан тыш, Радий Фәрит улы кадрҙар мәсьәләһен күтәрҙе һәм улары һаҡлап ҡалыу, үҫтереү, ярҙам итеү ысулдарына туҡталды. Тағы ла вуздарҙа уҡығандарҙы ғына түгел, колледждарҙа белем алған балаларҙы ла күтәрмәләү буйынса бик әһәмиәтле фекерҙәр яңғыраны. Был да бик мөһим мәсьәлә.

Бөгөн беҙгә ата-әсәләр менән эш алып барыу ҙа хәл ителәһе мәсьәләләрҙең береһе. Әле бына яңы уҡыу йылына уҡыусылар ҡабул итәбеҙ, ата-әсәләр балаларын документтар тапшырырға алып килде. Колледж һикәлтәһендә тәмәке тартып торған берәүгә иҫкәртеү яһағайным, ул "Мин бит әсәй", ти, рәссалап. Әсәй булғас, айырыуса бында тәмәке тартып тороу килешмәй. Балаларҙан бигерәк ата-әсәләр менән аңлатыу эше алып барыу кәрәк. Тыуған илгә яратыу тойғоһо һәм башҡалар тураһында күп һөйләргә була, әммә бәләкәй баланың күңеле таҙа булһын, тигән уйҙы тәүҙә уның атаһына һәм әсәһенә еткермәйенсә, һөҙөмтә булмаясаҡ.

Колледж алдынғы булһын өсөн йыл да үҙгәреп торорға тейеш. Шуға хеҙмәт баҙарында талап ителгән һөнәрҙәрҙе күҙәтеп торабыҙ һәм йыл да яңы уҡытыу йүнәлештәре асабыҙ. Быйыл бына БР Юстиция буйынса дәүләт комитеты менән һөйләшеп, юриспруденция йүнәлеше астыҡ. Ғөмүмән, сауҙа, туризм, иҡтисад өлкәһендә эшләгән барыһына ла хоҡуҡты белеү бик мөһим. Быны тәүге йылда түләүле булыуына ҡарамаҫтан, яңы йүнәлешкә уҡырға килергә теләүселәр күп булыуы ла раҫланы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**һәм Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

## ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# " УЛАР ҮЛЕМГӘ ЕБӘРЕЛДЕ..."



**АҠШ-ты әйтәм, Украинанан ғарҡ булды мәллә, бөгөнгө көн Израилде Ирандың яуап һөжүме ихтималлығынан ҡурсылап, бөтөн көсөн Яҡын Көнсығышҡа табан борҙо, тип хәбәр итә Рен ТВ каналы The Time of Israel гәзитенә һылтанып. Был маҡсатта АҠШ көтөлмәгән хәлгә әҙер булыуҙарын белдереүсе Франция һәм Бөйөк Британия менән тығыҙ бәйләнештә тора. Шул уҡ ваҡытта баҫма сығанағы белдереүенсә, Вашингтон, йәнәһе, Яҡын Көнсығышта ниндәйҙер дипломатик ғәмәл башҡара, атап әйткәндә, Газа секторына ут туктатылған хәлдә ул Ирандың Израилгә һөжүмдән тыйыласағына өмөтләнеүен белдерә.**

Америка, тигәндән, унда ла хәҙер Рәсәйҙең Украиналағы Махсус операцияһы маҡсаттарын асыҡтан-асыҡ яҡлаусылар бар икән. АҠШ-тың билдәле радиожурналисы, сәйәси сатирик һәм һуғыштарға ҡаршы әүҙемсе Ренди Кредико Украинаны тиҙерәк денацификациялап, НАТО-ны үҙенә ҡайтарып ебәрергә кәрәк, ти. Сөнки уның һүҙҙәре менән әйткәндә, "Рәсәйгә террорсылар менән һөйләшеп тороу ҙа кәрәкмәй". Ни әйтәһең, ауыҙына бал да май был егеттең.

Тағы бер ир-егет бар икән әле унда: АҠШ Ҡораллы Көстәренең отставкалағы разведка офицеры Скотт Риттер урындағы "Through the eyes" YouTube-каналы менән әңгәмәлә хәбәр һалыуынса, әгәр НАТО ағзалары Рәсәй Федерацияһына ҡаршы һуғыш башлай ҡалһа, Көнбайыштың космик спутниктары юҡҡа сығарыласаҡ һәм Төньяҡ Атлантика альянсы оборонаһының бөтөн системаһы үҙ режимында эшләүҙән туктаясаҡ, тип иҫкәртә. Ләкин, күреүегеҙсә, был егет сатирик түгел инде, ә хәрби өлкәлә хәбәрҙар етди офицер булараҡ һөйләй: ысындымы-буштымы - уныһы мөһим дә түгелдер, бәлки, ләкин НАТО-ның бөтөн ғәмәлдәре спутник аппараттарына бәйле булыуын ул яҡшы белә һәм тап шуны АҠШ менән уның союзниктарының "ахиллес табаны" тип атай.

Һәм, ысынлап та, үткән аҙнала РФ Президентының белдереүенсә, һөйләшеүҙәрҙе үҙ файҙаһына борорға иҫәп тотоп, Курск өлкәһенә бәреп ингән Киев режимы менән һөйләшеү тураһында һүҙ ҙә булырға мөмкин түгел. Ниһайәт, ГФР-ға һәм бөтөн донъяға "Северный поток"тың шартлатылыуы артында кемдең тороуы асыҡланды. Рәсәй бензин экспортлауҙы тыйҙы. В.Путин, Көнбайыштың украиндар ҡулы менән Рәсәйгә ҡаршы һуғышыуын тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрҙө һәм Курск өсөн дошман лайыҡлы яуабын аласаҡ, ә Махсус хәрби операцияның маҡсаттарына өлгәшеләсәк, тип белдерҙе. РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, Рәсәйҙең "Төньяҡ" хәрби төркөмө Курск өлкәһе урмандарында тағы ла төпкәрәк үтеп инергә ниәтләгән украин төркөмдәрен эҙәрлекләй һәм юҡ итә бара.

Украинаның хаттин ашыуҙары европалыларҙың нервыһында уйнай башланы, тип яҙа Новости Рәсәй агентлығы хәбәрсеһе. Сөнки Курскиға һөжүм Үҙәк һәм Көнбайыш Европаны зәңгәр яғыулыҡ менән тәьмин итеүҙә проблемалар килтереп тыуҙырҙы: Европаға, тәү сиратта Словакия менән Австрияға, берҙән-бер яғыулыҡ артерияһы районында һуғыштар бара. "Суджа" газ үлсәү станцияһы аша зәңгәр яғыулыҡ өҙләкһеҙ бирелеп торолһа ла хаҡтар шундуҡ юғары үрләне: үткән аҙна дүшәмбеһендә уҡ 6 процентҡа өҫтәлеп, газ хаҡының мең кубометры 480 долларға етте һәм был йыллыҡ рекорд кимәлен күрһәтте. Ә бына Рәсәй менән Украина араһында транзитҡа контракт ошо йылдың ахырынаса ғына ғәмәлдә һәм уны дауам итеү хаҡында һүҙ алып барылмай.

Һүҙҙең ахырын тағы ла бер Америка сәйәсмәне, АҠШ Ҡораллы Көстәренең отставкалағы подполковнигы Эрл Расмуссендың 17 августа "Известия" гәзите менән әңгәмәһендә әйткәндәре менән тамамлағы килә: "Киевтың Курск АЭС-ына һөжүм ихтималлығы мине йылдан ашыу борсой һәм ундай провокация булмаҫ, тип әйтә алмайым. Дөрөҫөн әйткәндә, был көсһеҙләктән килеп тыуған дыуамаллыҡ: Украина үҙенең иң яҡшы тип иҫәпләнгән өс бригадаһын Курскиға һөсләтеп, асылда уларҙы үлемгә ебәрҙе..."

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөнөң "Бурсервис" компаниялар төркөмө 2026 йылға хеҙмәткәрҙәр һанын ике тапҡырға арттырырға ниәтләй. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә "Бурсервис" ғилми-производство предприятиеһының генераль директоры Марат Дауытов хәбәр итте. Производствола барлығы 1 000 квалификациялы белгес эшләй, улар инновациялы продукцияның меңдән ашыу төрөн сығара. Ҡорамалдарҙы Рәсәй тәбәктәренә һәм донъяның һигеҙ иленә - Беларусь, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Әзербайжан, Мысыр, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Иран һәм Ливияға - экспортлайҙар.

✓2024 йылда Өфөлә мәҙәни мираҫ объекттарын реставрациялау буйынса эштәр әүҙем дауам итә. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә республиканың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ етәксеһе Салауат Ҡолбәхтин хәбәр итте. "Тарихи ҡиммәткә эйә булған биналарҙың фасадтарын һәм ҡыйыҡтарын тергеҙеүгә айырыуса иғтибар бүләбеҙ. Элемтә йорто, Коммерция училищеһы һәм Башпотребсоюз биналары кеүек төп объекттарҙа фасадтарҙың штукатур-буяу ҡатламын тергеҙеү буйынса эштәр алып барыла", - тип билдәләне Салауат Ҡолбәхтин.

✓Тупраҡтың артыҡ дымланыуы сәбәпле Башҡортостандың ауыл хужалығы етештереүселәренә килтерелгән зыян суммаһы 1,06 миллиард һум тәшкил итә. Яҡынса 120,5 мең гектар майҙанда уңыш юҡҡа сыҡҡан, шуның 112,3 мең гектарын бөртөклөләр һәм ҡуҙаҡлылар биләй. Хөкүмәт вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов һүҙҙәренсә, 11 июлдән 11 сентябргә тиклем ғәҙәттән тыш хәл режимын индереү тураһында республика Хөкүмәте ҡарарының проекты әҙерләнгән. Әлегә зыян күләме 33 районда алынған мәғлүмәттәргә таянып иҫәпләнгән.

✓Халыҡ фронты тарафынан әҙерләнгән гуманитар йөктөң тағы бер партияһы Өфөнән Курск өлкәһенә юлланды. Украина Ҡораллы Көстәре һөжүменән зыян күргәндәр өсөн дарыуҙар, аҙыҡ-түлек, түшәк кәрәк-яраҡтары, гигиена саралары һәм мал аҙығы йыйылған. Был инде Курск халҡына ебәрелгән икенсе гуманитар ярҙам. Дөйөм алғанда, Курск өлкәһе өсөн Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк бүлексәһе биш тоннанан ашыу гуманитар ярҙам йыйған. Гуманитар ярҙамды Өфөлә Киров урамы, 1-се йорт адресы буйынса 138-се кабинетҡа тапшырырға мөмкин.

✓ Бурысыбыҙ - барлыҡ юғары класс уҡыусылары һәм колледж студенттары "Патриот" паркында биш көнлөк курстарҙы үтһен, тейешле күнекмәләргә эйә булһын, һәм был уларҙың аҡылында һәм йөрәктәрендә үҙ урынын алһын.



ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ ТУРИСТИК КЛАСТЕР

**Баймаҡ районында үткән "Башҡорт аты" фестивалендәге майҙансыҡтарҙың береһендә "Ирәндек" туристик кластерын булдырыу хаҡында һөйләштеләр.** Республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Зөһрә Гордиенко белдереүенсә, кластер Баймаҡ һәм Әбйәлил райондарын берләштерергә тейеш. Уның төп маҡсаты - ат туризмын үҫтереүгә булышлыҡ итеү. Башҡортостандың туристик биләмәләрен үҫтереү буйынса проект офисы етәксеһе Заһир Ҡотлосурин проекттың концепцияһы хаҡында ентекле һөйләне: "Иң мөһиме - унда аттар, матур Ирәндек һырты, шифалы ҡымыҙ бар. Былар ат туризмын үҫтереү өсөн яҡшы тәүшарттар. Башҡорт аты сыҙамлы, ул ҡышҡы һыуыҡтарҙа тибендә үҙенә аҙыҡ табып йөрөргә мөмкин. Биләмәлә бик күп заманса яҡшы туристик үҙәктәр барлыҡҡа килергә тейеш. Туристик маршруттарҙы үҫтереүгә хөкүмәт гранттарын алған эшҡыуарҙар бар ҙа инде", - тип билдәләне спикер.

✓ **Стәрлетамаҡта, Мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһе башланғанға тиклем, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белем биреү учреждениелары директорҙарына 17 яңы автобус асҡысын тапшырҙы.** "Республиканың 52 меңдән ашыу балаһының уҡыу көнө мәктәп автобусынан башлана - был ҙур һан. Иң мөһиме - юлдарҙа хәүефһеҙлек булһын. Ә хәүефһеҙлек - ул яңы, яҡшы автобустар һәм профессиональ водителдәр. Шуға күрә бөгөн мин яңы техника асҡыстарын ҙур теләк менән тапшырам", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров. Яңы автобустар Асҡын, Ауырғазы, Балтас, Дәүләкән, Дыуан, Йәрмәкәй, Мәсетле, Миәкә, Тәтешле, Өфө, Әбйәлил, Яңауыл районларына һәм Күмертау, Сибай, Өфө ҡалалары мәктәптәренә юлланды. "Вектор NEXT" маркалы яңы быуын автобустары навигация системаһы, тахографтар менән йыһазландырылған, заманса хәүефһеҙлек талаптарына яуап бирә. Әйткәндәй, 2019 - 2024 йылдарҙа мәктәп автопарктары 700 яңы автобус менән тулыланған.

✓ **Стәрлетамаҡҡа эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Иң яҡшы мәктәп ашханаһы - 2024" Бөтә Рәсәй конкурсының республика этабында еңеүсе туҡланыу операторҙары күргәҙмәһе менән танышты.** Мәсәлән, ауыл мәктәптәре араһында Благовар районы Языково ауылының урта дөйөм белем биреү мәктәбе иң яҡшыһы тип табылды. Бында "Опторг" компанияһы әҙер төшкө ашты дүрт ҡатлы герметик төргәктәге реторт-пакеттарҙа тәҡдим итә. Өфө мәктәптәре араһында иң яҡшыһы тип 1-се лицейҙың ашханаһы табылды. "Балалар һәм диетик туҡланыу үҙәге" - Башҡортостандың баш ҡалаһының 128 мәктәбен һәм 221 балалар баҡсаһын хеҙмәтләндергән ҙур операторҙарҙың береһе. "Иң мөһиме - ҡайнар аш менән тәьмин итеүҙе һәм сәләмәт туҡланыуҙы яйға һалдыҡ, - тине Башҡортостан Башлығы. - Биш йыл элек мәктәп ашханаларының ни бары 15-20 процентында ғына урындағы ит тәҡдим ителгән булһа, хәҙер ашханаларҙың күпселегендә - үҙебеҙҙең етештереүселәр килтергән тәмле һәм файҙалы ит".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# УҠЫТЫУСЫЛАР МАЙҘАНЫНДА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 17 августа Стәрлетамаҡта үткән Мәғариф буйынса республика кәңәшмәһенең пленар ултырышында сығыш яһаны. Педагогтарҙың традицион август кәңәшмәһе "Төбәк мәғариф системаһының стратегик йүнәлештәре" темаһына арналды.**



Башҡортостан Башлығы республика мәғариф системаһын үҫтереүҙең төп бурыстарын билдәләп, шулай тине: "Педагогик берләшмә эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе - Махсус хәрби операцияға ярҙам итеү. Уҡытыусылар өсөн был, тәү сиратта, йәштәребеҙҙең аҡылы һәм рухы өсөн көрәш, сөнки Махсус хәрби операция, асылда, илебеҙ һәм Көнбайыш цивилизацияһы араһында барған глобаль конфликт күренештәренең иң юғары нөктәһе булып тора. Беҙ башланғыс хәрби әҙерлек һәм патриотик тәрбиә биреүҙең ярайһы уҡ киң инфраструктураһын булдырҙыҡ. Был, әлбиттә, ошо эштең мөһим инструменттарына әүерелеүсе "Патриот" паркы. Бурысыбыҙ - барлыҡ юғары класс уҡыусылары һәм колледж студенттары "Патриот" паркында биш көнлөк курстарҙы үтһен, тейешле күнекмәләргә эйә булһын, һәм был уларҙың аҡылында һәм йөрәктәрендә үҙ урынын алһын".

Башҡарылған эшкә йомғаҡ яһап, Башҡортостан Башлығы, мәғариф сифаты менән идара итеүҙең төбәк механизмдарын баһалау буйынса төбәктәр рейтингында республика 71-се урындан (2020 йыл) 17-се урынға (2022 йыл) күтәрелде, тип билдәләне. 2024 йылда Башҡортостан уҡыусылар араһындағы Волга буйы федераль округының интеллектуаль олимпиадаһы йомғаҡтары буйынса өс лидер иҫәбенә инде, ә Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһында еңеүселәр һәм призерҙар һаны буйынса алтынсы урында булды, тине.

Билдәләнеүенсә, 2024 йылда Башҡортостандан Берҙәм дәүләт имтиханы йомғаҡтары буйынса йөҙ балл менән билдәләнгән эштәр һаны рекордлы күрһәткескә етте - 155 эш иң юғары балға лайыҡ булды. Был уҙған йылға ҡарағанда ике тапҡырға тиерлек күберәк. Биш йыл эсендә 22 меңдән ашыу урынға иҫәпләнгән 44 мәктәп сафҡа индерелде. Берләштерелгән объекттарҙы иҫәпкә алғанда, 9 173 урынлыҡ 65 балалар баҡсаһы файҙаланыуға тапшырылған. Рәсәй Президенты Владимир Путин балалар баҡсаларын ремонтлау буйынса федераль программаға старт бирҙе, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. Республика унда ҡатнашыуға, 159 балалар баҡсаһын индереп, ғариза юллаған да инде.

"Башҡортостандың 19 колледжы "Профессионалитет" федераль проектында ҡатнаша. Проектҡа ярашлы, ҙур сумма бүленә, һәм уҡыу йорто тулыһынса үҙгәрә - экосистема, экстерьер, интерьер, уҡыу базаһы яңыртыла, яңы оҫтаханалар, лабораториялар барлыҡҡа килә, - тине республика етәксеһе Радий Хәбиров. - Сәнәғәткә эшсе ҡулдар етмәй. Ә колледждар - иҡтисадыбыҙҙы кадрҙар менән туранан-тура тәьмин итеүсе. Шуға күрә хәҙер был стратегик мөһим йүнәлеш".

Республика Башлығы шулай уҡ Өфөлә донъя кимәлендәге Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусын төҙөү, шулай уҡ полилингваль белем биреүҙе үҫтереү тураһында һөйләне. Уҡытыусыларҙың хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу тураһында һөйләгәндә, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2025 йылдан алып уҡытыусыларға берлектә финанслау шарттарында республиканың шифахана-курорт учреждениеларына ике аҙналыҡ юлламалар бүлергә тәҡдим итте. Республика етәксеһе профилле министрлыҡтарға был мәсьәләне тикшерергә һәм бер ай эсендә тәҡдимдәр индерергә ҡушты.

# ЯМҒЫРҘАР КИЛТЕРГӘН ЗЫЯН



**Республика ямғырҙан зыян күргән автомобиль юлдарын тергеҙеүгә өҫтәмә аҡса бүлә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үткәргән "Транспорт сәғәте" кәңәшмәһендә ошо хаҡта һүҙ барҙы.**

Төбәктең транспорт һәм юл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Любовь Минакова, оҙайлы ҡойма ямғырҙар һөҙөмтәһендә Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Йылайыр, Йәрмәкәй, Салауат һәм Учалы райондары биләмәһендә 22 километрҙан ашыу автомобиль юлы, 26 күпер һыу аҫтында ҡалған һәм өлөшләтә емерелгән, тип белдерҙе. Юл хеҙмәттәре зыян күргән участкаларҙы ҡарап сыҡҡан һәм, һыу кимәле кәмеү менән, юлдарҙы тергеҙеү эшенә тотонасаҡтар. Юл һәм күпер участкаларын ремонтлауға территориаль заказда өҫтәмә рәүештә 123,7 миллион һум ҡаралған. Был аҡса муниципалитеттарға яҡын арала күсә башлаясаҡ.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар проблемалы юлдарҙы ремонтлау программаһын тормошҡа ашырыу барышын да ҡараны. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: программа республика Башлығы инициативаһы буйынса 2023 йылда старт алғайны. Уның буйынса 2024-2026 йылдарҙа барлығы 216 километр оҙонлоҡтағы 80 объектты, шул иҫәптән 30 муниципалитет биләмәһендәге биш күперҙе ремонтлау күҙ уңында тотола. Иң ҙур объекттар иҫәбендә - Баймаҡ һәм Хәйбулла райондарындағы Сибай - Аҡъяр юлдары, Иглин районындағы Иглин - Кальтовка, Яңауыл районындағы Яңауыл - Иҫке Күрҙем, Илеш районындағы Яңы Маты - Рсай юлдары. Эштәр билдәләнгән графикка ярашлы алып барыла.

Бынан тыш, "Транспорт сәғәте" кәңәшмәһендә транспорттың ауырлыҡ-габарит күрһәткестәрен контролдә тотоу һәм юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы автоматик рәүештә теркәү системаларын үҫтереү мәсьәләһе ҡаралды. Һүҙ юл саттары аша үтеү ҡағиҙәләрен боҙоу, хәрәкәт ваҡытында телефондан һөйләшеү һәм хәүефһеҙлек ҡайыштарын таҡмаған осраҡтар өсөн яуаплылыҡ тураһында бара. Төбәк юлдарында юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтарын автоматик теркәүҙең 1,7 меңдән ашыу комплексы монтажланған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 19 августа Өфө транспорт инфраструктураһы идаралығына "Горожанин" маркалы 10 яңы троллейбус асҡысын тапшырҙы. Өфө трамвай-троллейбус заводы Минск автозаводы менән берлектә сығарған техника ҡала электр транспортын үҫтереү программаһы сиктәрендә һатып алынған. Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев һөйләүенсә, яңы троллейбустар халыҡ араһында иң кәрәкле маршруттарға - 13-сө ("Дан бульвары - Ағиҙел биҫтәһе") һәм 16-сы ("Курсаҡ театры - Ағиҙел биҫтәһе") маршруттарына - сығасаҡ.

✓Өфөлә ҡаланың 450 йыллығына әҙерлек әүҙем бара. Урамдарҙы төҙөкләндереү һәм яңы объекттар төҙөүҙән тыш, туҡталыштар һәм алтаҡталар яңыртыла. Баш ҡалала йәшәүселәрҙән башҡортса хаталы яҙылған алтаҡталарҙы табыуҙа ярҙам итеүҙәрен һорайҙар. Был хаҡта социаль селтәрҙә республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев хәбәр итте. "27 августҡа тиклем алтаҡталарҙы дөрөҫ яҙыу аҙналығы тип иғлан итәйек. Кем алтаҡталарҙа, йә икенсе урындарҙа хаталар таба, хәбәр итегеҙ. Тик күргән хаталы яҙманың фотоһын һәм адресын онотмағыҙ!" - тип яҙа ул.

✓Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовтың Өфөләге һәйкәле төшөрөлгән билдәле конверт почта аша әйләнешкә сығарылды. Тантаналы сара Өфө почта бүлексәһендә үтте. Сарала Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Ирек Сәғитов һәм Рәсәй почтаһының төбәк дирекцияһы директоры Ленард Шафиҡов ҡатнашты. Конверттарҙы Өфө һәм Башҡортостан Республикаһы почта бүлексәләрендә һатып алырға мөмкин.

✓Башҡортостан шахматсыһы Урал Хәсәнов шахмат композицияһы буйынса донъя рейтингында беренсе урынды билгән Данила Павловты еңеп, Рәсәй кубогы этабында еңеү яуланы. "Йәш булыуына ҡарамаҫтан, "Толпар" шахмат клубы тәрбиәләнеүсеһе Рәсәй кимәлендә уңышлы сығыш яһай, шулай уҡ 2023 йылда Батумиҙа юниорҙар араһында уҙған донъя чемпионатында һоҡланғыс еңеүгә өлгәште. Был юлы Хәсәнов Яҡутскиҙа "Туймааданың аҡ төндәре" шахмат композицияһы буйынса Рәсәй кубогы этабында беренсе урынға лайыҡ булды", - тип хәбәр итте республиканың спорт министры Руслан Хәбибов.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

**✓ Мутлашыусылар, ойошма директоры исеменән хоҡуҡ һаҡлау системаһы хеҙмәткәрҙәренең бәйләнешкә сығыуы тураһында хәбәр итәләр һәм уларҙың тәҡдимдәре буйынса аныҡ эш итергә кәрәклегенә ышандыралар.**



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЮЛДАР, ЮЛДАР...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Федераль юл агентлығы етәксеһе Роман Новиков менән осрашты. Көн тәртибендә - төбәктә "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проектын тормошҡа ашырыу, шулай уҡ эре инфраструктура объекттарын төҙөү мәсьәләләре.**

Радий Хәбиров менән Роман Новиков республика биләмәһендә трасса участкаларын төҙөү һәм ремонтлау буйынса күләмле проекттар менән танышты. Улар иҫәбендә - М-7 "Волга" федераль трассаһындағы яңы объект. Төҙөләш эштәрен бында 2024 йылдың ноябрендә тамамларға планлаштыралар. Тағы бер ҙур проект - Р-240 трассаһының Стәрлетамаҡты урап үтеүсе 23 километрлыҡ участкаһында капиталь ремонт башҡарыу. Һүҙ гәмәлдәге трассаны ике һыҙаттан дүрт һыҙатҡа тиклем киңәйтеү, уның үткәреү һәләтен һәм хәрәкәт хәүефһеҙлеген арттырыу тураһында бара. Башҡортостан Башлығы һәм "Росавтодор" етәксеһе трассаны киңәйтеүгә старт бирҙе. Подрядсы ойошма юл ситен һәм трассаны ҡыуаҡлыҡтарҙан таҙартыу эштәренә тотона. Капиталь ремонт графигына ярашлы, төп эштәр 2024 - 2026 йылдарға планлаштырыла.

Осрашыуҙа Федераль юл агентлығы етәксеһе Роман Новиков республика етәкселегенең юл селтәрен үҫтереүгә ҙур өлөш индереүен билдәләне. "Башҡортостан "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проекты бурыстарын уңышлы үтәй. Төбәк трассаларының яртыһынан ашыуы, агломерацияларҙағы юлдарҙың 85 проценты һәм төбәктең терәк селтәрендәге трассаларҙың 70 проценты норматив хәлгә килтерелгән. Был Рәсәй буйынса уртаса кимәлдән юғары".

# КЕМГӘ ТАУЫШ БИРӘҺЕҢ?

**Башҡортостандың "Гуманитар тикшеренеүҙәр үҙәге" белгестәре республика халҡынан 2024 йылдың 6, 7, 8 сентябрендә үтәсәк һайлауҙар тураһында ниндәй кимәлдә мәғлүмәтле булыуы, уларҙа ҡатнашырға пландары, төбәк Башлығы вазифаһына кандидаттарҙың билдәлелеге һәм электораль өҫтөнлөктәр хаҡында һорау алыу үткәрҙе.**

Тауыш биреүгә бер ай ҡалған мәлдә һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың 78 проценты алдағы һайлауҙар тураһында етерлек кимәлдә мәғлүмәткә эйә булыуы хаҡында белдергән. 64 процент һайлауға барасағын ышаныслы әйткән, 18 процент әлегә хәл итмәүен, 16 процент һайлауҙа ҡатнашмаясағын белдергән.

Һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың электораль өҫтөнлөктәре түбәндәгесә бүленгән. Һайлауҙа тауыш бирергә йыйынғандарҙың 78 проценты тауышын, моғайын, Радий Хәбиров ("Берҙәм Рәсәй") өсөн бирермен, тип белдергән. Агитация кампанияһының ҡыҙыу мәлендә ҡалған өҫтөнлөктәр түбәндәгесә: Владимир Нагорный (СРЗП) - 3 процент, Иван Сухарев (ЛДПР) - 4 процент, Илшат Тимерйәнов ("Яңы кешеләр") - 6,5 процент, Артур Шәйнуров (КПРФ) - 8,5 процент. Һорау алыу барышында кандидаттарҙың фамилиялары, бюллетендәге кеүек үк, респонденттарға үҙҙәре һайланған сәйәси партияларҙың исемдәре менән бергә күрһәтелде.

Политолог Сергей Лаврентьев, һайлауҙар алдынан электораль өҫтөнлөктәр һөҙөмтәләре тураһында фекер йөрөтөп, Радий Хәбиров өсөн тауыш бирергә теләүселәрҙең ул республика менән етәкселек иткән осорҙа төбәкте үҫтереү өсөн нимәләр эшләнгәнен ысынбарлыҡта күреүҙәре менән аңлатты: "Калаларҙы төҙөкләндереү, эшҡыуарлыҡты үҫтереү, инвестициялар йәлеп итеү, тарихи хәтерҙе ҡайтарыу, МХО-лағы егеттәргә ярҙам итеү буйынса байтаҡ эштәр башҡарылды, был йәһәттән республика илдең алдынғы төбәктәренең береһе булып тора. Быларҙың барыһы ла, ҡатмарлы сәйәси шарттарға ҡарамаҫтан, бөтәһенең дә күҙ алдында башҡарыла, һөҙөмтәләр күренә һәм кешеләргә эмоциональ тәьҫир итә. Улар быны власты һынландырған Радий Хәбировтың хеҙмәте икәнен аңлай", - тип иҫәпләй политолог. Ул шулай уҡ һәр кандидаттың ярайһы уҡ билдәле булыуын, быға улар артында торған партия брендтары, билдәле бер потенциал һәм потенциаль һайлаусылар аудиторияһы булыуы ла йоғонто яһауын әйтте.

# ШИФАЛЫ ШИФАХАНА ЮБИЛЕЙЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Красноусол" шифаханаһының 100 йыллығына арналған тантаналы сарала ҡатнашты һәм учреждениеның төрлө кимәлдәге бюджеттарҙы тулыландырыуға һәм яңы эш урындары булдырыуға индергән өлөшөн юғары баһалауын белдерҙе.**



- "Красноусол" шифаханаһы - бөгөн хаҡлы рәүештә республиканың шифахана комплексы флагманы, илдең курорт медицинаһы алдынғыларының береһе. Башҡортостан тәбиғәтенең шифалы үҙенсәлектәре, юғары сифатлы хеҙмәттәр, лайыҡлы сервис, заманса реабилитация алымдары һеҙгә лайыҡлы уңыш һәм танылыу килтерҙе. Бындай ҡаҙаныштар артында һеҙҙең бына тигән коллективығыҙҙың ҙур хеҙмәте тора, - тине төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. - Шифахана быйыл да "Здравница" Бөтә Рәсәй форумында билдәләнде, бер юлы өс алтын миҙалға һәм "Иң яҡшы шифахана-2024" юғары наградаһына лайыҡ булды.

"Красноусол" шифаханаһының генераль директоры Рәмил Бәҙретдинов республика етәкселегенең ярҙамын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм шифахана хеҙмәткәрҙәренә һөҙөмтәле эштәре өсөн рәхмәт белдерҙе. "Тотош коллективтың хеҙмәте һөҙөмтәһендә шифаханабыҙ төшөмлө һәм табышлы эшләй. Һуңғы ике йылдан ашыу ваҡыт эсендә беҙ килемде өс тапҡырға арттырҙыҡ, штатты өстән бер өлөшкә киңәйттек һәм уртаса эш хаҡын 53 мең һумға тиклем еткереүгә ирештек. Был район өсөн лайыҡлы күрһәткес, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рәмил Бәҙретдинов. - Шифахананы үҫтереү проекты бик ҙур, уның матди-техник һәм медицина базаһын артабан да яҡшыртасаҡбыҙ. Беҙҙең төбәктә нефть химияһы, сәнәғәт, ауыл хужалығы буйынса ғына танып белмәһендәр. Башҡортостан курорт төбәге булараҡ та билдәле булһын өсөн, бөтә ресурстарыбыҙ ҙа бар".

"Республика шифаханалары - Башҡортостан милкендә, - тип йомғаҡ яһаны төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. - Беҙҙең контурҙа булған барлыҡ шифаханалар ҙа табышлы эшләй. Уларҙың үҙ инвестиция программалары бар, үҫешәләр. Бер яҡтан, социаль бурыстарҙы үтәйҙәр, шул уҡ ваҡытта иҡтисадыбыҙҙың мөһим өлөшө булып торалар".

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# АЛДАҠ ТОҘАҒЫНА ҠАПМА!

**Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығында сауҙа селтәрҙәре һәм шәхси һаҡ предприятиелары вәкилдәре менән осрашыу уҙҙы. Унда мәғлүмәт-телекоммуникация технологиялары ҡулланып мутлашыуҙарҙы иҫкәртеү мәсьәләһе ҡаралды.**

Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығы начальнигы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы полиция полковнигы Илгиз Байсурин киң таралған мутлашыу схемаһы - билдәһеҙ кешеләрҙең төрлө хеҙмәттәр хеҙмәткәрҙәре булып шылтыратып, төрлө һылтау менән граждандарҙың шәхси мәғлүмәтен алыуы йәки кредит алырға күндереүе хаҡында һөйләне. Мутлашыусылар төрлө телефон номеры ҡулланып шылтырата йәки смс аша ойошма директоры исеменән зыян күреүсе менән бәйләнешкә инә. Уға хоҡуҡ һаҡлау системаһы хеҙмәткәрҙәренең бәйләнешкә сығыуы тураһында хәбәр итәләр һәм күңелһеҙ хәлдән ҡотолоу өсөн уларҙың тәҡдимдәре буйынса аныҡ эш итергә кәрәклегенә ышандыралар. Артыҡ ышаныусанлыҡтың һөҙөмтәһе бер генә - аҡсанан ҡолаҡ ҡағыу.

Илгиз Әхәт улы билдәләүенсә, дистанцион мутлашыуҙарҙың түбәндәге төрҙәре иң йыш ҡулланыла: аҡсаны иҫәптән йәки кредитты гәмәлдән сығарыу, кредит йөкләмәләрен рәсмиләштереү һәм аҡсаны "хәүефһеҙ иҫәпкә" күсереү, төрлө интернет-сайттарҙа һатып алыу йәки һатыу, абонент номерының гәмәлдә булыу ваҡытын оҙайтыу, инвестициялау һәм "таныштарҙың" бурысҡа аҡса һорауы.

Идаралыҡ начальнигы урынбаҫары эске хеҙмәт полковнигы Владислав Тарунов һөйләүенсә, ҡала биләмәһендә мутлашыусыларҙың граждандарға килтергән зыян күләме 860 миллион һумдан ашыу. Финанс-кредит ойошмалары хеҙмәткәрҙәре менән профилактик эш һөҙөмтә бирә, тип билдәләне ул. Быйыл полиция хеҙмәткәрҙәре һәм финанс-кредит ойошмалары хеҙмәткәрҙәре көсө менән 78 мутлыҡ факты үҙ ваҡытында кисектерелгән һәм 50 миллиондан ашыу аҡсаны урлауға юл ҡуйылмаған.

Мутлашыусыларға ҡаршы бергәләп көрәшһәк, яҡындарыбыҙҙы, дуҫтарыбыҙҙы, туғандарыбыҙҙы, хеҙмәттәштәребеҙҙе был бәлә-ҡазанан һаҡлай алаҫаҡбыҙ, тине Илгиз Байсурин. Ойошма вәкилдәре идаралыҡ хеҙмәткәрҙәренән ишеткәндәрен хупланы, коллегалары, дуҫтары һәм яҡындары менән даими рәүештә мутлашыуҙы иҫкәртеү буйынса аңғәмә үткәрергә вәғәҙә бирҙе. Шулай уҡ сауҙа селтәрҙәренең һәм шәхси һаҡ предприятиеларының һәр вәкиленә артабан таратыу өсөн иҫкәрмәләр тапшырылды.

**Рәсәй Эске эштәр министрлығы Өфө ҡалаһы буйынса идаралыҡтың матбуғат хеҙмәте.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Шифалы валериана

Шифалы валериана күп йыллыҡ үҫемлек, майҙан августа тиклем асыҡ алһыу ваҡ ҡына сәскә ата, июлдән орлоҡлана башлай. Тамырҙарында ҡатмарлы составлы эфир майы, валерин һәм хитинин алколоидтары, дуплау матдәләре, шәкәрҙәр, органик кислоталар һ.б. бар. Тамырһабағын һәм тамырын сентябь-октябрь айҙарында ҡаҙып алып ҡулланалар. Валерианаһы борондан нервылар ҡуҙғыуын түбәнәйтеүсе, йөрәк тамырҙарын киңәйтеүсе, йоҡоно яҡшыртыусы, йоҡлатыусы сараларҙың һөҙөмтәлелеген арттырыусы булараҡ файҙаланалар. Ул көҙән йыйырыуҙан да ярҙам итә, ашҡаҙан-эсәк юлының киҫкен ҡыҫылыуын баҫа, таҫма селәүсендәрҙе сығара ала.

❖ Тынғыһыҙлыҡ кисергәндә 1 ҡалаҡ ваҡланған валериана тамыры һәм тамырһабағына 1 стакан эҫе һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға һәм һыуытырға. Төнәтмәнең 1 ҡалағын көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә.

❖ Йоҡоһоҙлоҡтан 2 балғалаҡ киптереп ваҡланған валериана тамырына һыуыҡ һыу ҡойорға һәм 8-10 сәғәт төнәткәндән һуң, эсеүгә яҡшы булырлыҡ итеп һыйылтырға. Шунан һөҙөргә һәм йоҡларҙан 30 минут алда эсергә. Шулай уҡ дымландырғысҡа валериананың эфир майын бер тамсы тамыҙырға була. Бала йоҡлағанда тынғыһыҙланғанда ла уны йыуындырған һыуға бер нисә тамсы эфир майын тамыҙырға мөмкин.

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә 1 ҡалаҡ валериана тамырһабағын һәм тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм талғын утта 15 минут ҡайнатып, һыуытырға һәм һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Бабасырҙан (глист) 1 ҡалаҡ ваҡланған тамыр һәм тамырһабаҡҡа 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға. Ауыҙы ябыҡ һауытта 8-12 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Төнәтмә таҫма селәүсендәрҙән ярҙам итә.

❖ Баш ауыртыуында (мигрень) 1 стакан һыуыҡ һыуға 5 тамсы эфир майын тамыҙырға. Яулыҡты ошо һыуҙа сылатып, башҡа ябырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Белеүегеҙсә, былтыр "Башҡорт аты" атамаһын ҡулланыу хоҡуғына Роспатент таныҡлығын алдыҡ. Хәҙер барыбыҙға ла ошо тоғро юлдашыбыҙ генофондын башҡорт халҡының ғүмере буйына һаҡлап ҡалыу өҫтөндә эшләргә кәрәк.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Бытбылдыҡ, бүҙәнә

**(Перепел)**



Бытбылдыҡ фазандар ғаиләһенә ҡараған ҡош. Фазандар ғаиләһенә ваҡ һым уртаса ҙурлыҡтағы ҡоштар ҡарай. Улар асыҡ урындарҙа, ҡыуаҡлыҡтар араһында көн итә.

Бытбылдыҡ сыйырсыҡтан саҡ ҡына ҙурыраҡ. Төҫө һоро, ата ҡоштоң муйыны - көрән, инә бүҙәнәнеке аҡ төҫтә. Кеше күҙенә күренеп бармай, башлыса төндә йөрөй. Уны таныуы еңел: башта ул "ва-ва", һуңынан асыҡ итеп "быт-былдыҡ" тип тауышланып, үҙен белдереп тора. Ялан, бейек үләнле дала, баҫыуҙарҙа оя ҡора. 7-12 йомортҡа һала.

Башҡортостанда йыш осрай, йәйгеһен баҫыуҙарҙың бер тирәһенән генә лә 5-6 ата ҡоштоң "йырлауы" ишетелә.

### Ҡыр тауығы

**(Серая куропатка)**



Күгәрсен ҙурлығында, тик аяҡтары оҙонораҡ, ҡойроғо ҡыҫҡа. Башы ерән төҫтә, ҡорһағында даға формаһында тап бар. Ерҙән атлап йөрөй, хәүеф янағанда ғына йүгерә, һирәк оса.

Ҡыр тауығы БР Ҡыҙыл китабына ингән. 5-20 ҡош бер төркөм булып йәшәй, ерҙә, үлән араһында йә ҡыуаҡлыҡтарҙа йоҡлай. Ҡышын ҡарға күмелеп тә төн үткәрәләр. Рационын башлыса үҫемлектәр алып тора. Ҡышын ужым да ашай. Тәүлегенә 70-75 грамм бойҙай ашай. 2 аҙналыҡ бәпкәләр бөжәктәр менән туҡлана башлай.

Ояһы бәләкәй генә соҡорҙо хәтерләтә, уға ҡоро үлән түшәй. 12-18 йомортҡа һала. 21-26 көн баҫа, бәпкәләр 7-8-се көнгә осоп ҡарай башлай һәм 12 көнлөк булғас, ҙур булмаған арауыҡҡа оса ала.

Бер үк урында йәшәй, иң яратҡаны - иген культуралары сәсеп үҫтерелгән баҫыуҙар эргәһе. Әгәр ҙә бәпкәләр сыҡҡан мәлдә көндәр һыуытып, ямғырлы булһа, бәпкәләрҙең береһе лә иҫән ҡалмай. Ҡыр тауығы баҫыуҙарҙы химик ашлаған мәлдә лә күпләп ҡырыла.

Бөтөн йыртҡыс ҡоштар ҙа уларҙың дошманы булып тора.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ АТЛЫЛАРЫ ТАНТАНАҺЫ



**Баймаҡ районында үткән "Башҡорт аты" Халыҡ-ара фестивалендә 11,5 мең самаһы кеше ҡатнашты. Улар иҫәбендә Рәсәй төбәктәренән, шулай уҡ Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Һиндостан, Пакистан, Төркмәнстан, Гаити, Мысыр, Камерун, Гана, Нигериянан һыбайлылар, спортсылар, ғалимдар һәм бизнес вәкилдәре бар ине.**

"Баймаҡ ере өсөнсө тапҡыр "Башҡорт аты" фестивален ҡабул итә, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров сараны асыу тантанаһында. - Был ата-бабаларыбыҙға, тарихыбыҙға һәм башҡорт халҡының тоғро дуҫы булған атҡа хөрмәт күрһәтеү. Байрам халыҡ-ара сараға әйләнде - йылдан-йыл сит ил делегацияларының артыуына шаһитбыҙ. Фестивалдең маҡсаты - йылҡысылыҡты, ҡымыҙ эшләүҙе үҫтереүгә иғтибар бүлеү. Был шул уҡ ваҡытта фәнни байрам да. Бында беҙ башҡорт атын һаҡлап ҡалыу тураһында фекер алышабыҙ. Белеүегеҙсә, былтыр "Башҡорт аты" атамаһын ҡулланыу хоҡуғына Роспатент таныҡлығын алдыҡ. Хәҙер барыбыҙға ла ошо тоғро юлдашыбыҙ генофондын башҡорт халҡының ғүмере буйына һаҡлап ҡалыу өҫтөндә эшләргә кәрәк. Фестиваль - ул ҙур мәҙәни-спорт байрамы ла. Был сараны ойоштороуҙағы ярҙамдары һәм майҙансыҡ өсөн Баймаҡ районы халҡына ҙур рәхмәт".

Шанхай хеҙмәттәшлеге ойошмаһының Эшлекле советы башҡарма директоры Сергей Канавский халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте нығытыуҙа фестивалдең әһәмиәтен юғары баһалап: "Был байрам ғына түгел, фестивалдә фәнни һәм мәҙәни аралашыу ҙа бара. Һәм сара ысынлап та Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы эшмәкәрлеге сиктәрендә ойошторола, илебеҙ дәүләттәре һәм хөкүмәттәре башлыҡтары ла традицияларҙы үҫтереү, бер-берегеҙе аңлау, ихтирам һәм үҙ-ара ярҙам тураһында һөйләй" , - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды.

"Башҡорт аты" фестивалендә ҡатнашыусыларҙы һәм ҡунаҡтарҙы Йылҡысылыҡты үҫтереү ассоциацияһы директоры Оксана Жаворонкова ла сәләмләне: "Был фестиваль тәү сиратта үҙ мәҙәниәтебеҙҙе нисек яратыуыбыҙҙы, ә башҡорт халҡы аттар менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәрен нисек хөрмәт итеүен һәм һаҡлауын раҫлай. Ә "Башҡорт аты" атамаһын ҡулланыу хоҡуғына Роспатент таныҡлығы мәҙәниәтегеҙҙе һәм йәшәү рәүешегеҙҙе ҡәҙерләүегеҙ хаҡында һөйләй. Башҡортостан аттар һаны буйынса Рәсәйҙә икенсе урын биләй. Шуға күрә башҡорт атының мәҙәниәттә, спортта, һаулыҡ һаҡлауҙа һәр кешегә хеҙмәт итеүе дауамлы булһын. Һеҙ бар йүнәлештә лә - тамғаларҙа, бейеүҙә, музыкала - үҙенсәлегегеҙҙе һаҡлайһығыҙ һәм быуындан-быуынға тапшыраһығыҙ".

* * *

**Республика Башлығы Радий Хәбиров "Башҡорт аты" Халыҡ-ара башҡорт тоҡомло аттар фестивале майҙансығында республиканың фермер хужалыҡтары етәкселәре һәм йылҡысылары менән осрашты.**

Сарала 80-гә яҡын делегат ҡатнашты. Көн тәртибендә - тоҡомсолоҡ, продуктив һәм спорт йылҡысылығын үҫтереү, шулай уҡ профилле хужалыҡтарға һәм эшҡыуарҙарға ярҙам сараларын камиллаштырыу мәсьәләләре. Үҙ сығышында республика Башлығы йылҡысылыҡты үҫтереү перспективалары һәм был өлкәләгә дәүләт сәйәсәтенең бурыстары тураһында һөйләне. "Йылҡысылыҡ - Башҡортостан иҡтисадының ҙур өлөшө. Төбәктә 130 мең ат иҫәпләнә. Шуға күрә тоҡомсолоҡ эшен алып барабыҙ, ит малсылығын һәм ҡымыҙ етештереүҙе үҫтерәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта ат менән бәйле барыһы ла - башҡорт халҡының мөһим өлөшө. Бында беҙ традицион һөнәрҙәрҙе һаҡлауға һәм ат спортын үҫтереүгә ҙур иғтибар бүләбеҙ, - тип билдәләне төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. - Дөйөм алғанда, беҙҙең бурыс бик ябай - йылҡысылыҡты популярлаштырыу һәм был йәһәттән бизнес эшен дәртләндереү. Һәм, әлбиттә, тейешле федераль һәм республика программалары сиктәрендә тармаҡҡа ярҙам күрһәтеүҙе дауам итәсәкбеҙ".

Эш йүнәлештәре иҫәбендә республика Башлығы шулай уҡ Өфөнөң "Аҡбуҙат" ипподромын үҫтереүҙе һәм һыбай йөрөргә өйрәтеү, ат спорты буйынса фестивалдәр һәм ярыштар үткәреү өсөн яңы майҙансыҡтар булдырыуҙы билдәләне: "Аҡбуҙат" ипподромының спорт йылҡысылығы үҫешенең башланғыс нөктәһе булыуын теләйбеҙ. Мотлаҡ уға ярҙам итәсәкбеҙ, - тип хәбәр итте төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. - Бынан тыш, беҙ Шишмә районында Турахан мавзолейы эргәһендә Башҡорт аты һәм һунарсы ҡоштар үҙәген төҙөү тураһында ҡарар ҡабул иттек. Ул ҙур буласаҡ, биләмәһендә бер нисә йылда ике ипподром, манеж, ат һарайы төҙөргә ниәтләйбеҙ".

Башҡортостан Башлығы шулай уҡ республиканың йылҡы үрсетеү менән шөғөлләнгән хужалыҡтарға артабан да ярҙам итәсәге хаҡында һөйләне. Мәҫәлән, йылҡысылар льготалы кредиттар, техника, аттар һатып алыуға һәм бейә һөтөн реализациялауға субсидиялар алыу мөмкинлегенә эйә. "Йылҡысылар республиканың Ауыл хужалығы министрлығы аша тармаҡ ярҙамы программаларында әүҙем ҡатнашырға тейеш. Һуңғы өс йылда был йүнәлештә үҫтереүгә 200 миллион һум самаһы аҡса бүленде, - тине төбәк етәксеһе. - Төбәктә эре, ныҡлы йылҡысылыҡ хужалыҡтарының эшләүен, тоҡомсолоҡ эшенең үҫешен, системалы нигеҙҙә мал иҫәбе алып барылыуын теләйбеҙ. Һәм бөгөнгө осрашыу - был йәһәттән һеҙҙе борсоған һорауҙарҙы ишетеү өсөн мөһим аҙым".

Фекер алышыу барышында власть органдары вәкилдәре, үҫеш институттары һәм ғилми учреждениелар эксперттары, йылҡысылыҡ хужалыҡтары етәкселәре үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашты. Баймаҡ районынан "Экопродукт" компанияһы директоры Рим Хафизов ҡымыҙ өсөн әсеткеләр етештереү буйынса импортты алмаштырыусы проект, Әбйәлил районынан фермер Айтуған Фәттәхов төбәк хужалыҡтарына башҡорт тоҡомло аттар һатыуы хаҡында һөйләне. Төбәк етәксеһе Радий Хәбиров инвестиция проекты форматында яңы производстволар булдырыу мәсьәләһен тикшерергә тәҡдим итте. "Барлыҡ һорауҙарҙы "Инвестиция сәғәте"нә әҙерләгеҙ, унда ошо башланғысҡа дәүләт ярҙамы күрһәтеү мөмкинлектәрен ҡарап сығырбыҙ", - тине Башҡортостан Башлығы.

* * *

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башҡорт аты" Халыҡ-ара башҡорт тоҡомло аттар фестиваленең тематик майҙансыҡтарында булды.**

Мәҫәлән, "Оҫталар ҡалаһы" һөнәрселәр күргәҙмәһендә республика етәксеһе сбруй эше оҫталары - ат егеү кәрәк-ярағы, хәрби һәм һунар ҡоралдары, традицион башҡорт ат ямаһы сергетыш эшләүселәр, шулай уҡ Башҡортостан һәм Силәбе өлкәһе райондарынан тимерселәр менән аралашты. "Башҡортостанда халыҡ художество кәсептәрен үҫтереү стратегик йүнәлештәрҙең береһе булып тора. Республиканың һәр ҡунағы урындағы оҫталар ҡулы менән эшләнгән иҫтәлекле сувенирҙы үҙе менән алып китергә тейеш. Был да иҡтисадтың мөһим тармағы, - тине төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. - Субсидиялар күләме үҙмәшғүлдәр өсөн 500 мең һум булһа, эшҡыуарҙар өсөн - 700 мең һум. Был сумма материалдар һәм ҡоралдар һатып алыуға йүнәлтелергә мөмкин. Һеҙҙе субсидиялар менән әүҙемерәк файҙаланырға саҡырам".

Республика Башлығы тимерселәрҙең береһе менән бергә даға яһаны. "Был минең беренсе эшем түгел. Минең олатайым да тимерсе ине. Бала саҡта беҙ Ишембай районының Ҡыяуыҡ ауылындағы ысын тимерлеккә йөрөй торғайныҡ. Олатайым беҙҙе ошондай ярҙамсы эштәргә йәлеп итә ине", - тип хәтирәләре менән бүлеште төбәк етәксеһе.

Ауыл хужалығы продукцияһы күргәҙмә-йәрминкәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Баймаҡ районынан ҡымыҙ эшләүселәр һәм Белорет районынан аҡ шыршы һыуы етештереүсе Илдус Агишев менән аралашты. "Башҡортостан киң сеймал базаһына эйә. Аҡ шыршы беҙҙең климат шарттарында яҡшы үҫә һәм һаулыҡты һаҡлау, күп ауыруҙарҙы иҫкәртеү өсөн ҙур файҙа килтерә ала", - тип һөйләне эшҡыуар.

"Башҡорт аты" фестиваленең физкультура-спорт программаһы сиктәрендә республика Башлығы Радий Хәбиров "Урал батыр" халыҡ-ара турнирында, милли көрәш һәм традицион уҡтан атыу буйынса "Ирәндек мәргәне" республика турнирҙарында, "Тай-тулаҡ" һәм "Ауҙарыш" ярыштарында булды. Төбәк етәксеһе шулай уҡ "Башҡорт тоҡомоноң иң яҡшы вәкиле" республика конкурсында ҡатнашыусы аттарҙы ла ҡараны.

✓ *Ғалим был ҡомартҡыларҙа сир һәм ҡыпсаҡ исемдәре аҫтында бер үк ҡәбилә хаҡында һүҙ барыуын фараз итә. Был ҡараш тарихсыларға ҡыпсаҡтарҙың VII быуаттан да алдараҡ булған тарихын ентекләберәк өйрәнә алыу юлын аса.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ДАЛА УЛДАРЫ - ҠЫПСАҠТАР БЕҘ!



**Күгәрсен районының Тәүәкән ауылында 28 августа Ҡыпсаҡ ырыуы йыйыны үтә. Ул Башҡортостан Республикаһының граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды ярҙамында Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантына уҙғарыла. Ҙур йыйын уңайынан ҡыпсаҡ ырыуының тарихы хаҡында яҙма тәҡдим итәбеҙ.**

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары төркөмөнә ҡараған ҡыпсаҡ ырыуының тарихы бик боронғо замандарға барып тоташа, ә яҙма сығанаҡтарҙа ошо этноним беҙҙең эраның VIII быуатынан да иртәрәк осрамай. Шул уҡ ваҡытта ҡыпсаҡ исеме аҫтында тарихҡа инген этник берләшмә байтаҡ ҡына төрки халыҡтары этногенезенда бик мөһим урын биләй: ошо ырыу кешеләренең хәҙерге варисҭары башҡорт, ҡаҙаҡ, нуғай, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, үзбәк, алтай, ҡырым татарҙары составында бар. Заманында Евразияла Иртыш йылғаһынан Дунайға тиклем йәйрәп ятҡан иксеҙ-сикһеҙ далалар иле Дәште-Ҡыпсаҡ (русса Дикое Поле йә иһә Поле Половецкое) исеме аҫтында билдәле була.

***Урта быуат ҡыпсаҡтарының ата-бабалары кем булған?*** Ошо ҡатмарлы һорауға объектив яуап табыу хәҙерге тарих белгестәре өсөн дә енел түгел, ғилми әҙәбиәттә был мәсьәлә буйынса төрлө гипотезалар осрай. Мәҫәлән, абруйлы тарих белгестәренән һаналған С.Г. Кляшторный боронғо төрки руник яҙмаларында ҡыпсаҡ атамаһы булыуына иғтибар итә. 1909 йылда фин лингвисы Густав Рамстед Монголияның Селенга йылғаһы буйындағы Шине Усу тигән урында Уйғыр ҡағанатын нигеҙләүсе Элетмиш Билге ҡағанға (747 - 759 йй.) арналған таш яҙмалар таба. Унда "turk qybcaq alig jyl olurmys" (төрк ҡыпсаҡ илле йыл хакимлыҡ итте), тигән яҙыу ҙа була. Ошо стелалағы яҙмала хәрефтәр быуаттар дауамында юйыла биргәс, ҡыпсаҡ һүҙенең "...bcaq" тигән аҙаҡҡы дүрт хәрефе генә асыҡ күренгәнлектән, тәүҙә был мәғлүмәткә ышанмайыраҡ ҡарайҙар. Әммә 1974-1975 йылдарҙағы махсус экспедиция юйылған хәрефтәрҙән ҡалған эҙҙәрҙе тикшереп, стеланың дөрөҫ уҡылыуын раҫлай. Тимәк, II Көнсығыш Төрки ҡағанаты (681 - 744 йй.) заманында төрки ҡәбиләләре араһында ҡыпсаҡтар ҙа булып, улар дөйөм төрки союзына инген. Был VII быуатта уҡ ҡыпсаҡтарҙың "turk budun" (будун - ҡәбиләләр союзы) исеме аҫтында хакимлыҡ итеүсе берләшмә составында булыуына бер дәлил булып тора. Әммә ошо берләшмәнең хәрби һәм сәйәси етәксеһе булған Күлтегинға (684 - 731 йй.) арналған боронғо руник ҡомартҡыла ҡыпсаҡ атамаһы иҫкә алынмай. Ә бына тәүге өс төрки хакимының кәңәшсеһе булған Тоньюкукҡа (646 - 724 йй.) арналған яҙмала "turk sir budun" һүҙҙәре теркәлгән, ул төрк һәм сир берләшмәһен аңлата.

***Ул замандарҙа сирҙар, тип нинде ҡәбиләне атауҙары мөмкин һуң?*** Г.С. Кляшторный ошо хаҡта былай тип яҙа: "Төрк илендә өҫтөнлөк итеүсе ҡәбиләләр союздары хаҡындағы руник ҡомартҡыларҙағы мәғлүмәттәрҙе берләштереп ҡарайыҡ: төркиҙәрҙең үҙ ҡомартҡылары хакимлыҡ итеүсе ҡәбиләләр төркөмөн "төрктәр һәм сирҙар", ә Шине Усу ерендәге уйғыр (уғыҙ) ҡомартҡыһы - "төрктәр һәм кыбчактар", тип атай". Ошо сағыштырыу нигеҙендә билдәле ғалим был ҡомартҡыларҙа сир һәм ҡыпсаҡ исемдәре аҫтында бер үк ҡәбилә хаҡында һүҙ барыуын фараз итә. Был ҡараш тарихсыларға ҡыпсаҡтарҙың VII быуаттан да алдараҡ булған тарихын ентекләберәк өйрәнә алыу юлын аса.

Сир һәм ҡыпсаҡ этнонимдарының бер иш булыуын ошо һүҙҙәрҙең этимологияһы аша ла асыҡлап була. С.Г. Кляшторный сир исеме урынына ҡыпсаҡ атамаһын ҡулланыу боронғо магик инаныуҙар менән бәйле, тип иҫәпләй. Тәүге этноним менән аталған Сир ҡағанатының 646 йылда тар-мар ителеп, һәләкәткә осрауы артабан ошо исем урынына буш, унышһыҙ, бәхетһеҙ халыҡ тигәнде аңлатҡан "кывчак/кыбчак" атамаһы ҡулланыла башлай, тип һығымта яһай ғалим (йәнәһе, яңы атама хәтәр-хәүеф менән бәйле булған элекке исемдән магик ҡотолоу әмәлен бирә).

Әммә был версияға тәнҡит күҙлегенән ҡараған тикшеренеүселәр ҙа бар. Тарихсы Ю.А. Зуев ошондай һығымтаның дәлилһеҙ булыуын күрһәтеп, билдәле лингвист-төркиәтсе А.Н. Кононовтың фекерен иғтибарға ала. Унынса, "куман, ҡыпсаҡ һәм ҡумыҡ (генетик яҡтан бер-береһенә яҡын туғандаш берләшмәләр) этнонимдары бер тамыр һүҙҙән (qub) башланып, ошо тамырҙың фонетик-морфологик үҫешенең айырым формалары булып тора".

Төркиҙәр, шул иҫәптән гоагюй (уғыҙ) ҡәбиләләре, үҙҙәре менән йәнәш йәшәүсе башҡа халыҡтар менән бәрелештәрҙә ҡатнашып тора, әммә V быуатта Жужань ҡағанатына буйһонорға мәжбүр була. 487 йылда гоагюйҙарҙың бер өлөшө, жужандарҙан айырылып, Иртыш буйҙарына йүнәлә. VI быуат уртаһында Бумын ҡаған етәкселегендә Төрки ҡағанаты барлыҡҡа килә. Төркиҙәрҙең яулап алыу һуғыштары уңышлы бара, Орхондан Итиль йылғаһына тиклемге территорияла йәшәгән ҡәбиләләр уларҙың хакимлығы аҫтында ҡала. Ҡытайҙарҙың "Суй шу" (VII б.) хроникаһында башҡа бер халыҡтар менән бергә Арал буйында көн итеүсе божуцзюли (башукили) ҡәүеме лә иҫкә алына, тарихи әҙәбиәттә был атаманың башҡорт этнонимына тура килеүе раҫлана.

628 йылда Көнсығыш төрки ҡағанаты хакимы Иль ҡаған еңелеүгә дусар була, ә 630 йылда әсирлеккә алына. Емерелгән ҡағанатта сирҙар һәм уйғырҙар өҫтөнлөк алырға тырыша, Ҡытай императоры Тайцзун сирҙарҙы өҫкә сығара, уларҙың башлығы Инанчы-иркин үҙен Йенчу Билге ҡаған, тип иғлан итә. Шулай итеп, төрки һәм сирҙар союзына нигеҙләнгән яңы ҡағанат барлыҡҡа килә. Сир ҡағанаты оҙаҡ йәшәмәй - үҙ-ара низағтар, бәрелештәр арҡаһында сеяньто-уйғыр коалицияһы 642 йылда тарҡала. Сирҙар 646 йылда тамам тар-мар ителә, күп кешеһен юғалта, уларҙың 50 меңе самаһы көнбайыш тарафтарына ҡасып китергә мәжбүр була.

Әммә сеяньто-сир ҡәүеме юҡҡа сыҡмай. Артабанғы тарихта улар башҡа төрки ҡәбиләләре менән союзға инеп, II Көнсығыш ҡағанатын тергеҙеүгә күп көс һала, һәм был берләшмә төрки яҙма ҡомартҡыларында "turk sir budun" рәүешендә теркәлеп ҡала. 679 йылда ҡытай хакимлығына ҡаршы баш күтәргән төркиҙәр Ашина Ҡотлуғ исемле төрки принцын үҙҙәренең юлбашсыһы итеп таный, уға аристократик нәҫелдән сыҡҡан уҡымышлы Тоньюкук кәңәшсе булып килә. Ашина Ҡотлуғ Ильтериш ҡаған исеме аҫтында тарихҡа инә. II Көнсығыш төрки ҡағанаты 744 йылда баш күтәргән уйғыр, басмыл һәм карлук ғәскәрҙәре тарафынан тарҡатыла, уның урынын Уйғыр ҡағанаты ала.

**(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

12 февралдә фронт командованиеһы бойороғона ярашлы, корпус частары алыштан сығарылып, 70-километрлыҡ марш яһап, яңы оборона рубежын ала, уҡсылар соединениеһын алыштыра. 16 гв. атлы дивизияһы 212-се уҡсы дивизия оборона тотҡан рубежда - Арнсвальде ҡалаһынан көньяҡ-көнбайыштараҡ урынлаша. Беҙҙең атлы дивизия 58-се һәм 60-сы гв. полктары менән алышҡа инә, ә 62-се гв. атлы полкы был саҡта корпус командиры резервында ҡала. 32-се танк полкы ла оборона рубежында булмай, сөки ул фронт мастерскойҙарына ремонтҡа ебәрелә. Быға тиклем барған алыштарҙағы юғалтыуҙар арҡаһында артиллерия саралары ла бик аҙ ҡала. Атлы полктар 3-әр генә эскадрондан тора.

16-сы гв. атлы дивизияһы Шлагентин - Линде - Браллентин - Делитц - Зондон рубежында оборона тота, ул һуҙылып ятҡан дуға рәүешендә булып, уның түбәһен Петцник исемле тораҡ пункты биләй. Бында элегерәк оборона тотҡан уҡсы дивизия дошман көстәре хаҡында мәғлүмәтле булмай сыға, ә беҙҙең дивизия разведка эшләп өлгөрмәй. 13 февралдә немец частары 18 танк ярҙамында көслө атака башлай һәм Петцникҡа ябырылып килә... яҡынлаша.

60-сы гв. атлы полкы һәм күрше 218-се уҡсы дивизияның бер полкы сигенергә мәжбүр була. Ошо айҡанлы үтә хәүефле хәл килеп тыуа. Дошман атлы дивизия штабына яҡын уҡ килеп етә, ул Нойхов тип аталған тораҡ пунктында урынлашҡан була. 16-сы гв. атлы дивизияһы командованиеһы 76-миллиметрлы орудиелар батареяһы, саперҙар эскадроны, комендант взводы менән оборона алышына сыға. Дошмандың алға табан хәрәкәт итеүе тотҡарланып тора. Ошо аяныслы хәлдәр хаҡында тиҙ арала корпус командирына хәбәр ителә Ул 62-се гв. атлы полкын резервтан алып, шулай уҡ танкыларға ҡаршы бригаданың бер полкын оборона тотҡан дивизияға ярҙамға ебәрергә мәжбүр була.

Ошо полктар килеп еткәнсе беҙҙең 60-сы һәм 58-се гв. атлы полктары баштан-аяҡ ҡоралланған дошман менән үтә көсөргәнешле алышҡа сыға, немецтарҙың танкылары һәм артиллерияһының көслө уты аҫтында оборона һуғышы алып бара. Артиллеристарға бигерәк тә ауырға тура килә. Гв. капитаны Иосиф Ефимович Чайковскийҙың (60-сы гв. а.п.) батареяһы дошман атакаларын кире ҡағып тора. 15 февралдә, немецтарҙың танкылары тағы ла атакаға барған бер мәлдә, батарея командиры артиллеристарына бойороҡ бирә: "Һуңғы снаряд ҡалғансы көрәшергә, дошман танкыларын нисек итеп булһа ла үткәрмәҫкә!" Бер орудие командиры сафтан сыҡҡас, үҙе уның урынын ала. Ҡурҡыу белмәҫ командир орудиеһына дошмандың 6 танкыһы яҡынлаша. Гв. капитаны Чайковский уларҙың өсөһөн сафтан сығара. Ҡалғандары, тиҙлектәрен аҡрынайтып, батыр артиллеристы һәм уның орудиеһын утҡа тота. Шул саҡта танкылар артынан килгән дошман пехотаһы атакаға ташлана. Чайковский уларҙың 4 бронетранспортерын емертә, бер ротаға тиклем автоматсыларын сафтан сығара йә иһә таралып китергә мәжбүр итә. Уға Советтар Союзы Геройы исемен биреү өсөн тултырылған наградa ҡағыҙы бына нисек тамамлана: "Танкылар утҡа тотоуҙы дауам итте. Гв. капитаны янына уҡ килеп еткән дошман танкыһынан атылған пулялар уның гүмерен өҙә, унан һуң әлеге танк уның мәйетен һәм орудиеһын тапап үтеп китә". 1945 йылдың 31 майындағы Указ менән ҡаһарман офицер И.Е. Чайковскийға Герой исеме бирелә. Ул элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ һәм Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән дә бүләкләнгән.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

# ХЕҘМӘТТӘ ТАБЫЛҒАН

**бәхет-ҡыуаныс-ҡәнәғәтлек**

**2021 йылда Баймаҡ районының Бетерә ауылында ағалы-ҡустылы Илсур һәм Тимур Нәбиуллиндар тәүге тапҡыр Урман һабантуйы үткәрә. Нәбиуллиндар үҙҙәре лә оҙаҡ йылдар ағас эшкәртеү буйынса шөғөлләнә. Ҡыҙғанысҡа күрә, былтыр Тимур Нәбиуллин вафат була һәм ағаһының үлемен ауыр кисергән Илсур һабантуйҙы бер йылға кисектереп тора. Быйыл 29 июндә Баймаҡ районының йәмле Граф күлендә Урман һабантуйы тағы гөрләп үтте. Көндөң һыуыҡ булыуы, туҡтауһыҙ ямғыр яуып тороуы ла байрамда ҡатнашыусыларҙың кәйефен төшөрә алманы. Әйтергә кәрәк, Урман һабантуйы Башҡортостанда ғына түгел, тотош Рәсәйҙә лә өр-яңы башланғыс булыуы менән иғтибарға лайыҡ. Ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәре өсөн ойошторолған һабантуйҙарҙан айырмалы рәүештә, унда ат сабышы урынына тракторҙар ярыша, милли көрәш урынына урмансылар үҙ оҫталығын күрһәтә: ағас йыға, ағастан төрлө һындар яһай, балта һаплай, таҡта йыша. Һабантуйҙа ҡатын-ҡыҙҙарға һәм балаларға төрлө мауыҡтырғыс уйындар ойошторолдо. Иң мөһиме - еңеүселәргә мотоциклдарҙан алып мотобысҡыларға тиклем ҡыйбатлы бүләктәр әҙерләнгәйне. Билдәле эшҡыуар Илсур НӘБИУЛЛИН менән осраштыҡ. Ул республикала мәсеттәр төҙөүсе һәм мохтаждарға ярҙам итеүсе "Атайсал" проекты ҡатнашыусыһы булараҡ та билдәле. Илсур үҙенең ағас эшкәртеү предприятиеһы эшмәкәрлеге менән таныштырҙы, тармаҡтағы проблемаларҙы атап үтте, барыбыҙҙы ла борсоған етди мәсьәләләр хаҡында ла һөйләне.**

**Ябай ауыл малайының нисек эшҡыуарлыҡҡа тотоноп китеүе тураһындағы тарихы нисегерәк икән?**

- Бик иртә атай-әсәйһеҙ тороп ҡалып, бер туған ағайым Тимур менән өләсәйебеҙ Фәриҙә Нәҙерғолова ҡулында тәрбиәләндек. Ағайыма ул ваҡытта - 10, миңә 5 йәш кенә ине. Беҙ өләсәйебеҙҙең һөйөүен тойоп, уның тәрбиә һабаҡтарын күңелебеҙгә һеңдереп үҫтек. Үҫеп еткәс, Тимур Себер тарафтарында эшләй башланы. Ә мин Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтына уҡырға индем. Берҙән-бер көндө өләсәйебеҙ ҡаты сирләп түшәккә йығылды. Шул саҡта ул мине саҡырып алып, оҙаҡ йылдар йыйнаған аҡсаһын тотторҙо. Үҙемдең стипендиямды ла йыйып барғайным, ҡулымда бөтәһе 150 мең һум аҡса барлыҡҡа килде. Өләсәйем гүр эйәһе булғас, аҡсаны нисек тотонорға мөмкин булыуы тураһында уйлай башланым. Өләсәйем телә гәнсә, машина һатып алһам, артабан тик таксист булып ҡына аҡса эшләргә мөмкин икәнен яҡшы төшөнә инем. Тик минең күләмлерәк эшкә тотонғом килде. Үҙемде эшҡыуарлыҡта һынап ҡарарға теләнем һәм ағас эшенә тотонорға ҡарарға итеп, 138 мең һумға станок, ә ҡалған 12 меңенә бензобысҡы һатып алдым.

Әлбиттә, тәүҙә төрлө ҡаршылыҡтарға осрарға ла тура килде. Ә шулай ҙа ауыл ситенә пилорама урынлаштырып, эш башлап ебәрҙем. Ағас һатып алып, ярҙамға дуҫымды саҡырҙым. Таҡталар әҙер булып, уны ҡайҙа һатырға белмәйенсә аптыраныуым тәүге һабаҡ булды. Ә шулай ҙа яҙмыштың үҙемә табан ынғайларына һәм эшемдең уң булыуына ышана инем. Бер үк ваҡытта экстерн менән уҡыуымды тамамланым. Клиенттар артҡан һайын эш күбәйә барҙы. Шул саҡта ағайым Тимур ҙа миңә ярҙамға килде. Артабан йөктө бергәләп тартып алып киттек. Тәүге мәлдә ағайым менән икебеҙ генә эшләнек, аҙаҡ кешеләрҙе йәлеп иттек. Урал арьяғында ағас эшкәртеү буйынса иң ҙур предприятиеның береһенә әүерелдек. Таҡта киптереп, евровагонка, евроиҙән, йәшниктәр эшләй, өйҙәр төҙөй башланыҡ. Үҙебеҙҙең стоматология кабинеты, махсус техникаларыбыҙ, магазиндарыбыҙ бар, уларҙа 80-90 кеше хеҙмәт итә. Эшселәребеҙҙең күбеһе Баймаҡ районынан, Бөрйән, Әбйәлил, Хәйбулланан да бар.

**Илсур, һуңғы 20-30 йылда "Ауылда эш юҡ" тигән һүҙбәйләнеш йыш ҡабатлана башланы. Ә бит беҙ тарихтан шуны ла беләбеҙ, әйтәйек, 1917 йылға тиклем ауылдарҙа колхоз-совхоздар ҙа булмаған, әммә атай-олатайҙарыбыҙ эшһеҙ ултырмаған, йүнен табып, лайыҡлы йәшәргә тырышҡан. Һин, Илсур, ауылда йәшәп, эшләп, үҙ юлыңды тапҡанһың, ысынлап та, "Ауылда эш юҡ" тигән һүҙ дөрөҫлөккә тура киләме?**

- Тырышҡан кешегә эш ҡала ни, ауыл ни - ҡайҙа булһа ла бар. Ауылда, киреһенсә, эш урыны табыу еңелерәк, сөнки конкуренция юҡ кимәлендә. Әйтәйек, теплица ғына асып ебәр, ҡыш көнө экологик яҡтан таҙа булған помидор, ҡыярҙы, кешерҙе сират тороп аласаҡтар. Бына минең менән аралашҡан кешеләрҙең береһе лә: "Эш юҡ", - тип зарланмай. Тырышҡан кеше ауылда хәҙер йә үҙенең эшен аса, йә аҡсалы эш таба.

**Ниндәйҙер эш башлар өсөн барыбер ҙә башланғыс капитал кәрәк бит инде. Был йәһәттән һеҙ нисек эш иттегеҙ?**

- Башланғыс капитал булһын өсөн үҙеңдең шәхси ихтыяжыңа киткән сығымдарыңды, икенсе һүҙ менән әйткәндә, нәфсеңде тыя белергә кәрәк. Мин, мәҫәлән, егерме бер йәшемдә ҡулыма тәүге аҡсалар килеп ингәндә текә машина, һуңғы маркалы телефондар алғым килде. Әммә ул аҡсамды ике эшсемә хеҙмәт хаҡы итеп түләнем. Быларҙан тыш, миңә әйләнешкә, электр энергияһына, ағасҡа, һалымға түләргә кәрәк. Түҙҙем. Хәҙерге күп йәштәр эш башлайҙар ҙа, тәүге аҡсаларҙы килем тип яңылышалар. Ул килем түгел, ә әйләнештәге аҡса. Улар тәүге аҡсаларына йә текә машина, йә ҡиммәтле телефон алалар ҙа, артабан эштәрен алып бара алмайынса, предприятиеһын ябып та ҡуялар.

**Күптәр тәүге алған кредиттарын ҡаплай алмайынса, яңы эшләй башлаған шәхси предприятиеларын банкротҡа сығарып, ябып та ҡуя. Ә һинең кредит алғаның булдымы?**

- Мин кредитҡа ҡырҡа ҡаршымын. Эш башлағанда ла кредитҡа аҡса алманым. Күп кенә эшҡыуарҙар кредитҡа аҡса алып яна.

**Һәр ваҡыт та рентабелле эшләй алдығыҙмы?**

- Төрлө ваҡытта төрлөсә булды инде. Ҡайһы ваҡыт минусҡа ла эшләп китәһең. Бигерәк тә яҙлы-көҙлө юл насар ваҡытта техника ватылһа, уны ремонтлар өсөн йөҙәр меңлек запас частар һатып алырға тура килә. Шундай саҡтарҙа ҡайһы бер айҙарың минусҡа китергә мөмкин. Урман эшендә рентабеллекте процент менән һанап сығарып әйтеп булмай. Әгәр ҙә магазин булһа, 5 йә 10 процент, тип әйтә алыр инем. Урман эшенең көтөлмәгән нескәлектәре күп.

**Һиненсә, кем эшҡыуар була ала?**

- Ситтән ҡарағанда ғына уны кемдер, диванда фарман биреп ултырыусы кеше, тип әйтер. Ысынында, уның алы ла юҡ, ялы ла юҡ. Кемгәлер ул ирекле, азат, нимә теләһә, шуны эшләп йәшәүсе кеше булып күренергә мөмкин. Әммә ул тәүлегенә ике, өс смена эшләмәһә, уңышҡа өлгәшә алмай. Шул уҡ ваҡытта ул эштәрен яйға һалып алһа, иртәнсәк һигеҙгә эшкә барырға ла кәрәкмәй, әҙерәк ял итеп тә алырға мөмкин.

**Бер центнер игендең үҙкиммәте, әйтәйек, 5 мең һум тора икән, ти. Уға ерҙе һөрөүгә, сәсеүгә, йыйып алыуға, игенде киптереүгә, яғыулыҡ-майлау материалдарына, хеҙмәт хаҡына киткән сығымдар инә. Шул уҡ ваҡытта шул уҡ 5 мең һумға, әйтәйек, ситтән 5 центнер иген һатып алып була. Нимә килеп сыға? Әйтеүҙәренсә, беҙҙең илдә иген сәсеү, шулай уҡ ағас, хатта нефть эшкәртеү рентабелле булмай сыға. Ни өсөн беҙҙең илдә етештереүгә ҡарағанда сеймал һатыу күпкә отошлораҡ килеп сыға тип уйлайһың? Мәҫәлән, Ҡытай беҙҙән урманды төбө менән һатып алып эшкәртә бит…**

- Ә һин, Әхмәр ағай, икенсе илдә етештереү отошло тип уйлайһыңмы? Беҙ әле ҡытайҙарҙың ниндәй сығымдар менән эшләгәнен белмәйбеҙ. Был осраҡта айсбергтың осон ғына күрәбеҙ. Мин күп илдәрҙә сәйәхәт иттем, һәр ерҙең үҙ проблемаһы бар икәнен беләм. Кемдәрҙер һалынған хеҙмәт менән сығымдарҙы ҡаплай, кемдәрҙер эшселәр көсө менән файҙа алырға ынтыла, шул уҡ ваҡытта күп итеп етештергән продукцияһын һата алмаған илдәр ҙә күп. Шуға күрә бөгөн беҙҙә генә эш насар йә яҡшы ҡуйылған тип әйтеп булмай. Беҙҙә ҡайһы бер тармаҡтар аҡһай, ә ҡайһы бер тармаҡтар алға киткән.

**Бер биҙрә картуфты 200 һумға һатып була, әгәр ҙә уны бешереп йә пюре эшләп ашханала һатһаң - 2 мең, чипсы эшләһәң - 5 мең сығарып була. Ә инде картуфты рекламалаһаң, 10 йә 20 мең һум эшләй алаһың. Ошо рәүешле сағыштырһаң, беҙ эшҡыуарлыҡтың ҡайһы кимәлендә торабыҙ?**

- Әле күберәк биҙрәләп һатабыҙ. Әммә башҡорт халҡының эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә барымы юҡ, тип әйтә алмайбыҙ. Шул уҡ картуфтан чипсы эшләү өсөн генә лә ҡиммәтле ҡоролма талап ителә. Үҙеңдең картуфлығыңда үҫкән картуфыңды ғына эшкәртер өсөн миллион һумдар торған ҡоролмалар алыу кәрәкме? Ул ҡоролманы алыр өсөн тиҫтәләрсә йыл эшләргә кәрәк. Мин дә 21 миллионға ағас эшкәртеү цехы алдым. Шунан бер туҡтауһыҙ минусҡа эшләнек. Әйтәйек, 30 кубометр ағастың цехтар аша сыҡҡанса 12 кубометры опилкаға сығып оса. Ҡайһы берҙә сеймал көйө тауар һатыу күпкә файҙалы. Күп осраҡта ошо практиканы үтмәгән кеше тәрән эшкәртеү хаҡында хәбәр һөйләй. Ул юлды үҙең үтеп сыҡмайынса, кемделер йә халыҡты ғәйепләү дөрөҫ түгел.

Әгәр ҙә бер һыйыр итенән билмән эшләп һатһаң, 50 мең урынына 200 мең һум сығарып була. Ә инде билмәнде бешереп һатһаң, тағы ла 100 меңгә табышың күберәк килеп сыға. Бының өсөн ҡоролмаң, ашханаң, тырышлығың кәрәк. Бер-ике һыйырың өсөн генә лә быларҙы эшләп булмай, фермер булыуың талап ителә. Фермер булыр өсөн инде ерең, техникаң һәм башҡа күп нәмәләр кәрәк. Ситтән ҡарап тороп кәңәш биреүе генә рәхәт. Шул уҡ ваҡытта фермерлыҡ эшмәкәрлегең табыш килтермәһә, ни эшләргә? Бында бер ниндәй ҙә гарантия биреп булмай. Шуның өсөн дә эшҡыуарлыҡ тәүәккәллек талап итә. Беҙгә бер кем дә дөрөҫ юлды күрһәтә алмай, беҙ үҙебеҙҙең аҙымдар һәм хаталар ярҙамында ғына алға бара алабыҙ. Был хаҡта китапта ла яҙылмаған. Китапта дөйөм рәүештә өҫтән генә яҙылырға мөмкин. Өфөнө генә алайыҡ. Бер рәттә, әйтәйек, ун магазин тора, барыһында ла бер үк тауар һатыла. Уларҙың береһенең генә эше бара, туғыҙы ырата алмай, йәғни минусҡа эшләй. Ни өсөн шулай? Бәлки, уның магазины бинаға ингән ерҙә генә торалыр, бәлки, хаҡтары осһоҙҙор. Бәлки, киреһенсә, ҡыйбаттыр, сөнки осһоҙ хаҡ күп осраҡта тауарҙың сифатына ишара булып сыға.

**Урман да мәңгелек түгел. Әгәр ҙә еребеҙҙә ҡырҡырға ағас бөтһә, ниндәй йүнәлештә эшмәкәрлегеңде йәйелдерә алаһың?**

- Урман бөтмәй ул. Намыҫлы эшҡыуар ҡырҡҡан ағас урынына йәш үҫенте сәсеп торһа, барыһы ла яҡшы буласаҡ. "Ағасты ҡырҡалар, бөтөрәләр", тип яу һалалар. Ағас 80 йәштән 120 йәшкә тиклем ҡырҡылырға тейеш. Әгәр ҙә ошонан һуң ҡырҡмаһаң, ағас кибә, ҡолай башлай. Аҙаҡ ятып серей. Ярай әле, ятып ҡына сереһә, сөнки бер генә шырпы менән Башҡортостандың ярты урманы янып бөтөргә мөмкин. Ағас ваҡытында ҡырҡылырға, ваҡытында ултыртылырға тейеш. Икенсе бер мәсьәлә: ни өсөн беҙҙең ағастарҙы ситтәр килеп ҡырҡа? Башҡортостанда лимит буйынса 9 миллион кубометр ағас ҡырҡылырға тейеш. Ә беҙҙекеләр 3 миллион кубометр ғына ағас ҡырҡа. Йәмғеһе 6 миллион кубометр ағас ҡырҡылмай ҡала. Ул ағас серергә йә янып көлгә ҡалырға тейеш буламы? Үҙебеҙ ҡырҡмаған ағасты инвесторҙар ҡырҡа башлай.

"Кроношпан" ошо рәүешле килеп инде. Мин уның инеүен ыңғай баһалайым. Сөнки ул беҙ иғтибарға ла алмаған, эшкинмәгән, серегән, ҡый-ҡыпыр булып иҫәпләнгән ағасты ҡабул итеп эшкәртеп сығара. Элек беҙ опилканы, гәрбилдәрҙе, ағас тамырҙарын яндыра торғайныҡ, хәҙер уларға тапшырабыҙ. Ошо юл менән күп кенә водителдәр аҡса эшләргә өйрәнде. Әгәр ҙә

**✓ "Юҡ" тип әйтә белергә кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта "юҡ" тип әйтеп, үҙеңде ғәйепле тойоп ултырырға ла ярамай. Башҡаларҙың көндәлек ихтыяжы өсөн эшләй башлаһаң, эшҡыуарлығың өс көнгә лә етмәйәсәк.**



# МАЛ ҒЫНА...

## килтерә

улар беҙҙең яҡшы сифатлы ҡарағайҙарҙы эшкәртә башлаһа, мин дә быны менән риза булмаҫ инем.

**Ауыл кешеләрендә шундай психология бар: бай кешене яратмайҙар. Был хаҡта ни әйтерһең?**

- Бар ундай күренеш. Бөтә кешегә лә ярап булмай. Шуға әйткәндәр бит инде: ит изгелек, көт яуызлыҡ.

**Мохтаж кешеләргә ярҙам итеүең хаҡында ла ишетеп беләбеҙ.**

- Мохтаждар үтә лә күп. Әммә бөтә кешеләргә лә ярҙам итеү мөмкин түгел. Әйтәйек, һиңә 1 мең кеше ярҙам һорап мөрәжәғәт итеп, уларҙың береһенә генә ярҙам ҡулы һуҙһаң, ҡалған 999-ы үҙеңең үпкәһен белдерә. Беҙ кемгә ярҙам итергә теләһәк, шуға ярҙам итәбеҙ, кемгәләр оҡшарға, үҙебеҙҙе мәрхәмәтле итеп тә күрһәтергә теләмәйбеҙ.

Йыл һайын 12 әсәйҙе шифаханаларға ебәрә башланыҡ. Элек үҙем генә уларға путевка һатып ала инем, хәҙер башҡа эшҡыуарҙар ҙа миңә ҡушылды. МХО барған ергә гуманитар ярҙам ойошторабыҙ, үҙем генә өс тапҡыр барып ҡайттым. Был йүнәлештә башҡарған эштәребеҙҙе һанап бөтөрлөк түгел, һанарға ла ярамай.

**Эшҡыуарлыҡта туғанлыҡ булмай, тиҙәр, шул дөрөҫмө?**

- Күп кенә бергә эшләгән туғандарҙың һүҙгә килешеүе, ыҙғышыуы хаҡында ишеткәнем бар. Беҙ Тимур ағайым менән бергә татыу эшләнек, үкенескә, ағайым мәрхүм булып ҡалды. Биш йәшкә өлкән ағайым миңә атай урынына ла, әсәй урынына ла булды.

**Етеш йәшәгән кешегә ҡарағанда ауырлыҡ кисергән, нужаны күберәк күргән кеше беше була, күберәккә өлгәшә тиҙәр. Был дөрөҫмө?**

- Ундай күҙәтеүҙәрем бар. Атайым менән әсәйем вафат булғас, мин ағайыма һәм үҙемә генә таяна алдым. Өләсәйебеҙ ҙә вафат булғас, барлыҡ ауырлыҡтар тик үҙебеҙгә генә тороп ҡалды. Шуға күрә барыһын да үҙебеҙ хәл итеп өйрәндек. Кемдәрҙең ата-әсәһе, ел-ямғырҙан ҡаплаусылары бар, улар анһатҡа өйрәнә. Аҙаҡ ата-әсәләре ҡартайғас йә вафат булғас, ундайҙар бәләкәй генә ҡаршылыҡтарға осрағанда ла һынып ҡала.

**Эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшеүсе кеше көслө кеше. Ә көслөләргә һыйыналар. Шул уҡ ваҡытта бөтә кешегә лә ярҙам итеп булмай. Был турала нимә әйтерһең?**

- "Юҡ" тип әйтә белергә кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта "юҡ" тип әйтеп, үҙеңде ғәйепле тойоп ултырырға ла ярамай. Ә барыһына ла "әйе" тиһәң, һин оҙаҡҡа етмәйһең. Башҡаларҙың көндәлек ихтыяжы өсөн эшләй башлаһаң, эшҡыуарлығың өс көнгә лә етмәйәсәк.

**Ҡайҙалыр уҡығайным: ҡулыңа килеп ингән суммаға торошло интеллектуаль кимәлең булмаһа, ул аҡсаң юҡҡа сыға. Был дөрөҫмө?**

- Ҡапыл әйтә алмайым. Уның өсөн ентекле анализдар үткәрергә кәрәктер.

**Үткән быуаттың 90-сы йылдарында шундай фекер йәшәне. Башҡорт кешеһенең ҡулына бер миллион һум аҡса инергә тора. Ул шундайыраҡ хыялға бирелә: ул аҡсаға матур бер урында өй һалам, мынауында мансарда, мунса була, был яҡта баҡса, урталыкта беседка, беседканың уртаһында өҫтәл торасаҡ. Бөтә эштәрҙе тамамлағас, ҡунаҡтар саҡырам. Иң түрҙә фәлән-фәлән кеше ултырасаҡ, башҡа ҡунаҡтарым шунда-шунда ултырасаҡ. Мәжлес башланыр алдынан ҡунаҡтарыма шундай һүҙҙәр менән мөрәжәғәт итәм. Ул хатта шунда һөйләйәсәк телмәренең тексын да күңелендә генә яҙып та ҡуя.**



*Беҙҙә башҡаларҙың күңелен уйлауға бәйле уңайһыҙланыу, оялыу бар. Эшҡыуарлыҡта туктауһыҙ рәүештә үҙ һүҙеңде әйтә белеү талап ителә. Әгәр ҙә кеше ҡул күтәреп, һорау бирергә уңайһыҙланһа, унан эшҡыуар сыҡмай. Ә эшҡыуарлыҡҡа ыңғай йоғонто яһаған сифатыбыҙ - әрһеҙлектер, тип уйлайым. Әрмелә лә был сифатыбыҙ баһалана: арымаҫ-талмаҫ башҡорт аты һымаҡбыҙ, ике-өс кешене бер үҙебеҙ алыштыра алабыҙ. Ҡайһы мәлдә батырлығыбыҙ, тәүәккәл булыуыбыҙ уңыш килтерә.*

- Шул уҡ ваҡытта икенсе бер халыҡ вәкиленең ҡулына бер миллион һум аҡса инергә торһа, ул шул аҡсаны тиҙ генә ике-өс тапҡырға арттырыу планын ҡора.

**Беҙ, ысынлап та, күберәк хыялға бирелергә яратабыҙ. Беҙҙең халыҡтың эшҡыуарлыҡҡа булышлыҡ итә һәм ҡамасаулай торған сифаттары хаҡында әйтә алаһыңмы?**

- Иң тәүҙә ҡамасаулағанын әйтергә кәрәктер. Беҙҙә башҡаларҙың күңелен уйлауға бәйле уңайһыҙланыу, оялыу бар. Эшҡыуарлыҡта туктауһыҙ рәүештә үҙ һүҙеңде әйтә белеү талап ителә. Әгәр ҙә кеше ҡул күтәреп, һорау бирергә уңайһыҙланһа, унан эшҡыуар сыҡмай.

Ә эшҡыуарлыҡҡа ыңғай йоғонто яһаған сифатыбыҙ - әрһеҙлектер, тип уйлайым. Әрмелә лә был сифатыбыҙ баһалана: арымаҫ-талмаҫ башҡорт аты һымаҡбыҙ, ике-өс кешене бер үҙебеҙ алыштыра алабыҙ. Ҡайһы мәлдә батырлығыбыҙ, тәүәккәл булыуыбыҙ уңыш килтерә.

Ә теге ҡулға бер миллион инергә торған ситуацияла, бәлки, хыялға бирелгән башҡортобоҙ башҡаларҙан күпкә бәхетлерәктер. Бөтә нәмәне аҡсаға бәйләргә ярамай. Ғөмүмән, миллиард һум аҡсаң булып ҡына бәхетле булып булмайҙыр.

**Нимәнәлер алыр өсөн дә түләргә кәрәк, аҡсаны күберәк алып, урынына һаулығыңды ла бирәһең. "Бөтә нәмә өсөн дә түләргә кәрәк" тигән мәҡәл дөрөҫмө?**

- Был - философия, ике төрлө ҡарарға була. Элегерәк беҙҙең халыҡ араһында тауар һатырға уңайһыҙланған кешеләр бар ине. Хәҙер был йәһәттән күпкә алға киттек. Ауыл хужалығы үҫешә башланы. Минең менән бергә уҡыған егет Илфат Сәфәрғәлин Һаҡмарҙа ит консервалары, билмәндәр, котлеттар эшләй башланы. Әбйәлилдән Айтуған атлы егет күп итеп йылҡы тота, ҡаҙы, тултырма яһау цехы асты, туризм менән шөғөлләнә. Минең күргән-белгәндәр араһынан ғына күптәр ҡалҡып сығып килә.

**"Аҙ булһа ла етә, күп булһа ла бөтә" тигән әйтем аҡса тураһында. Уны нисек аңларға була?**

- Был өйрәнеүгә бәйлелер. Ҡайһы кеше ҙур аҡсаға өйрәнә лә, аҙаҡ ҡытлыҡ кисерә башлай. Шул уҡ ваҡытта бәләкәй аҡса менән дә йәшәп ятыусылар бар.

**Беҙҙең яҡта ғүмере буйына колхозда эшләгән бер ағай, колхоз юҡҡа сыҡҡас, эш хаҡы түләмәһәләр ҙә, эшкә йөрөргә әҙер булыуы хаҡында белдергәйне. Быны нисек аңларға була?**

- Ғаиләһе, туғандары, ауылдаштары алдында кеше үҙен кәрәкле итеп тойғоһо килә.

**Игенселек менән шөғөлләнергә теләгең юҡмы?**

- Ике тапҡыр ынтылып ҡараным да, минусҡа киткәс, ташланым. Беҙҙең төбәктә ике йыл иген уңһа, өс йыл уңмай.

**Баймаҡ районында ниндәй йүнәлештәге эшмәкәрлек менән уңышлы эшләп була тип уйлайһың?**

- Баймаҡ ҡына түгел, ҡайҙа ғына булмаһын, барыһы ла кешенең үҙенән тора. Һуңғы йылдарҙа Баймаҡ районында ауыл хужалығында эшләүселәргә гранттар, субсидиялар бирелә башланы. Дәүләт ярҙамы менән яңы тракторҙар, комбайндар, сәскестәр, сапҡыстар ала башланылар. Әммә "Шундай эш менән шөғөлләнегеҙ" тип кәңәш бирә алмайым. Сөнки мине тыңлап эшен башлаусы уңышһыҙлыҡҡа юлыҡһа, мин үҙемде ғәйепле тоясаҡмын.

**Бер күренештең шаһиты булғаным бар: ялан яғында дүрт яғынан да еткерә һөрөлгән ауыл халҡы өҫтөнә ағас ауып торған урман яғындағы ауылға ҡарағанда хәллерәк йәшәй...**

- Беҙ булғандың ҡәҙерен белмәйбеҙ. Ҡайһы берҙә аяҡ аҫтында ятҡан аҡсаны эйелеп алырға йыбанабыҙ. Ҡайһы берәүҙәр бер эш башларға ҡарар итә лә, барлыҡ нюанстарын уйлап, "Булмай" тип ҡул һелтәп тә ҡуя. "Булмай" тип йәшәһәң, ысынлап та, бер нәмә лә булмай инде.

**Эшҡыуарлыҡ өлкәһендә уңышҡа өлгәшкән милләттәштәребеҙ күпме?**

- Был йәһәттән элекке менән сағыштырырлыҡ түгел, күпкә алға китеүселәр бар. Әммә һеҙ уларҙы белмәйһегеҙ. Ундайҙар күҙ-башҡа күренергә, үҙҙәре хаҡында һөйләргә теләмәй. Күптәре миллионерҙар, араһында миллиардерҙар ҙа бар. Ҡайһы берҙәре ябай ғына кейенеп, ябай ғына һөйләшеп, ябай ғына машинала йөрөргә мөмкин.

**Илебеҙ иҡтисадының технологик мөмкинлектәре тураһында ниндәй фекерҙәрең бар?**

- Нишләп беҙ үҙебеҙҙең илдә етештерелгән машиналарҙа күпләп йөрөмәйбеҙ, нишләп Рәсәй смартфондары тотоп ултырмайбыҙ? Шул уҡ ваҡытта "Нива" машинаһы менән юлһыҙ ергә инһәң, иномаркаларың батып ултырып ҡала. Тимәк, беҙҙең автопром насар тип әйтеп булмай.

**Бөтә кешеләр ҙә эшҡыуар була алмай. Һәр бер ауылға ундайҙар бер-ике кешенән артмай. Тимәк, ауылдың киләсәген башҡаларҙы эш урыны менән тәьмин итеүсе эшҡыуарҙар билдәләйәсәк. Нимә генә тимә, элеккесә колхоз-совхоздар системаһына ҡайтып булмаясаҡ. Шулай түгелме?**

- Күп кенә кешеләр сәғәтле эшкә өйрәнгән. Улар иртәнге 9-ҙан киске 6-ға тиклем эшләү режимын хуп күрә. Эшҡыуар ундай режим менән эшләй алмай.

**Ауылдарҙы нисек һаҡлап ҡалып була тип уйлайһың?**

- Хәҙер үҙәкләштереү шундай тиҙлектә бара, ауылдар түгел, ҡайһы бер бәләкәй ҡалалар ҙа юҡҡа сығыуы бар. Тәмәстәр - Баймаҡҡа, Сибайға, Баймаҡ - Сибайға, Өфөгә, Өфөләр - Мәскәүгә, Мәскәүҙәр сит илгә ынтыла. Минеңсә, дәүләт кимәлендә программалар ҡабул итеп кенә ауылдарҙы һаҡлап ҡалырға булалыр. Беҙҙә иһә был мәсьәлә үҙ ағышына ҡуйылған.

**Аҡса һинең өсөн байлыҡмы, әллә механизммы?**

- Механизм.

**Уны ҡасан аңланың?**

- Тәүге көндәрҙән алып. Тәүге табыштар килгәс тә мин уны әйләнешкә ебәрҙем. Шунан һуң килгәненән тағы ла әйләнешкә йүнәлттем. Быны өсөн түҙемлек кәрәк.

**Нисә йылдан һуң машина һатып алдың?**

- Биш йыл тирәһе үткәс. Уға тиклем ағай менән икебеҙҙең иҫке генә "Нива"быҙ булды. Эшҡыуарлыҡта мөғжизәгә ышанып булмай. Унда лотереяға аҡса отоп булмай. Осраҡлы рәүештә, көс һалмайынса табылған аҡсаның да бәрәкәте булмай. Өләсәйем беҙгә: "Еңел аҡса булмай ул. Үҙеңдең көсөңдө һалып тапҡан аҡсалар ғына мәнфәғәт килтерә, ә еңел аҡса нисек килгән булһа, шулай сығып та бөтә. Шуға күрә тырышып эшләргә кәрәк", - тип әйтер ине һәр ваҡыт. Беҙҙең бөгөнгө кимәлгә күтәрелеүебеҙ өләсәйебеҙҙең ҡаҙанышы, сөнки ул беҙгә үҙенең һөйөүен, йылыһын бирҙе, аҡылы менән бүлеште. Бөгөн иһә мин үҙемдең хеҙмәт емешемде башҡалар менән бүлешә алыу мөмкинлегенә эйә булғаным өсөн Хоҙайға рәхмәтлемен.

**Фәһемле әңгәмәң өсөн оло рәхмәт, Илсур, эшеңдән халҡың ҡыуанһын!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
әңгәмә ҡорҙо.

✓ *Районға сығырға булғанда Исхаҡов байрамға әҙерләнгән һымаҡ әҙерләнә. Айғырҙы ектермәй, бер-ике көн һолола ғына тоторға ҡуша, һәйбәтләп ҡырғыслап таҙарттыра, үҙе лә яһанып ала. Район юлының сбруйы ла икенсе.*



Илленсе йылдарҙың башы ине. Һуғыштан һуң яңы аяҡҡа баҫып, мандып килгән колхозда нимә алһалар ҙа шатланалар. Ярлылыҡ биҙҙергәйне кешене. Бер килке Исхаҡов йөк машинаһы һатып алырға уйлай икән, тигән хәбәр сыҡты. Колхозсылар әле иләмәгән-һуҡмаған тигәндәй машинаны дәртләнеп көтә. Исхаҡов машина артынан байтаҡ йөрөнө, буғай, ләкин алып барып сығара алманы, бирмәнеләр. Шунан ҡайҙалыр егерме меңгә йәш айғыр һөйләшеп ҡайтҡан, тинеләр. Колхозсылар быға ла ҡаршы килмәне. Кем колхозы - уларҙыҡы, кем председателе китеп бара - уларҙыҡы. Районға кәңәшмәгә йыйылһалар, колхозына, хатта председателенә түгел, иң элек егеп йөрөгән айғырына, кырандас-сбруйҙарына ҡарайҙар.

Исхаҡов айғырҙы үҙе күреп, хаҡы-ние тураһында килешкән. Таҙа ҡанлы, өс йәшлек нәҫел айғыры икән. Шулай ҙа үҙ күҙенә генә ышанмайынса, Мәһәҙи ағай менән Ҡотлоюл ҡартты ебәрҙе. Председатель тейешлеһенән тыш юллыҡ һәм мәгәрислек тә бирҙе:

- Кеше араһында кәм-хур булып йөрөмәгеҙ. Эш һеҙҙә, мал оҡшаһа, документтарын яһап ала ла ҡайтаһығыҙ, - тине ул.

Тегеләр ике көндән аждаһа тоткан әкиәт батырылай ҡара йылтыр айғырҙы уйнаҡлатып алып та ҡайттылар. Маңлайында аҡ ҡашҡаһы ла бар. Дөлдөл, торғаны дөлдөл! Тәртәгә тағылған айғыр матурлығына маһайған ҡылансыҡ йәш ҡыҙ шикелле, муйынын дуғаландырып, бик эре генә атлап килә. Артынан кешеләр эйәргән. Малайҙар ғына түгел, хатта ололар ҙа бар. Нисәмә йыл бит инде колхоздың бындай затлы мал алғаны юҡ.

Идара ихатаһына халыҡ йыйылып китте. Мәһәҙи ағай менән Ҡотлоюл ҡарт, ете диңгеҙ кисеп ҡайтҡан ил батырҙары шикелле, ауылдаштарына юл хәбәрҙәре һөйләй, ә малай-шалай, танауҙарын тартырға ла онотоп, әкрен генә айғырға яҡынлай. Шунан тегенең күҙҙәрен аҡайтып ҡарап, сүлмәктәй тояҡтары менән ерҙе сапсып алыуы була - ыштандарын да тотоп тормайынса, ыҫҡыналар.

Бәхәс башлана:

- Хәс Салауат Юлайҙың аты һымаҡ, ибит!

- Уның аты күк булған, белә-белһән!

- Һы, әллә уның аты берәү генә булған, тиһеңме?

- Белә-белһән, элек башҡорттар һуғышҡа бейә менән йөрөгәндәр!

- Кит, иҫәр! Хи-хи-хи!

Колхоздың ашатлап ҡына менеп китерлек ваҡ, арыҡ аттарына күнеккән кешеләргә айғыр ысынлап та ғифриттәй күренә. Менеү түгел, ҡарауы ҡурҡыныс та! Түше ҡайһылай бит, саҡ ҡына ҡуҙғалдымы, тарамыштары уйнап китә.

Шул ваҡыт, мискәһен дыңғырлатып, ишек алдына пожар аты менән Әшрәф ҡарт килеп инде. Уның күренеүе булды, халыҡ көлөп ебәрҙе. Ҡартын, әйтерһең, бына сағыштырығыҙ инде, тигән һымаҡ юрамал алып килгән. Ошоғаса арыуҙар иҫәбендә йөрөгән пожар аты Йондоҙҡашҡа янында сүкте лә ҡалды. Ҡара айғыр тегегә, был хайуан да беҙҙең заттанмы икән, тигән һымағыраҡ ҡарап алды.

Ике-өс көн ихата алдынан кеше өҙөлмәне. Ошо тирәгә йыйылалар ҙа һөйләшеп торған булалар. Ә ғәҙәти лапаҫ дейеүҙе ябып ҡуйған әкиәт һарайына әйләнде лә ҡуйҙы. Эргәһенән малайҙар тегеләй ҙә үтеп китәләр, былай ҙа үтеп китәләр, ҡыуып ебәрһәләр, ситән ярығынан булһа ла ҡарап торалар.



Рәшит СОЛТАНГӘРӘЕВ

# ЙОНДОҘҠАШҠА

Хикәйә

Ә Йондоҙҡашҡа, урмандан яңы тотоп алып ҡайтҡан кейек һымаҡ, һаман эйәләшеп етмәй быларға.

Ҡайһы саҡта Мәһәҙи ағай уны, оҙон арҡанға тағып, бер иркенерәк урынға алып сыға ла, түңәрәк буйлап юрттыра, уйната. Көсөнә, ғәйрәтенә, һылыулығына һоҡланып ҡарап торғанды ат та белә, тиерһең - уның һайын үҙен матурыраҡ тоторға тырышҡан һымаҡ. Муйынды бөгә биреп, түбән ҡарап ҡына юрта, тояғынан ерҙәр һелкенеп ҡала - өҫтөнә мен дә сабып сыҡ та кит!

Ҡар төшкәс, йәш айғырҙы еккергә өйрәтәләр. Әллә ни хәтлем ир-ат, егет-елкенсәк, малай-шалай эйәрҙе тегенең артынан. Бындай эште ауыл араһында эшләргә ярамай, айғырҙы иркенгә, ферма артындағы типһәнгә алып сыҡтылар.

Биш-алты ир көс-хәл менән айғырҙы тәртә араһына керетеп, егеп бөтөүҙәре булды, ҡуҙға баҫҡандай торған Йондоҙҡашҡа дондортоп сығып та китте. Ах, алдан уйламағандар, тәртәһе ҡыҫҡа булған. Хәйер, уға ярарлыҡ тәртә лә булмағандыр инде колхозда. Сапҡанда айғырҙың аяғы санаға бәрелә, шуға асыуынандыр инде теге тағы ла шәберәк олаға.

Ҡыҙыҡ саба, әйтерһең егеүле ат түгел, ә бәйгелә килә. Сана дауылда йөҙгән кәмәме ни! Санаға тейәлгән малайҙар берәм-берәм ҡайһыһы ҡайһы яҡҡа йығылышып ҡалды. Тик Мәһәҙи ағай ғына, ике ҡулы менән дилбегәһен бар көсөнә тартып, ниндәйҙер ҡөҙрәт менән түҙеп бара һаман.

Бер аҙҙан сана әллә ҡәҫкә, әллә ҡырмыҫҡа иләүе-фәләнгә барып менде - Мәһәҙи ағай үҙе лә ялп итеп ҡалды.

Йондоҙкашҡа, ҡарап торосыларҙы ирештергән һымаҡ, был тирәнән алыҫ та китмәй, үҙе тоттормай ҙа, тояҡтарын санаға бәрә-бәрә сабыулап йөрөй бирә. Бара торғас, бер тәртәнең төбө ҡайырылып сыҡты. Шунан айғыр сананы нисектер телефон бағанаһына килтереп бәрҙе. Сана ла, баяғы Мәһәҙи ағай һымаҡ, айғыр артынан әйләнеп-тулғанып барып ятты.

Тәртәләр артыҡ ҡамасауламай атҡа. Хәҙер Йондоҙкашҡа, "өйрәттегеҙ бына еккегә" тигән һымаҡ, эре генә һыу буйына төшөп китте. Әле туңып өлгөрмәгән йылғаны ике генә һикереүҙә аша сыҡты ла ҡайтыу яғына боролдо.

Был ауылда ундай ғына атты күрмәгәндәр, өйрәттеләр быны ла!

Айғырҙы менеп ҡарарға баҙнат итеүсе булдымы икән, мәгәр кырандасына ултырып, урамды бер генә урарға хыялланмаған кеше юҡ ине ауылда. Председатель Исхаҡов уны берәүгә лә тоттормай. Нисә йыл эсендә бөтәһе өс кешегә генә рөхсәт итте. Береһе - сыбатай менән райондан депутат алып ҡайтҡанда, икенсеһе - Мәһәҙи ағайҙың кинйә улының туйына барған ваҡытта. Унда ла, бәлки, бирмәҫ ине, берҙән, конюх кеше, икенсенән, ҡоҙалары - районның бик абруйлы кешеһе - Советтар Союзы Геройы ине. Әйҙә, күрһен "Ҡыҙыл Урал" колхозының ҡайһылай икәнен.

Тракторист Бүләкбайҙың ҡатынын ҡапыл балаға тулғаҡ тота башлағас, тиҙ генә күрше ауылға больницаға алып барырға кәрәк булды. (Дөрөҫ, барыбер бала көтмәгән, юлда донъяға килгән, шуға күрә исеме лә Юлдыбай булып ҡалды.) Өсөнсө тапҡыр сит кешегә ана шулай егелде айғыр.

Исхаҡов айғырҙы үҙе лә көн дә екмәй. Ауыл араһында йөрөгәндә, бесәнселәр йә утаусылар янына барғанда Моряк исемле бейә лә ярап тора. Ә ситтән кеше килһә, йә берәй районға кәңәшмәгә барһа инде - Йондоҙҡашҡа. Һай, ҡара айғырҙы егеп йөрөүҙәре үҙе бер ғүмер шул! Урамдан үтә был әҙәмде йоторҙай булып - тәҙрә быялалары зыңлап тороп ҡала. Исхаҡовың килә эре генә, ник бер боролоп ҡараһын тирә-яҡҡа! Шырмыйлыҡ бар инде үҙендә. Килә торғас, дилбегәһен бушатып алған була, шуны ғына көткән айғыр "жыйт" итеп кенә ҡала.

Районға сығырға булғанда Исхаҡов байрамға әҙерләнгән һымаҡ әҙерләнә. Айғырҙы ектермәй, бер-ике көн һолола ғына тоторға ҡуша, һәйбәтләп ҡырғыслап таҙарттыра, үҙе лә яһанып ала. Район юлының сбруйы ла икенсе. Сығып китә был, сәғәт үтһә үтә, үтмәһә юҡ, утыҙ саҡрым ергә барып та керә. Исхаҡов үтеп киткәнен һәр ауылда белеп ҡалалар хәҙер.

Мәһәҙи ағай айғырҙы егеп бирә лә артынан:

- Һай, йәш шул! Ғәйрәт ҡайһылай, - тип һөйләнеп ҡала. Шунан:

- Егет кенә саҡта, һай, елеп ҡал,
Арҡаларҙа йөрөгән болан-дай, -

тип ауыҙ эсенән генә һыңғырлап һарайына инеп китә.

Бер юлда ятҡан колхоздарҙың председателдәре кәңәшмәләрҙән бергәрәк ҡайтырға яраталар. Күңелле бит, ҡайһы саҡта айғырҙарын да уҙыштырып алалар.

Бер шулай, район сессияһынан һуң күмәкләшеп ҡайтырға булдылар. Тик Исхаҡов ҡына көттөрҙө. Әле банкка, әле райзоға керә. Тегеләр ашханаға инеп, бер аҙ көттөләр ҙә, ҡул һелтәп, ҡайтырға сыҡтылар. Исхаҡовҡа шул ғына кәрәк, ун биш-егерме минут торҙо ла ебәрҙе Йондоҙҡашҡаһын күңеле теләгәнсә - сана ергә тейгән ерҙә тейеп ҡала, теймәгәндә осоп үтә, биткә ҡар ғына сәсрәй.

Алда бер ҡара нәмә күренде: үҙенең Ҡарлуғасында Абдрахманов ҡайтып барған була. Исхаҡов саҡ ҡына дилбегәһен ҡағып ҡуйҙы. Йондоҙҡашҡа шул етә ҡалды - оса инде! "Ҡыҙыл таң"дың председателе эште һиҙеп алды, үҙенең эре һөйәкле ҡара бейәһен ҡыуалай башланы. Ҡайҙа инде ҡарғаға ыласын менән ярышыу: Йондоҙҡашҡа тәрән көрттә тегеләр эргәһенән ажғырып уҙып китте. Һай, йәш мал, ярһыу шул!

- Ә-ә, бойҙай икмәге менән арыш икмәге бына шулай ярыша! - Исхаҡов Абдрахмановҡа шулай ҡысҡырып үткән булды.

Был көндә ул дүрт председателдең өсәүһен уҙҙы. "Ағиҙел" колхозыныҡы - бәхете, район үҙәгенә яҡын тора - ауылына ҡайтып өлгөргәйне. Ошо хәл тураһында Исхаҡов кәңәшмәгә килгән һайын көлөп һөйләй торғайны.

Йәй район һабантуйында Йондоҙҡашҡаны ла сабыштырырға уйлағас, "Ҡыҙыл Урал"дың ҡайһы бер кешеләре шөбһәләнеп тә йөрөгәйне. Нәҫел айғырының сабышыуҙа рәте булмай, тиҙ бирешә лә ҡуя торған, еңелерәк һөйәкле мал эше ул уҙышыу, тинеләр. Ҡулындан килмәҫтәй булһа, майҙанға сыҡмауың хәйерле. Тик Мәһәҙи ағай ғына мал таный торған кеше: "Ҡурҡмағыҙ", - тип ҡуйҙы.

Аттарҙы сабыш башына алып киткәс, Исхаҡовтың өндәшкеһе килмәй генә йөрөнө. Уйындар, көрәш-фәләндә лә ҡайғыһы юҡ, шым ғына сәғәтенә ҡарай ҙа ҡарай.

Ҡайҙан күреп, танып алғандыр инде, бер ваҡыт ул, малайҙар шикелле, майҙан яңғыратып:

- Йондо-оҙ! - тип ҡысҡырып ебәрҙе. Үҙе әле әллә ҡайҙағы, уба һыртынан былай сабып килеүсе һыбайлыларҙы өсөн "Юл бирегеҙ, юл!" тип һөрәнләп, кешеләрҙе ҡыуа башла-

***✓ Тора-бара Йондоҙҡашҡа ашамай ҙа, эсмәй ҙә башланы. Мал докторҙарының дарыуҙары ла, Мәһәҙи ағайҙың ырымдары ла ярҙам итмәне. Ауырыған ағзаһы юҡ һымаҡ, ә үҙе сабылып ташланған үләндәй, күҙгә күренеп шиңә бара.***



ны. Был юлы уны һис кенә лә кырандасында ҡупайып китеп барған тәкәббер председатель тиməçһең, торғаны бер ауыл малайы ине.

"Ҡыҙыл Урал"дыҡылар йыйылып китте. Исхаҡов инде, шунда йөрөй, әйтерһең, айғыр түгел, үҙе сабып килә.

Башҡа аттар әллә ни ғүмер үткәс кенә күренгән булды. Ат башындағы малай ҙа:

- Һи-и, беҙҙең айғыр ни тегеләрҙе уйнап ҡына үтте лә китте! - тип ебәрҙе.

- Китсе әле! Мә, энем! - Исхаҡов кесәһенән тегеңә сылбырлы көмөш сәғәтен йолҡоп бирҙе, һаман да үҙ аҡылына килә алмай йонсой, бахырың.

Даны китте Йондоҙҡашҡаның. "Ҡыҙыл Урал"дарҙың айғыры машинаны ла уҙа икән, тип үк һөйләп сығарҙылар. Ярыштырып ҡараһаң, үтер ҙә ине, бәлки. Район етәкселәре лә килгән-киткәндә: "Айғыр нисек әле, Исхаҡов?", - тип һорашалар. Ә күршеләр нәселен алып ҡалырға тырыша.

Тәрбиә лә шәп шул. Исхаҡов көн дә ни ашаттығыҙ, ни эсерҙегеҙ, йыуҙығыҙмы, таҙарттығыҙмы, тип һорашып ҡына тора. Мәһәҙи ағай, әлбиттә, атты нисек ҡарарға икәнеп Исхаҡовтан шәберәк беләләр, шулай ҙа, хужа кеше ҡыҙыҡһынып торғас, күңеллерәк.

* * *

Ошо йәйҙе колхоз күптән хыял иткән ГАЗ-51-ҙе һатып алды. Ат - ат, машина - машина инде. Айғырҙы маҡта ла машинала йөрө.

Ихатаға тағы халыҡ йыйылды. Бала-саға машинаның кузовында, бәхетлерәктәре - кабинала. Буяу, резина еҫе аңҡып торған йәшел машина бөтә ауылға ҡот биреп ултыра.

Шоферы ла тиҙ табылды. Исмәғилде армияла шоферлыҡҡа өйрәтеп ҡайтарғандар икән, ултырып сыҡты ла китте был.

"Ҡыҙыл Урал" ана шулай хәлләнде. Ҡыш пилорама алып ҡайтып ҡорҙолар, ә сәсеү бөткәс, Исмәғил, грузовигын икенсе кешегә тапшырып, Ульяновск ҡалаһына китте. Бер нисә көндән һигеҙ урынлы еңел машинаға ултырып та ҡайтты.

Исхаҡов хәҙер машинала ғына йөрөй. Районға-фәләнгә барырға булһа, "Ҡыҙыл таң"-дың председателенә шылтыратып ҡуя:

- Әҙерләнә башла, ун ете минуттан инеп алырмын, - ти.

Йондоҙҡашҡа һарайҙа тора. Мәһәҙи ағай ғына ҡайһы саҡта, нуҡта теҙгенен ҡыҫҡа тотоп, һуғарырға алып сыҡҡан була тегене, һирәкләп ҡурпы сабып алып ҡайталар. Айғырға төшкән бар эш шул. Юҡһа, уны көндәр, аҙналар буйы ҡараңғы һарайҙа бәйле тоталар.

Ә тәртип һаман да элеккесә ҡалды. Исхаҡов айғырҙы үҙенән башҡа берәүгә лә егергә рөхсәт итмәй. Машинаһы ватылһа, йә былай ҡупайып алыу өсөн генә айғырына әллә ниҙә бер ултырып сыға:

- Машина ялҡытып китте әле, - тигән була ул.

Көслө айғырға бик аҫтында тороуы ауыр булһа кәрәк. Ул кәртәгә берәй кеше килеп инһә, хатта ҡапҡа ярығынан ғына ҡараһалар ҙа ярһый, асыулана башлай. Баҡырас башындай күҙҙәрен аҡайтып борола ла әлеге сүлмәктәй тояҡтары менән сапсырға тотона, һарай дер һелкенә. Әллә нимәһенә яратмай башланы ул кешене.

Тирә-яҡ тын ҡалғас, Йондоҙҡашҡа баҫыла. Алда һоло ла, яңы сабып килтерелгән ҡарағура ла бар. Тик нимәгә Йондоҙҡашҡаға аҙыҡ, ирек кәрәк уға. Сығарып ҡына ебәрһендәр, өс көн, өс төн ашамаһа ла риза. Үҙе генә сығып олағыр ине лә, зиндандан ҡотолоу юлын белмәй.

Ҡайһы саҡта ишек алдына берәй бейә килеп инә. Йондоҙ уны шунда уҡ һиҙеп ала.

- Һы-һы, һы... - Ҡалын ирендәрен ҡалтыратып, үҙенсә йомшаҡ, иркә генә итеп өндәшә, шунан яман итеп, йән тетрәткес ҡиәфәттә кешнәп ебәрә. Танау таржайған, ике күҙе ишектә. Бер тегеләй, бер былай ынтыла. Юҡ, ишек асылмай, ҡайыш муйынды ҡыҫа. Кешеләр үҙҙәре еңел генә бәйләп, еңел генә сисәләр ҙә бит, унан булмай.

Элек көн дә килеп ҡарай, иркәләй, усына һалып ҡына һоло бирә, шунан икәүләп әллә ҡайҙарға елдерә торған кеше бөтөнләй күренмәй, шул дүрт тәгәрмәсле арбаһына ултырып тик йөрөй. Йондоҙҡашҡа менән сыҡҡанда ла оҙаҡҡа түгел. Уның бит һаман да элекке һымаҡ күҙ күреме етмәҫ яҡтарға ҡарап сапҡыһы, башҡа айғырҙарҙы геүләтеп уҙып киткеһе килә лә, юҡ, бер аҙҙан әлеге шул һарайға килтерәләр ҙә ябалар. Хәҙер теге әкрен генә баҫып йөрөй торған ҡарт һыуҙы ла һәр саҡ күнәк менәп генә бирә. Эй, яратмай ҙа шул нәмәнән һыу эсергә.

Ә быға Йондоҙҡашҡа үҙе ғәйепле. Эш боҙоп ташланы шул.

...Мәһәҙи ағай айғырҙы ҡырғыслап, тәнен таҙартып алырға булғайны. Эшкә тотоноп та өлгөрмәне, бөтә күк ярылып киткән һымаҡ, ҡапыл шатор-шотор йәшен атып ебәрҙе лә, шаулатып эре борсаҡ яуа башланы. Болото ла бәләкәй генә һымаҡ ине, уйламағандан ғына ғәрәсәт ҡупты ла китте. Мәһәҙи ағай саҡ лапаҫ аҫтына ҡасып ҡотолдо, айғыр ишек алдында бағанала бәйле көйө ҡалды.

Хәтәр! Бөтә донъя шу-у-у итеп тора. Ерҙә ап-аҡ эре боҙ борсаҡтары һикерешкәне генә күренә, һә тигәнсе ишек алды сып-сыбар булды.

Айғыр тынысһыҙлана башланы. Мәһәҙи ағай йәһәт кенә барып сисә һалырға уйлағайны ла - әмәле юҡ. Ахырыһы, утлыҡсалағы кожанын эҙләргә тотондо.

Тағы донъя тетрәп китте. Йондоҙҡашҡа бар ғәйрәтенә тартылды, ҡайыш теҙгендең, энә ебе кеүек, өҙөлгәне лә тойолманы. Арғымаҡ, ҡармаҡҡа эләккәндән һуң, кире һыуға төшкән суртанмы ни, ялт итеп кенә ҡапҡаны һикереп сыҡты ла юҡ булды. Артабан аяҡ тауыштары ғыпа дөпөлдәне.

Мәһәҙи ағайҙа ямғыр ҡайғыһы китте, йүгереп урамға сыҡты: айғыр йән көсөнә саба. Ул тыҡрыҡҡа хәтлем барҙы ла шунан ҡапыл һыртҡа сыҡты һәм яңынан кирегә - ауыл осона ҡарай боролдо.

Ҡара айғыр, йәшен йәшнәгәндә уйнаған ҡарлуғас һымаҡ, ҡыялатып яуған аҡһыл борсаҡ ямғыры аша ялт-йолт итеп кенә ҡала. Конюх йәнен усына тотоп тора: йә Хоҙай, бәрә бит йәшен үҙен!

Күктә тағы дәһшәтле ут ялтырап ҡалды. Мәһәҙи ағайҙың түҙеме бөттө, айғыр киткән яҡҡа йүгерә башланы. Ҡара шәүлә аҫҡа, аттар һарайына боролдо. Мәһәҙи ағай ҙа шул яҡҡа...

Бына бер ваҡыт күк күкрәүенән дә яманыраҡ тауыш ишетелде: ике айғыр талаша.

...Йондоҙҡашҡа кәртәгә йомолоп барып та инде, йәш айғырҙы талай ҙа башланы. Башта тегеһе, ҡыҙҙар алдында егетлеген күрһәтергә теләгән йәш үҫмер шикелле, бирешмәҫкә, быға ҡаршы торорға уйлағайны, әммә был килгән ыңғайына уҡ бар ғәйрәте менән бәреп йыҡты. Йәш айғыр шунда уҡ арҡаһында әйләнеп аяғына баҫты. Мәгәр барыбер Йондоҙҡашҡанан ҡотола алманы. Ауыл өҫтөндә ике ғифриттең күкрәгенән сыҡҡан йән өҙгөс яман тауышы ғына яңғырай. Береһе, әйтерһең, ярҙам һорай, икенсеһе, нимә өсөндөр үс ала.

Йүгереп Мәһәҙи ағай килеп еткән булды. Конюхтар ҙа ни эшләргә белмәй йөрөй. Яҡын барырлыҡ түгел. Бөтөрә бит был хәҙер! Йондоҙҡашҡа тегенең бер нисә урынын умырып тешләп тә алды. Тик бер аҙҙан ғына йәш айғыр еңелгәнен белдерҙе, буғай, бынан ысҡынды ла һарайға инеп юғалды. Артынан ишекте яба һалдылар. Дошманын ҡыуып ебәреп, донъяға үҙе хужа булып алғас, әле генә ҡот осҡос ҡиәфәттә күренгән Йондоҙҡашҡа тағы ыҫпайланып, матурланып китте. Ул аттар өйөрөн әле тегеләй, әле былай ярып сыға, үҙенсә йомшаҡ ҡына итеп бейәләрҙе иркәләй. Зиндандан ҡотолған был арыҫланды күреү һоҡланғыс та, йәл дә ине.

Шулай ҙа уны бында ҡалдырырға ярамай. Нисек кенә тырышмаһындар, ошо кәртә эсендәге Йондоҙҡашҡаны тота алманылар. Яҡын ебәрмәй ҙә ҡуя. Кемдең үҙ теләге менән иркенән мәхрүм булғыһы килһен инде!

Башҡаса юл ҡалмағас, береһе лапаҫ башына менде лә, уңайын тура килтереп, айғырҙың муйынына арҡан ташланы. Боғалаҡты һиҙеп ҡалыуы булды, Йондоҙҡаҡшҡа, ҡармаҡҡа эләккән суртан шикелле, дулай башланы. Арҡан тотҡан кеше нимәгәлер эләгеп йығылды, айғыр кәртә аша урамға һикерҙе.

Арттан биш-алты һыбайлы ҡыуа сыҡты. Тотоп ҡара һыуҙағы балыҡты! Йондоҙ, ямғырҙан һуң тып-тын ҡалған һауаны ярып кешнәй-кешнәй, башта ауыл буйлай сабып үтте. Урамдағы халыҡ, артынан арҡан һөйрәтеп, ен һымаҡ килгән айғырҙан саҡ ҡасып ҡотола. Бына ул бер аҙ барҙы ла тыҡрыҡҡа боролдо һәм арттағы уба башына менде. Туҡтап, бер аҙ конюшня яғына ҡарап торҙо. Сыңғырап торған тауышы менән һарайҙа ҡалған туғандарына һөрәнләне. Тағы бер аҙ торҙо ла, йәш тай һымаҡ, уйнаҡлап сабып сығып китте. Ерҙә өҙөлгән арҡан ярпыһы ғына ятып ҡалды.

Йондоҙҡашҡаның шулай ҙа бер үҙе генә сығып киткеһе килмәй ине шикелле. Әллә ҡайҙарҙан урап, тағы конюшня тирәһенә килде. Әммә бында артыҡ яҡынлашмай ҙа, ҡыуыусыларҙы ла яҡын ебәрмәй. Ул, юрамал ирештергәндәй, ауыл тирәләй сабып йөрөнө лә, тегеләрҙең аттары ап-аҡ күбеккә батҡас, уйнаҡлай-уйнаҡлай далаға сығып китте.

Дүрт һыбайлы Йондоҙҡашҡаны ике көндән генә табып алып ҡайтты. Ҡорһағынан алай бысранған, ялтыр тиреһенә аҡ күбектәр ҡатҡан арғымаҡ, ялдарын елберләтеп, талғын ғына юртып килә. Муйынында ҡайышланып бөткән арҡан киҫәге бәүелә. Ул үҙен тотошорға ярҙам иткән ырыуҙаштарына боролоп та ҡарамай, әйтерһең: "Һеҙ - хыянатсылар!" - ти.

Һыбайлылар Йондоҙҡашҡаны артыҡ ирекһеҙләмәй, ыңғайлатып ҡына киләләр. Айғыр оло юлдан ҡайтырға теләмәне, ҡапыл боролдо ла ауылға терәлеп торған тау башына менде. Ғәскәре алдына сыҡҡан баһадир шикелле, бер аҙ ҡарап торҙо ла оҙон, һағышлы итеп кешнәп ебәрҙе. Аръяҡтағы конюшнянан шундай уҡ тауыш менән яуап бирҙеләр. Бының танау япраҡтары таржайып китте, арыған күҙҙәрендә осҡон уйнаны.

Айғыр, һалмаҡ ҡына юртып, түбән төштө һәм бер аҙҙан конюшня яғына ыңғайланы. Ләкин ике һыбайлы шунда уҡ быға ҡаршы сыҡты. Арыған айғыр бер ни ҙә сыҡмаясағын, был кешеләрҙән ҡотолоп булмаясағып аңлаған, ахырыһы, ҡарышмайынса идара яғына боролдо ла яй ғына, аттарҙа ғына була торған һоҡланғыс, мөһабәт аҙымдар менән һарайға инеп китте. Ҡойроҡтары, әйтерһең, бейеп йөрөгән ҡыҙҙар толомо - атлаған ыңғайына матур ғына тирбәлеп ҡалды.

* * *

Йондоҙҡашҡаны һарайға бикләп ҡуйҙылар. Хәҙер ҡурпыға ла икенсе ат менән йөрөйҙәр, һыуҙы ла алып килеп кенә эсерәләр. Тора ул ошонда ҡойроғо менән себен ҡыуғылап.

Айғыр һыулыҡ буйынан нисектер үҙенә ҙур ғына тишек яһаған. Йыш ҡына шунан башын тышҡа сығара ла тирә-яҡҡа ҡаранып тора. Уның был ғәҙәтен малайҙар ҙа белеп бөткән, һарай ҡыйығына менеп ултыралар ҙа оҙон тал сыбыҡ менән быға төрткөләйҙәр.

Йондоҙҡашҡа башын кире ала ла сапсырға, үрһәләнергә тотона. Һарай дер килә.

- Әй, Йондоҙ ҡоторған, ти бит! Теге ваҡытта уны ҡоторған бүре тешләгән, ти!

- Әйҙә! - Малайҙар даҫор-доҫор килеп һикерешеп төшәләр ҙә һыҙалар.

Мәһәҙи ағай үҙе лә күптән шөбһәгә төшөп йөрөй: ниңәлер, бойоҡ бит айғыр. Ашау ҙа, дәрт тә, ҡиәфәт тә элеккесә түгел. Ул Исхаҡовҡа ла әйтеп ҡараны. Тегеһе:

- Айғыр өсөн ветеринар бар. Ана, Ямаевҡа күрһәт, - тип машинаһына ултырып сыҡты ла китте.

Ветфельдшер Ямаев айғыр эргәһендә өйрөлдө-өйрөлдө лә бер ни ҙә таба алманы. Хәйер, тегеңә яҡын килергә лә ҡурҡты шикелле.

- Кеше һымаҡ аттың да төрлө ваҡыты була инде, - тип әйтеү менән эште бөтөрҙө.

Мәһәҙи ағай үҙ ғүмерендә атты аҙ күрмәне лә бит, быға ни булыуын аңлай алмай. Ә меҫкен мал бойоҡҡандан-бойоға. Ул тағы Исхаҡовҡа әйтте: "Затлы мал бит", - тине. Шунан, ахырыһы, председатель күрше колхоздың ветврачын саҡыртты. Аптырарһың, ҙур белемле врачы ла артыҡ әллә ни әйтә алманы.

- Ауырыуы юҡ кеүек. Бынауыны эсереп ҡарағыҙ, инде лә килешмәһә, тағы хәбәр итегеҙ, һеҙ уны бикләп тотмағыҙ, көтөүгә ебәрегеҙ, - тине.

Йөрөтөп ҡара һин уны иректә, хәҙер талаша башлай. Үткәнендә лә әллә ҡайҙа күрше колхоздың көтөүенә барып сығып айғырҙарын имгәтеп киткән. Шуның өсөн дә һүҙләшеп бөттөләр. Исхаҡов уны бөтәнсә бер ҡайҙа ла сығармаҫҡа, бәйҙә тоторға ҡушты. Ә Мәһәҙи ағай ҡурҡа, көс юҡ, шуға күрә, хужа ла ҡушҡас, бикләп тотоуың хәйерлерәк, тип тик йөрөй.

Тора-бара Йондоҙҡашҡа ашамай ҙа, эсмәй ҙә башланы. Мал докторҙарының дарыуҙары ла, Мәһәҙи ағайҙың ырымдары ла ярҙам итмәне. Аптыранылар. Ауырыған ағзаһы юҡ һымаҡ, ә үҙе сабылып ташланған үләндәй, күҙгә күренеп шиңә бара.

...Бер көндө Мәһәҙи ағай айғырға яңы ғына сабып алып ҡайтҡан ҡарағура һалып йөрөй ине. Элеккеһе лә шул көйө, алдында һолоһо ла бар, аптырағандан маташа инде. Әллә нәмәһенә күңел дә тыныс түгел, ул сығып китте лә кире керҙе. Йөрәге ҡағып тик тора ла.

Бына ҡапыл арғымаҡтың күҙҙәре уйнаҡлап киткәндәй булды. Мәһәҙи ағай тертләп ҡуйҙы: был ни хәл. Ул бесәнен ырғытты ла йүгерә һалып тегенең эргәһенә килде.

Йондоҙ уға күҙен тултырып ҡараны ла аҡрын ғына стена яғына ауыша башлағандай итте. Аһ, был ни эш!.. Мөһабәт аяҡтар, әйтерһең, ҡамырға әйләнгән: ауыр кәүҙәне тота алмай бөгөлә килә, бөгөлә килә... Бына ҡапыл ер һелкенеп ҡуйҙы - Йондоҙ гөрҫ итеп йығылды ла тәрән итеп тын алды. Шунан тынды. Тик башы ғына, аҫылынып үлгәндәге һымаҡ, юғары күтәрелеп тора - бағанаға бәйләнгән яҫы, ҡалын ҡайыш ебәрмәй...

*1970 йыл.*

✓ *Дәште Ҡыпсаҡтың 1222 - 1230 йылдарҙа монголдар тарафынан тулыһынса яулап алыныуына төрлө сығышлы ҡәбиләләр араһында элек-электән була килгән низағтар, тышҡы дошманға ҡаршы көс булмауы төп сәбәп булып тора.*



ИНТЕРНЕТТАН



## ЭШ МӘЛЕНДӘ КӨЙ ТЫҢЛАМА

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көй тыңлау хәүеф тойғоһон һәм депрессияны кәмetә, кәйефте яҡшырта һәм баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрен уята. Әммә ғалимдар билдәләүенсә, эш эшләгән ваҡытта яратҡан көйөңдө тыңлау эштең сифатына кире йоғонто яһай икән. Неврологтар көй һәм тауыштарҙың мейе функцияларына тәьҫирен тикшереп, тулы тынлыҡта ғына мейенең яҡшыраҡ эшләй алыуын асыҡлаған. Белгестәр әйтеүенсә, көй яңғырап торған саҡта мейе бер юлы бер нисә мәсьәлә башҡара һәм уның когнитив функцияларының һөҙөмтәлелеге кәмей.

■ Ғалимдар асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды иҫкәртеү өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәһә, медитация бындай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

■ Һуңғы осорҙа тикшеренеүселәр социаль селтәрҙәрҙең кешегә тәьҫирен өйрәнеүгә күп иғтибар бүлә. Табиптарҙың һуңғы асышы буйынса, баш мейеһендә үҙгәрештәргә алып килеүе ихтимал. Ғалимдар әлегә социаль селтәрҙәр менән әүҙем ҡулланған 125 кешене тикшереп, бик ҡыҙыҡлы һығымтаға килгән. Бәхтиһәң, баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәре ҙурыраҡ булған кешеләрҙең был селтәрҙәрҙә дуҫтары ла күберәк булған. Лондон университеты колледжы докторы Рйота Канаи әйтеүенсә, тикшеренеүҙәр барышында баш мейеһенең реаль һәм виртуаль дуҫтарҙың һанына бәйле булған өлөштәре барлығы ла асыҡланған. Әммә белгестәр әйтеүенсә, был күренештә социаль селтәрҙәрҙең бер ҡатнашлығы ла булмауы ихтимал. Мәҫәлән, интернет менән ҡулланыу ваҡытының оҙайлығы, кешенең үҙенең аралашыусан булыуы, мейе төҙөлөшөнөң үҙенсәлектәре лә быға сәбәпсе була ала. Шуға ла был өлкәлә тикшеренеүҙәр дауам итә.

■ Ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа, хатта машина йөрөткәндә лә кеҫә телефонығыҙҙы гел эргәгеҙҙә тотаһығыҙ, уны йыш-йыш алып ҡарап алаһығыҙмы? Арканзас университеты ғалимдары әйтеүенсә, юлда йөрөгәндә лә телефонын ҡулына ҡыҫып ултырыусылар обсессив-компульсив невроз менән яфалана. Сэм М. Валтон бизнес-колледжы белгестәре фекеренсә, телефонды гел генә ҡулда тотоорға теләү стресс һәм хәүеф тойғоһоноң юғары кимәле тураһында һөйләй. Был осраҡта кешенең башында уны хәүефләндереүсе ниндәйҙер уйҙар барлыҡҡа килә, уны табиптар обсессия тип атай. Уларҙан ҡотолоу өсөн кеше бер үк һәм йәҙәткес хәрәкәттәрҙе - компульсияларҙы ҡабатлай башлай.

■ Көньяҡ Кореяның Ауыл хужалығы милли академияһы докторы Сан Ми Хан иҫәпләүенсә, бал ҡорто ағыуы тиренең һығылмалылығы өсөн кәрәкле коллаген булеп сығыуына булышлыҡ итә. Тиҙҙән был ысул баҙарҙан ботоксты сығарып ташлаясаҡ, тип иҫәпләй белгестәр. Тирегә бал ағыуы нигеҙендә яһалған крем һөрткәндә, кеше сәнсеү тояҫаҡ. Был ваҡытта организм бал ҡорто сағыу тәьҫиренә дусар ителә, һөҙөмтәлә, был урынға ҡан йүгерә, коллаген һәм эластин булене сыға. Әйткәндәй, бал ҡортоноң ағыуын йыйыу өсөн ҡорттарҙы үлтерергә кәрәкмәй, бары тик уларҙан быяла-коллекторҙы саҡтырыу ҙа етә.

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ДАЛА УЛДАРЫ - ҠЫПСАҠТАР БЕҘ!



(Башы 7-се биттә).

II Көнсығыш Төрки ҡағанаты тарҡалғандан һуң ҡыпсаҡтар Иртыш йылғаһына яҡын ерҙәрҙә көн итә. Бында IX быуат урталарына яңы сәйәси берләшмә - Ҡимаҡ ҡағанаты ойоша. XI быуатта йәшәгән фарсы тарихсыһы әл Гардизи был берләшмәнең имур (эймур), йемек (ҡимаҡ), татар, ҡыпсаҡ, байандур, ланиказ, аджлад ҡәбиләләренән хасил булыуы хаҡында яҙа. Һуңғы ике ҡәбилә хаҡында аныҡ мәғлүмәт юҡ, ә эймур, байандур һәм татар ҡәбиләләре әүәл Уйғыр ҡағанаты ҡарамағында көн итә. Эймурҙар һәм байандурҙар туғыҙ уғыҙ ҡәбиләһе составында була, ә татарҙарҙың монгол телле ҡәүемдәрҙең береһе икәнлеге билдәле. Уларҙың ата-бабалары хәҙерге Көнсығыш Монголия һәм Манчжурия ерҙәрендә йәшәй.

X быуаттың икенсе яртыһында Һырдарья буйында йәшәүсе уғыҙ ябғулары (хакимдары) державаһында тарҡаулыҡ көсәйеп, уларҙың Сельджук исемле бейе бер төркөм уғыҙ яугирҙары менән Дженд ҡалаһын баҫып ала. Улар Ислам диненә күсеп, төркмән мосолмандары, тип атала башлай. Сельджук бейҙең ейәндәре Урта һәм Яҡын Көнсығышта Сельджук империяһын төҙөүгә өлгәшә. Әммә уғыҙҙарҙың күпселеге элекке ерҙәрендә ҡалып, XI быуатта монгол сығышлы кидандар ҡыҫымына дусар булып, көнбайыш тарафтарына табан күсеп китергә мәжбүр ителә.

***XII-XIII быуаттарҙа Иртыштан Дунайғаса йәйрәп ятҡан киң далала Европала Дәште Ҡыпсаҡ тип аталып йөрөтөлгән төрки ҡәүемдәре иле барлыҡҡа килә.*** Был илдә бер үҙәктән идара ителеүсе дәүләтселек булмай, төрки ҡәбиләләре айырымланған берләшмәләр составында үҙаллы көн итә. Ҡыпсаҡ исеме менән аталған хәлдә лә, был территорияла бер нисә тиҫтә башҡа төрки ҡәбиләләре йәшәй. XIII быуатта улар барыһы ла монголдар тарафынан яулап алынып, артабан Алтын Урҙа дәүләте олоҫтары составына инеп китә.

XI-XII быуаттарҙа ҡыпсаҡтар Ҡара диңгеҙ буйҙарына, Төньяҡ Кавказғаса үтеп инә, йыш ҡына рус кенәзлектәренә һөжүм итеп тора. Ҡыпсаҡтар күсеп йөрөгән территория төньяҡта Яйыҡ йылғаһына, Көньяҡ Урал тарафтарына тиклем барып етә. Әлбиттә, уларҙың бында әүәлерәк килеп төпләнгән башҡорт ҡәбиләләре менән бәйләнештә булыуы шик тыуҙырмай. Ошо боронғо бәйләнештең асыҡ сағылышы - башҡорт теленең дә ҡыпсаҡ телдәре ғаиләһенә ҡарауы.

Монгол баҫҡынсылығы ҡыпсаҡтарҙың байтағын Волга буйҙарына, Көньяҡ Уралға ҡасып китергә мәжбүр итә. Тап шул осорҙа башҡорттар биләгән ерҙәргә ҡыпсаҡтар күпләп үтеп инә. Үҙҙәре лә монгол яуына ҡаршы торған башҡорттар уларҙы бер ниндәй дәғүәһеҙ ҡабул итә. Дәште Ҡыпсаҡтың 1222 - 1230 йылдарҙа монголдар тарафынан тулыһынса яулап алыныуына төрлө сығышлы ҡәбиләләр араһында элек-электән була килгән низағтар, ҡәбилә башлыҡтарының сәйәси амбициялары, тышҡы дошманға ҡаршы берҙәм көрәш алып барыуҙы ойоштороусы көс булмауы төп сәбәп булып тора. Мәҫәлән, ҡыпсаҡтарҙың иң көслө ырыуҙарынан һаналған туксабалар, нәҫелдәштәре дуруттар менән күп йылдар дауамында дошманлашып йәшәгәнлектән, монгол баҫҡынсылары яғына сыға, ә дуруттар тиңһеҙ алышта тамам ҡыйратыла.

***Тарихсы Р.Ғ. Кузеев башҡортлашҡан ҡыпсаҡтарҙың өс ҙур төркөмгә бүленеүен билдәләп үтә. Был төркөмдәрҙең һәр ҡайһыһының үҙенә генә хас тамғалары бар.*** Беренсе төркөмгә ҡара ҡыпсаҡ ырыуы вәкилдәре инә. Тарихи әҙәбиәттә был атама шул көйөнсә теркәлгән хәлдә лә ошо ырыу информаторҙары йыш ҡына үҙҙәренең ырыуын ҡарыйҡыпсаҡ, тип атай. Атаманың ҡарый тигән өлөшө боронғо, тәүге, ҡарт тигән мәғәнәләргә эйә. Тикшереүсе А.Н. Кононов "Коркут атам китабы"на иҫкәрмәләрендә боронғо төркиҙәрҙә "ҡара" һүҙенең ҡара төҫтө белдереүенән башҡа "насар", "яман", "төньяҡ", "ҙур", "көслө", "баш" мәғәнәләрендә ҡулланылыуына иғтибар итҡән. Ошолайыраҡ фекер итһәк, ҡара ҡыпсаҡ (ҡарый-ҡыпсаҡ) атамаһының көслө, ғәйрәтле, күп һанлы ҡыпсаҡ мәғәнәһендә ҡулланыла башлауын ҡуҙаллап була. Ҡара ҡыпсаҡ этнонимы ҡырым татарҙарында, синьцзян ҡырғыҙҙарында, ҡаҙаҡтарҙа ла бар, һуңғыларының составында улар киң таралған һәм иң күп һанлы ырыуҙарҙың береһе булып иҫәпләнә. Ҡара ҡыпсаҡтарҙың сарыш, аслы, сайҡан исемле ырыу бүлемдәре бар.

Ҡара ҡыпсаҡтарҙың ата-бабалары тураһындағы мәғлүмәттәр дөйөм уғыҙ-ҡыпсаҡ риүәйәттәренә хас сюжеттар аша бирелә. Башҡорт шәжәрәләрендә Ҡыпсаҡ хандың Уғыҙ бей тарафынан уллыҡҡа алыныуы, Итиль йылғаһы буйындағы ерҙәрҙе яулап алырға ебәрелеүе хаҡында бәйән ителә. Башҡорт ҡыпсаҡтарының төп бабаһы - Ҡыпсаҡ хандың улы Лач (Лаж) бей, Лач бейҙең улы Ҡолһары бей ҡарый-ҡыпсаҡтарҙың өс түбәһенең атаһы булып, башҡа ҡыпсаҡ нәҫелдәре уның икенсе улы Алмай бейҙән таралған. Ике вертикаль һыҙыҡтан торған ҡабырға тамға төп ҡара ҡыпсаҡ тамғаһы булып тора.

Ҡыпсаҡтарҙың икенсе төркөмөнә ҡарағай-ҡыпсаҡ, гәрәй-ҡыпсаҡ (төп тамғалары - ҡапҡа тамға), сәнкемҡыпсаҡ, бошман-ҡыпсаҡ, һыуынҡыпсаҡ (улар һәнәк тамғаны ла ҡулланған) исемле ырыу бүлемдәре инә. Башҡорт риүәйәттәрендә бошманҡыпсаҡтарҙың төп бабаһы итеп легендар Бошман (Бачман) бей күрһәтелә. Ул ҡыпсаҡтарҙың олбурлик (илбари) ҡәбиләһе юлбашсыһы булып, Итиль (Волга) йылғаһы буйында монгол-татар баҫҡынсыларына аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәтә, әммә әсиргә алынып, Менгу ҡаған тарафынан язалап үлтерелә. Бошмандың иҫән ҡалған ырыуҙаштарының бер өлөшө Көньяҡ Уралға табан ҡасып китеп, башҡорттарға килеп ҡушыла. Бошманлы ҡыпсаҡтарҙың хәҙерге татар этносы формалашыуында ла ҡатнашыуы ҡуҙаллана, шулай уҡ ҡырғыҙҙарҙың азыҡ ҡәбиләһе составында һәм ҡаҙаҡтарҙың кунграт ырыуына ҡараған бушман исемле этник төркөмдәр билдәле.

Гәрәй-ҡыпсаҡтарҙың тамғалары кунграт һәм кереит ҡәбиләләре тамғалары менән бер иш. Монголдарға тиклем үк Ҡытай сигендә кереит берләшмәһе була, әммә ул XIII быуат башында монголдар тарафынан яулап алына. Күрәһең, артабан улар монгол ғәскәре хәрәкәтендә ҡатнашып, ахырҙа ҡайһы бер төрки этностары составына инеп китә. Ошо этноним үзбәк, ҡырғыҙ һәм ҡаҙаҡ халыҡтарында осрай. XVII быуатта монголдар составында ла кирэй ырыуы булғанлығы билдәле. Башҡорттарҙағы гәрәй-ҡыпсаҡ, кирәй, гәрә этнонимдары, ҡырым татарҙары составындағы герей ырыуы атамаһы ошо урта быуаттарҙағы кереиттарҙың хәҙерге варисҭары икәнлегенә бер ишара булғандай. Бында беҙ XIII - XIV быуаттарҙа монгол сығышлы кунграттар һәм төрки киреиттарҙың ҡыпсаҡтар менән булған тығыҙ бәйләнешен күҙаллай алабыҙ.

Башҡорт ҡыпсаҡтарының өсөнсө төркөмөнә аҡ ҡыпсаҡтар, йә иһә төркмән-ҡыпсаҡтар инә. Ғөмүмән, башҡорт ырыуҙары бүлемдәре араһында төркмән этнонимы йыш осрай. Быны башҡорттарҙы хәҙер беҙ төркмән тип атаған халыҡ менән бәйләп аңлатыу бигүк дөрөҫ булмаҫ ине. Төркмән этнонимы шулай уҡ нуғайҙар һәм үзбәктәрҙә лә осрай. Әммә беҙ XVI - XVIII быуаттарҙа башҡорттар менән башҡа бер халыҡтарҙың, мәҫәлән, ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар, ҡалмыҡтарҙың аралашыуын дәлилләүсе документтарҙы таба алһаҡ та, башҡорт-төркмән бәйләнештәре хаҡында ошоно уҡ раҫлай алмайбыҙ. Күрәһең, башҡорттарҙың этник составында ошо этноним менән бәйле элементтарҙың хасил булыуы боронғораҡ осорға ҡарай.

Ғәрәп сығанаҡтарында "төркмән" һүҙе тәү башлап X быуатта географ әл

Муккаддаси яҙмаларында осрай, ул был исем менән Һырдарья уғыҙҙарын атай. Билдәле булыуынса, Ислам динен ҡабул иткән төркиҙәр үҙҙәрен төркмән, тип атай башлай. Бохара һәм Сәмәрҡәнд өлкәләрендә йәшәүсе бөгөн үзбәктәр үҙҙәрен төркмән, тип иҫәпләй. Бында монгол яуынан бик күпкә алдараҡ көн иткән уғыҙҙар XII быуатта көнбайышҡа, Амударья буйҙарына, унан Каспий арьяғына йүнәлә. Әммә фәҡир йәшәгән Һырдарья уғыҙҙарының бер ни тиклеме карлуктарға ҡушыла, Нуратауҙа көн итеп, үҙҙәрен төркмән, тип таный. Улар артабан монгол баҫҡынсылығына дусар ителеп, көнбайышҡа йүнәлтелгән дөйөм хәрәкәткә ҡушылырға мәжбүр була. Ошо осорҙа, бигерәк тә Алтын Урҙа хакимлығы осоронда, улар ҡыпсаҡтар менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Төркмәндәрҙең Аҡман һәм Ҡараман исемле юлбашсыларының исемдәре ҡайһы бер башҡорт шәжәрәләрендә лә осрай. Легендар Уғыҙ хандың 6-сы улының исеме Тағ булып, уның нәҫелдәре үҙҙәренә тағ, тау, таулы автонимдарын ала. Мәҫәлән, башҡорт ырыу атамалары бүлемдәренең 25-е ошо тау тамыры менән бәйле, бындай этнонимдар шулай уҡ төркмәндәрҙә, ҡарағалпаҡтарҙа, үзбәктәрҙә йыш осрай. Башҡорт төркмән-ҡыпсаҡтарының төп тамғаһы ла - һуйыр аяҡ йәки ҡаҙаяҡ - үрҙә аталып киткән халыҡтарҙың ошондай уҡ "төркмән" тамғаһы менән бер иш.

XIII - XIV быуаттарҙа ҡыпсаҡтар Урал алды территорияһының гәйәт ҙур киңлектәрендә, Волга һәм Йыйыҡ йылғалары араларындағы далаларҙа күсенеп йөрөй. Йәйҙәрен уларҙың көтөүлектәре Ыҡ һәм Ағиҙел йылғалары араһындағы ерҙәрҙә була. Әммә монгол баҫҡынсылығы арҡаһында арта барған миграцион ҡыҫым уларҙы төньяҡҡа һәм көнсығышҡа табан күсеп китергә мәжбүр итә. Ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған риүәйәттәрҙә ата-бабаларының Кинель йылғаһы үҙәненән, Туҡ һәм Соран йылғалары буйҙарынан, Һамар үренән әлеге йәшәгән ерҙәренә күсеп килеүҙәре хаҡында һөйләнелә.

Ҡыпсаҡтар Ағиҙел йылғаһының уң яғы буйлап уның урта һәм үрге ағымы тарафтарынаса килеп етә, унан Дим йылғаһының түбәнге ағымы буйҙарындағы ерҙәрҙе, Ағиҙелдең һул яҡ ярын һәм Елем үҙәнен биләй. Ҡыпсаҡтарҙың ҙур өлөшө Ыҡ бассейнына ыңғайлай. XVIII быуатҡа ҡараған документтарҙа Ыҡ һәм Сөн буйында "Сарыш-Ҡыпсаҡ олоҫо", ә Ағиҙел йылғаһының түбәнге ағымында, Камаға ҡойған еренә тиклем ике яры буйында "Гәрәй олоҫо" булыуы теркәлгән. Бөгөлмә ҡалҡыулығының көнсығышында, Асылыкүлгә яҡын ерҙәрҙә аслы-ҡыпсаҡтар йәшәй, Ыҡ йылғаһынан көнбайышҡараҡ төркмән-ҡыпсаҡтар биләмәләре була. Гәрәй-ҡыпсаҡтар Елем йылғаһы буйҙарында көн итә, унан көнсығышҡа, таулы зонаға күсенә. Ҡарағай-ҡыпсаҡтар тау араларындағы үҙәндәрҙе биләй. Ҡара ҡыпсаҡтар, сәнкем-, һыуын-, бошман-ҡыпсаҡтар Ағиҙел йылғаһының көньяҡ бөгәләнән Һаҡмар йылғаһынының түбәнге ағымы тарафтарына тиклем ерҙәрҙе биләй, XV-XVI быуаттарҙа Нөгөш йылғаһы буйлап төньяҡҡа йүнәлә, Оло Ыҡ йылғаһының һул ҡушылдыҡтары буйындағы урманлы ерҙәрҙә көн итә. XVI -XIX быуаттарҙа ҡарағай-ҡыпсаҡтар бөрйәндәр һәм түңгәүерҙәр менән бер ваҡытта Урал арьяғындағы ерҙәргә үтеп инә. XVII - XVIII быуаттарҙа, нуғайҙарҙың ошо ерҙәрҙән күсеп китеүе менән, ҡыпсаҡтар Һамар йылғаһының уң ҡушылдыҡтары, Оло һәм Кесе Үҙән йылғалары үҙәндәрендәге ерҙәрҙе биләй. XIX быуаттың икенсе яртыһында улар башҡа бер башҡорт ырыуҙары вәкилдәре менән Оло Ырғыҙ буйҙарына күсеп китә.

***Хәҙерге ваҡытта ҡыпсаҡ ырыуы вариҫтары Башҡортостандың Күгәрсен, Көйөргәҙе, Ейәнсура, Йылайыр, Ишембай, Белорет, Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил, Әлшәй, Мәләүез райондарында, Ырымбур, һарытау һәм Һамар өлкәләренең байтаҡ ҡына башҡорт ауылдарында йәшәй.***

Ҡыпсаҡ ырыуы генофондында R1a1-M198 гаплотөркөмө вәкилдәре өҫтөнлөк итә (54 процент). Шулай уҡ күп һанда булмаған башҡа гаплотөркөм кешеләре лә бар: N1b-P43 (6%), N1c1-M178 (6%), R1b-M73 (5%), R1b-M269 (3%), C-M130 (3%), E1b1-M35 (2%) һәм J2-M172 (2%). Был тикшеренеүҙәр ҡыпсаҡтарҙың ата-бабаларының төп өлөшө боронғо һинд-европа (һинд-иран) ҡәүемдәренән булып, I мең йыллыҡ урталарында Үҙәк Азия күскенселәре мөхитендә төркиләшеүен фараз итергә мөмкинлек бирә.

Ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары дөйөм башҡорт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, баҫҡынсыларға ҡаршы ҡыйыу көрәшә, ер һәм рух азатлығы өсөн көтәрелгән ихтилалдарҙа мөһим роль уйнай. Һыуын-Ҡыпсаҡ олоҫо старшинаһы Яманһары Яппаров беренселәрҙән булып Пугачев лагерына килеп етә, ә Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫо старшинаһы Кинйә Арыҫланов 1773-1775 йылдарҙа барған пугачевсылар хәрәкәтенә баш күтәргән башҡорттарҙың идеологы булып таныла. Поход старшинаһы Аҡмәмбәт Ураҙғолов етәкселегендә 9-сы башҡорт полкы яугирҙары рус армияһы составында Парижды алыуҙа ҡатнаша. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҡыпсаҡ ырыуының аҫыл ир-егеттәре Ғәфиәтулла Арыҫланов, уның ауылдашы Сәлмән Бикбимеров, Ҡара-Ҡужаҡ бей тоҡомо Морат Ҡужаҡов, Садиҡ Сайранов, Әбдерәүеф Дәүләтов, Зөбәй Үтәғоловтар Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

Башҡорт автономияһы өсөн барған милли хәрәкәт башында байыусылар араһында бер туған Ғабдулла һәм Хөрмәтулла Иҙелбаевтар була, ә башҡорттар араһынан тәүге композитор булып танылыу табаҫаҡ Ғәзиз Әлмөхәмәтов ҡыҙылдарға ҡаршы күтәрелгән Ҡыпсаҡ добровольцтар отрядын төҙөүҙә әүҙем ҡатнаша. Совет Башҡортостаны тарихында Бәхтегәрәй Шәфиев һәм Шәһит Хоҙайбирҙиндар лайыҡлы урын биләй. Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов СССР тарҡалғандан һуң 20 йыл буйына Башҡортостан Республикаһының арҙаҡлы етәксеһе, уның Беренсе Президенты булды, Рәсәй етәкселеге хөрмәт иткән федераль кимәлдәге сәйәсмән булып танылды.

**Республикабыҙҙа танылыу тапҡан байтаҡ ҡына хужалыҡ һәм дәүләт эшмәкәрҙәре, билдәле яҙыусылар, шағирҙар, ғалимдар, табиптар, сәнғәт әһелдәре, Башҡортостандың социаль-иҡтисади һәм рухи үҫешенә тос өлөш индерә алған арҙаҡлы шәхестәр ҡыпсаҡ ырыуы ауылдарында тыуып үҫкән. Билдәле башҡорт шағирҙары һәм яҙыусылары Ғабдулла Амантай, Баязит Бикбай, Рауил Бикбаев, Марат Кәримов, Гөлфиә Юнысова, Ноғман Мусин, Динис Буләков, Тамара Ғәниева, Сабир Шәрипов, Рәмил Йәнбәков, Ғәлим Хисамов, ғалимдар Мөхтәр Сәғитов, Зиннур Ураксин, Әхмәт Сөләймәнов, Ғәли Сәйетбатталов, Марат Зәйнуллин, Вәли Псәнчин, Марат Ҡолшәрипов, артистар Вәлиулла Мортазин, Ғиниәт Ушанов, Ғәшиә Абызгилдина, Тамара Хоҙайбирҙина, Муллаян Сөйәрғолов, Заһир Вәлитов, Римма Амангилдина, Минзәлә Хәйруллина, композитор Ғәзиз Дәүләтбирҙин, табиптар Венер Сәхәүетдинов, Марат Аҙнабаев, Сәлиә Мырҙабаева һәм башҡа арҙаҡлы ҡыпсаҡ ул-ҡыҙҙары менән ырыуҙаштары хаҡлы рәүештә ғорурлана.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**

---

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



## ТРАНСПОРТҠА УЛТЫРҒАНДА УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Транспортҡа ултырғанда ете тапҡыр ошолай тип әйтергә:

**Йә рәҡииб у джәллә джәләәлуһ.**

Шунан түбәндәге аятты уҡырға кәрәк:

**Субхәәнәл-ләҙии сәххара ләнәә һәәҙәә үә мәә күннәә ләһү муҡриниин.**

"Быларҙы беҙҙең хеҙмәтебеҙгә биргән Аллаһҡа (сөбхәналлаһ, әлхәмдүлилләһ, Аллаһу әкбәр, тип) тәсбих әйтәбеҙ. Юҡһа, беҙ быларҙы барлыҡҡа килтерә алмаған булыр инек" ("Әз-Зухруф", 13-сө аят).

## БАҘАРҒА БАРЫР АЛДЫНАН УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

**Ләә иләәһә илләллааһу үәхдәһү ләә шәриикә ләһ. Ләһүл-мулкү үәләһүлхәмд. Юхйии үә юмииту үә һүүә хәййүн ләә йәмуут. Бийәдиһилхайру үә һүүә ғәләә күлли шәй'ин ҡадиир.**

"Баҙарға инер алдынан ошо доғаны уҡыған кешенең иҫәбенә Аллаһ Тәғәлә меңләгән изге эште яҙып ҡуйыр, меңләгән гонаһын ярлыҡар, уның дәрәжәһен меңдәрсә тапҡыр күтәрер һәм Ожмахта зиннәтле һарай бирер"

*(Тирмизи. "Дәғүәт", 36-сы хәҙис).*

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Етенсе хат: "Кешеләрҙе нимә берләштерә"

Хәстәрҙәр ҡаттары. Хәстәрлек кешеләр араһында мөнәсәбәттәрҙе нығыта. Ғаиләне нығыта, дуҫлыкты нығыта, ауылдаштар, бер ҡала кешеләре, бер ил халҡы араһындағы мөнәсәбәттәрҙе нығыта.

Кешенең тормош юлын күҙ алдынан үткәрегеҙ.

Кеше тыуа һәм уның тураһында тәүге хәстәрҙе әсәй күрә; йәйләп (бер нисә көндән) атаһының хәстәре бала менән туранан-тура бәйләнешкә инә (бала тыуғанға тиклем дә уның тураһында хәстәрлек күрәләр, әммә ул бер ни тиклем "абстракт" була - атай-әсәй бала тыуыуына әҙерләнә, уның тураһында хыял иткән).

Икенсе кешене хәстәрләү тойғоһо бик иртә барлыҡҡа килә, айырыуса ҡыҙҙарҙа. Ҡыҙ баланың теле лә сыҡмаған саҡта уҡ ул ҡурсағын ҡайғырта, бәпләй. Малайҙар бик бәләкәй саҡтарында бәшмәк йыйырға, балыҡ тоторға яраталар. Емеш-еләк, бәшмәкте ҡыҙҙар ҙа йыйырға ярата. Ә бит улар үҙҙәре өсөн генә түгел, бар ғаилә өсөн йыялар. Өйгә алып ҡайталар, ҡышҡылыҡҡа әҙерләргә бирәләр.

Йәйләп балалар юғарыраҡ хәстәрҙәрҙең объектына әүерәләр һәм үҙҙәре лә ысын һәм ҙур хәстәрлек күрә башлайҙар - ғаиләһе тураһында ғына түгел, ә ата-әсәһенең хәстәре арҡаһында йөрөй башлаған мәктәбе, ауылы, ҡалаһы һәм иле хаҡында...

Хәстәрлек кинәйә һәм альтруистикка әүерелә бара. Үҙе хаҡында хәстәрлек күргән өсөн балалар ологайған атаәсәһен ҡарай, улар инде балаларының игелегенә бер нисек тә түләй алмаған хәлдә лә. Һәм ошо ололар тураһында хәстәрлек, аҙаҡ баҡыйлыҡҡа күскән атай-әсәй тураһында хәтирәләр ғаиләнең һәм ватандың тарихи хәтере тураһында хәстәрлеккә барып тоташа.

Әгәр хәстәрлек үҙенә ҡарата ғына икән, эгоист үҫеп сығасаҡ.

Хәстәрлек - кешеләрҙе берләштерә, үткәндәр тураһында хәтерҙе нығыта һәм киләсәк өсөн йүнәлтелгән була. Был тойғо ғына түгел, ә яратыу, дуҫлыҡ, илһөйәрлек тойғоларын белдереү. Кеше хәстәрлекле булырға тейеш. Хәстәрлек күрә белмәгән һәм ғәмһеҙ кеше - насар һәм береһен дә яратмаған кешелер, моғайын.

Әхлаҡлылыҡҡа йәлләү тойғоһо айырыуса хас. Мәрхәмәт күрһәтеүҙә кеше һәм донъя менән берлегенде аңлау бар (кешеләр, халыҡтар менән генә түгел, ә хайуандар, үҫемлектәр, тәбиғәт менән дә һ.б.). Йәлләү тойғоһо (йәки шуға яҡын ниҙер) беҙҙе мәҙәниәт ҡомарткылары, тәбиғәт, айырым күренештәр, хәтергә ҡарата ихтирам өсөн көрәшергә һәм һаҡларға этәрә. Кемделер ҡайғыртыуҙа башҡалар менән, милләтең, илең, бар ғаләм менән берлегенде аңлау бар. Нәҡ шунлыҡтан онотола барған мәрхәмәтлек төшөнсәһе тулыһынса кире тергеҙелеүҙе һәм үҫтереүҙе талап итә.

"Кеше өсөн бәләкәй булған аҙым кешелек өсөн ҙур", тигән һүҙҙәр ғәжәйеп дөрөҫ. Быға меңәрләгән миҫал килтерергә була: айырым кешегә изгелекле булыуы бер нәмә лә тормай, әммә кешелеккә изгелекле булыу иҫ киткес ҡатмарлы. Кешелекте үҙгәртеп булмай, әммә үҙеңде - еп-еңел. Баланы туйындырыу, ҡарт кешене урам аша сығарышыу, трамвайҙа урын биреү, яҡшы эшләү, ихтирамлы һәм илтифатлы булыу һәм башҡалар - барыһы ла кеше өсөн еңел ғәмәлдәр, әммә бер юлы барыһы ла үтәй алғандай түгел. Бына ни өсөн тәү сиратта эште үҙеңдән башларға кәрәк.

Изгелек ахмаҡ була алмай. Яҡшы ғәмәл бер ҡасан да ахмаҡ булмай, сөнки ул эскерһеҙ һәм файҙа, "аҡыллы һөҙөмтә" эҙләмәй. Ҡылынған изгелекте үҙ маҡсатына ирешә алмаған осраҡта, йәки "ялған изгелек", изгелек булмай тороп, шулай ҡабул ителгән осраҡта ғына "ахмаҡлыҡ" тип атарға мөмкин. Ысын күңелдән ҡылынған изге эш аҡылһыҙлыҡ була алмай, уны аҡыл менән йәки башҡа төрлө баһалап булмай. Изгелек шуныһы менән яҡшы ла инде.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

# ВЫБОРЫ ГЛАВЫ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
# 6, 7, 8 СЕНТЯБРЯ 2024

РОССИЯ · ТРУД · НАРОДОВЛАСТИЕ · СОЦИАЛИЗМ
КПРФ

# С НАРОДОМ – ЗА НАРОД !

# АРТУР ШАЙНУРОВ

**КАНДИДАТ НА ДОЛЖНОСТЬ ГЛАВЫ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН ОТ КПРФ**

- ☑ **ВЛАСТЬ ПРИНАДЛЕЖИТ НАРОДУ**
- ☑ **МОЛОДЕЖИ–ПЕРСПЕКТИВЫ РАЗВИТИЯ**
- ☑ **РАБОЧИЕ МЕСТА С ДОСТОЙНОЙ ЗАРПЛАТОЙ**
- ☑ **ПОДДЕРЖКА СЕМЬИ, МАТЕРИНСТВА И ДЕТСТВА**

**Избрание на должность Главы Республики Башкортостан АРТУРА ШАЙНУРОВА — это ПЕРВЫЙ ШАГ к восстановлению народовластия, началу созидательной политики и возрождению республики на принципах социальной справедливости и социализма.**

Публикация кандидата Шайнурова Артура Альбертовича осуществляется бесплатно в соответствии с частью 1.1 статьи 65 Кодекса Республики Башкортостан "О выборах"




# КРАТКАЯ ПРОГРАММА КАНДИДАТА НА ДОЛЖНОСТЬ ГЛАВЫ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН ИВАНА СУХАРЕВА

- Введение республиканских программ по улучшению демографии;
- Поддержка участников СВО и их семей;
- Распределение налоговых поступлений с фиксацией процентного соотношения:
  33,3% - в федеральный бюджет,
  33,3% - в региональные бюджеты,
  33,3% - в местные бюджеты;
- Борьба с коррупцией;
- Сокращение количества чиновников на 1/3;
- Привлечение инвестиций в республику;
- Максимальная поддержка предпринимательской и инновационной активности, создание комфортной среды;
- Жесткий контроль в сфере ЖКХ;
- Развитие туризма. Внутренняя авиация и водное сообщение
- Глобальная поддержка сельского хозяйства в рамках обеспечения продовольственной безопасности страны. Создание условий для развития массового фермерства;
- Обеспечить рабочими местами всех жителей Башкирии. Минимальная заработная плата 50 000 рублей. Социальная поддержка пенсионеров и ветеранов;
- Жесткий контроль в сфере экологии;
- Выделение земельных участков для многодетных семей только с инженерными коммуникациями, кредит на строительство дома с минимальной процентной ставкой;
- Качественные дороги. Газ, электричество, горячая вода, сотовая связь и интернет в каждый дом Башкирии;
- Развитие бесплатного массового детско-юношеского спорта. Бесплатное дополнительное обучение талантливых детей за счет республиканского бюджета.

*Площадь для публикации агитационных материалов кандидата Сухарева Ивана Константиновича предоставлена бесплатно в соответствии со ст. 65 Кодекса Республики Башкортостан «О выборах».*

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# "КӨҘ РОМАНТИКАҺЫ" САҠЫРА



**Рәсәйҙең Евгений Светланов исемендәге Дәүләт оркестры һәм Дмитрий Крюков етәкселегендәге Башҡортостан Дәүләт оркестры билдәле солистар командаһы менән бергә өс көн дауамында, баш ҡала үҙәгендә симфоник музыка тыңлау мөмкинлеге бүләк итә.**

22 августа Дмитрий Крюков етәкселегендәге БР-зың Дәүләт академия симфоник оркестры Рәсәйҙең халыҡ артисы Денис Мацуев, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артистары, ағалы-ҡустылы Илдар һәм Асҡар Абдразаҡовтар менән сығыш яһай.

23 августа Башҡортостандың Дәүләт оркестрының Артур Нәзиуллин (кларнет), Женисбек Пиязов (бас-баритон), Бегибай Темирбаев (тенор), Хурсандбек Атамуратов (баритон), Маман Жумабаев (баритон), Отемис Джуманиязов (тенор) менән сығышы көтөлә.

24 августа Е.Ф. Светланов исемендәге легендар Дәүләт академия симфоник оркестры Башҡортостандың халыҡ артисы Дмитрий Крюков етәкселегендә сығыш яһаясаҡ.

Фестиваль быйыл икенсегә ойошторолa. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән ойошторолған сараны халыҡ йылы ҡабул итте. Илдең алдынғы коллективтары һәм артистары башҡарыуындағы музыкаль шедеврҙар уҙған йылда Өфө халҡы күңеленә хуш килде. "Беҙ Радий Фәрит улы Хәбировҡа сәнғәтқә системалы ярҙамы һәм Башҡортостан мәҙәниәтен үҫтереүгә иғтибары өсөн рәхмәтлебеҙ. "Көҙ романтикаһы" - үткәреү идеяһы һәм урынынан алып исеменә тиклем тулыһынса республика Башлығының инициативаһы. Һәм барыһы ла маҡсатҡа ярашлы - икенсе йыл рәттән был Рәсәй мәҙәниәте өлкәһендәге иң ҙур сараларҙың береһе", - ти Башҡортостандың Дәүләт оркестры директоры Артур Нәзиуллин. Концерттар 19.00 сәғәттә башлана.

**Әйткәндәй, "Көҙ романтикаһы" тамамланыу менән баш ҡала халҡы ошо уҡ Совет майҙанында "Геройҙар ваҡыты" Бөтә Рәсәй патриотик йыр асыҡ конкурсында ҡатнашыусыларҙы тыңлай алаcаҡ. Өсөнсө тапҡыр уҙғарылған сара быйыл 26-27 августа үтә һәм Рәсәй Геройы, данлыҡлы генерал-майор Миңлеғәли Шаймуратовтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арнала.**

# ЯУГИРҘАР ТУРАҺЫНДА...

**"Пятнашка" хәрби интернациональ бригадаһының ижади төркөмө Рәсәй Федерацияһының төрлө төбәктәренән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы ирекмәндәр тураһында документаль фильмдар серияһы өҫтөндә эшләй башланы. "Доброволец" тигән исем менән беренсе фильм төшөрөү тамамланыуға яҡынлаша. Картина Башҡортостан яугиры - республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Алексей Локотченкоға арналған.**

Фильм авторҙары Алексей менән таныш булған кешеләр, шул иҫәптән туғандары һәм уҡытыусылары, хеҙмәттәштәре һәм коллега-депутаттары менән аралаша. Фильм төшөрөү яугирҙың тыуған яғында, хәрби часта һәм алғы һыҙыҡта бара. Өфөлә фильмдың ижади төркөмө Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа булып, парламент Рәйесе Константин Толкачев менән әңгәмәләште. Һөйләшеү барышында ауап биргәндә парламент спикеры депутатты ҡулына ҡорал алырға нимә этәргәне, сәйәсмәндән яҡшы яугир, ә яугирҙан яҡшы сәйәсмән килеп сығамы-юҡмы икәне тураһында фекерҙәре менән уртаҡлашты.

Константин Толкачев МХО билдәмәһендә Дәүләт Йыйылышы депутаты Яков Кугубаевтың, шулай уҡ элекке саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы депутаты Булат Йомаҙиловтың булыуын билдәләне.

- Алғы һыҙыҡта Башҡортостандан хәрби хеҙмәткәрҙәр күп. Республикабыҙ иҫәбендә Рәсәй Федерацияһының һигеҙ геройы бар. Баштан уҡ Башҡортостан Махсус хәрби операция үткәреү тураһындағы ҡарарҙы теләп хупланы, һәм бөгөн ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн фронтҡа һәр яҡлап ярҙам күрһәтәбеҙ. Оҙаҡ ваҡыт хәрби хәрәкәттәр биләмәһендә республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры, ә хәҙер БР Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Азат Бадранов булды. Хәрби хәрәкәттәрҙә муниципалитет хакимиәттәре вәкилдәре, муниципаль советтарҙың күп кенә депутаттары ҡатнаша, - тине К. Толкачев. Фильм өҫтөндә эште октябрь башында тамамлау планлаштырыла.

# ҺӘЙКӘЛДӘР - ЛАЙЫҠЛЫЛАРҒА



**Хәйбулла районының Аҡъяр ауылында оҫта ҡурайсы һәм башҡорт фольклорының күренекле вәкиле Йомабай Иҫәнбаевҡа һәйкәл асылды. Тантана 17 августа Түңгәүер ырыуы йыйыны барышында үтте, унда билдәле солистар һәм ҡурайсылар ансамблдәре ҡатнашты.**

Йомабай Иҫәнбаев һәйкәленең авторы - билдәлелек яулаған башҡорт скульпторы, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Хәниф Хәбибрахманов (Өфөләге Заһир Исмәғилев һәйкәле, "Ете ҡыҙ" фонтаны һәм башҡалар).

"Һәйкәл асылыуы - бик мөһим ваҡиға. Ул башҡорт халҡының мираҫына һәм традицияларына ихтирам билдәһе булып тора", - тип билдәләне Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры Салауат Кирәев.

Шул уҡ көндә ҡурайсының тыуған төйәгендә уға бағышланған китаптың исем туйы уҙҙы. Данлыҡлы ҡурайсы хаҡында яҡташтары, китаптың авторҙаштары - Йомабай Иҫәнбаевтың биографияһын өйрәнгән Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбай һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Түңгәүер ырыуы башлығы Хөрмәтулла Үтәшев үҙ һүҙен әйтте.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Башинформ" Өфөлә Йомабай Иҫәнбаевтың тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында китап-альбом нәшер ителеүе хаҡында хәбәр иткәйне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕМЕН ТИҺӘҢ...

## һүҙең менән эшең бер булһын

Һүҙ - һуған ҡабығы: береһен асһаң, икенсеһе сыға.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Кеше ҡайһы саҡта башҡаларға үпкәләй белдерә? Уның юмор тойғоһон һәм... бәхетһеҙ булыу хоҡуғын шик аҫтына ҡуйғанда.

(Синклер Льюис).

Бәхет эҙләүсе кеше өйө барлығын белгән, әммә ул өйҙө таба алмай ҡаңғырған иҫерекҡа оҡшаш.

(Вольтер).

Беҙ бәхет тип атаған нәмә - оҙаҡ ваҡыт тыйылып торған ихтыяжды ҡандырыу һөҙөмтәһендә килеп тыуған тойғо ул.

(Зигмунд Фрейд).

Үҙенең күңел ихтыяжына тап килгән шарттарҙа йәшәүсе кеше, әлбиттә, бәхетле, әммә үҙ ихтыяжын теләһә ниндәй шарттарға яраҡлаштыра белгәндәр тағы ла бәхетлерәк.

(Дэвид Юм).

Ҡасандыр бәхетле булған урынға янынан әйләнеп ҡайтма, ул һинең хәтерҙә тере хәтирә булып ҡалһын.

(Агата Кристи).

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ауылдан ситтә ултырған бер бәләкәй йортта бер дәрүиш йәшәгән. Халыҡ уны аҡылы һәм үҙенең йәшәү рәүешенә тоғролоғо, нәфселе булмауы өсөн хөрмәт иткән. Бына бер саҡ был дәрүиштең йорто янып киткән. Ауыл халҡы утты шәйләп, йүгереп килеп, өй эсендә булған ҡайһы бер әйберҙәрҙе сығара башлаған. Ут һүнмәгәс, биҙрәләп һыу ташып, утҡа һибергә тотонғандар. Әммә ошо мәлдә халыҡты бер нәмә аптыратҡан: дәрүиш утты һүндерергә ярҙам итеү урынына, ауылдаштары ҡотҡарып алып ҡалған әйберҙәрҙе утҡа ташлай торған.**

**Бына ут һүнгән һәм кешеләр ҙә йылғанан һыу ташыуҙы туҡтатҡан. Шул саҡ көтмәгәндә ҡойоп ямғыр яуып ебәргән. Ошо мәлдә халыҡты тағы ла аптыратып, дәрүиш биҙрә алып, йылғанан һыу ташый, йорто урынында бысҡып ятҡан утҡа һыу һибә башлаған. Кешеләр нимә уйларға ла белмәй, аптырап баҫып торған-торған да, дәрүиштән ниңә былай итеүен һорағандар.**

**- Мин бар нәмәгә шатланам, - тигән дәрүиш. - Ут барлыҡҡа килә икән, мин шатланам һәм уға янырға ярҙам итәм. Ямғыр яуа икән, мин уға ла шатмын һәм уға ла яуырға ярҙам итәм..."**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# БЕРҘӘМЛЕК ЕМЕШЕ



**Был фотолағы егеттәр Әбйәлил районы Үтәгән ауылында йәшәйҙәр. Әлеге мәлдә улар атай-олатайҙарына, өлкән ағайҙарына эйәреп, ямғырҙан һуң соҡор-саҡыры күбәйеп киткән ауыл юлдарын төҙөкләндереү эштәрендә ярҙам итә.**

Сираттағы эш мәлендә бергәләп фотоға төшкәндәр ҙә инде. Аяҡҡа баҫып тороуҙары - ныҡ, башҡарған эштәренең мөһимлеген аңлауҙары күҙҙәрендә сағыла. Үҙҙәренә генә яраҡлы бәләкәй көрәктәренең дә булыуы, уларҙың эш рәтен белеп, оло-ларға ярҙамсы булып үҫеп килгән егеттәр икәнлектәрен әллә ҡайҙан күрһәтеп тора, афариндарҙың.

Берҙәмлектә - көс, тигән халҡыбыҙ. Ошо хәҡиҡәтте дәлилләп йәшәй Үтәгән ауылы халҡы. Ауылдың юлдарын төҙөкләндереү тураһында һүҙ сыҡҡас та, барыһы ла дәррәү генә йыйылып, йүнәтеп тә ҡуйған. Ауыл депутаты Рөстәм Мансуров етәкселегендәге өмәлә йәше-ҡарты ҡатнашҡан, ир-егеттәр техникаһын да тапҡан, үҙҙәренең эштәрен ситкә ҡуйып, ваҡыттарын да бүлгән. "Өс көн дауамында барған эштәр ауылдың йөҙөн генә йәмләп ҡалманы, ә юл йөрөүгә бәйле хәүефтәрҙе кәметте", ти урындағы халыҡ.

Үтәгән - ҙур һәм матур ауыл һәм әле булһа үҫеүен дауам итә. Олоһо-йәше өй-ихаталарын төҙөк һәм таҙа итеп тотоп йәшәй, барыһы ла ауыл һәм район тормошонда әүҙем ҡатнаша. Ауылдың киләсәге өсөн хәүефләнәһе түгел, сөнки бында берҙәм, дәррәү, эшлекле халыҡ йәшәй.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 август 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2750
Заказ - 1429